✓Ҡарындаштарығыҙҙан һуң иң яҡын кешеләр күршеләрегеҙ була. Шуның өсөн күршеләр менән матур мөнәсәбәттә булығыҙ. Улар менән дуҫ тороғоҙ, шатлыҡ һәм хәсрәттәрен уртаҡлашығыҙ, ауырыған һәм сирләгән ваҡыттарында хәлдәрен һорағыҙ, үтенестәре булһа, үтәгеҙ, улар өсөн даими доға ҡылыусы булығыҙ.

РИЗАИТДИН нәсихәттәренән.

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

3 - 9 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2009 ЙЫЛ

№40 (354)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Китап хәлен кем белә?**

Уны яҙған түгел, нәшер иткән белә



2

**Туҡмала - туҡмала...**

ниңә иргә түҙә был ҡыҙ-ҡатын?



6

**Ҡурай ни өсөн ҡыҫҡартылды?**

Йәки Ҡулайлаштырыу ҡорбан һорай...



8-9

**Хәҡиҡәт тауышы -**

Ғәзим Шафиҡов тауышы...



11

**ТВ программа**

14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Милли рухтағы шәхес тәрбиәһен тик уҡытыусы ғына ғәмәлгә ашыра аламы?

*Спартак ИЛЬЯСОВ, Учалы районы:*

- Милли рухты, башҡорт рухын һаҡлау бер уҡытыусынан ғына тормай. Бәләкәй сағынан уҡ милли мөхиттә тыуған телендә ололар һөйләгән әкиәт-хикәйәттәр, риүәйәттәрҙе ишетеп, ғөрөф-йолаларҙы күреп-белеп үҫкән балала үҙ милләтенә ҡарата ыңғай мөнәсәбәт барлыҡҡа килә. Бар нәмәне лә төптән аңлай алмаған хәлдә лә, бала күреп-тойоп йөрөгән милли йәшәү рәүешен үҙ итә, яҡын күрә башлай. Милли рух балаларҙа тәбиғи рәүештә лә формалаша ала. Беҙҙең рухыбыҙҙа тәбиғилек көслө, һәм оло быуындарҙың шул уҡ үҫемлектәр, хайуандар донъяһына мөнәсәбәтен күреп үҫкән бала күңеленә лә билдәле бер милли сифаттарыбыҙ һеңә башлай. Мәҫәлән, көтөүҙән мөңрәп, тауыш бирә-бирә ҡайтып килгән һыйырҙы һәм инәһенә ҡаршы муйынына тағылған еҙ ҡыңғырауын сыңлатып сапҡан быҙауҙы күргән балала милләтебеҙгә хас булған бер-берендә һағыныу, яҡынлыҡ-туғанлыҡ хисе тиҙерәк яралалыр, тим.

Уҡытыусыларға килгәндә, уларҙың төп бурысы - башҡорт балаһының тәбиғәтендә, ҡанында булып, уның бәләкәй генә тормош тәжрибәһендә ярала башлаған рухи сифаттарҙы үҫтерә алыу. Әлбиттә, ошо ҡатмарлы эште барыһы ла юғары кимәлдә үтәй алмай әле. Минеңсә, бик яҡшы уҡытыусы, йәғни дәрес биреүсе булыу ғына аҙ, мөғәллимлек кимәленә етеү фарыз. Мөғәллим уҡыусыһына белем серҙәрен генә төшөндөрөү менән сикләнмәй, ә тормош һабаҡтарын бирә. Мөғәллимлек кимәленә күтәрелгән уҡытыусы ғына рух тәрбиәсеһе исеменә лайыҡ, тип уйлайым.

*Иҙрис НОҒОМАНОВ, Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылы хакимиәте хеҙмәткәре:*

- Шәхес тәрбиәһен тик уҡытыусыларға ғына ауҙарып, милләтебеҙ алдында үҙебеҙҙең, ата-әсәләрҙең, ғаиләнең яуаплылығын онотмайыҡ әле. Бала кеше бик теремек бит, ҡырҡҡа төрлөләнгән саҡтары ла була. Бала хаҡында уҡытыусыға билдәле булмаған мәғлүмәтте лә бары ата-әсә генә белеүен иҫәпкә алырға кәрәк. Уҡытыусының тәрбиә өлкәһендәге эшмәкәрлегенең йоғонтололоғо уның балалар алдындағы абруйы менән дә ныҡ бәйле. Элегерәк ауыл уҡытыусыһына шәхес булараҡ бирелгән баһа етәксе вазифа билгән кешеләрҙекенән дә юғарыраҡ ине, һәм уға халыҡ тарафынан ысын хөрмәт күрһәтелде. Был үҙе үк педагогтың мәртәбәһен күтәреп, уның тәрбиәүи мөмкинлектәрен арттырыусы фактор булып торҙо. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөн күптәр балалары алдында уҡытыусы хаҡында теләһә ниндәй имеш-мимеште һөйләүҙән, уны хурлау- яманлауҙан да бик тартынмай. Бындай мөнәсәбәт балаларға ла кире йоғонто яһамай ҡалмай, һәм уларҙа ысын милли сифаттарыбыҙҙы тәрбиәләү ауырлаша ғына барасаҡ.

Рухи тәрбиәгә килгәндә, балаларыбыҙҙы иманлы итеп тәрбиәләү төп маҡсатыбыҙға әйләнә бара. Ә иман тәрбиәһен дин юлында ғәмәлгә ашырыу уңайлыраҡ. Шуныһы ҡыуаныслы, ауылыбыҙҙа мәсеткә үҫмер малайҙар һәм ҡыҙҙар йөрөй башланы, уларға дини белем нигеҙҙәре менән бергә әҙәп-әхлаҡ тәрбиәһе лә бирелә. Ғөмүмән, мәктәп, дини һәм башҡа йәмәғәт ойошмалары йәштәргә рухи тәрбиә биреүҙе бергәләшеп башҡарһа, улар милләтебеҙ йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәҫ ине.

**Вәли ИҘРИСОВ яҙып алды.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

## ҮҘ ЙӨҘӨ БАР

**Гәзиттең бер баҫмаға ла оҡшамаған үҙ йөҙө бар. Ул халыҡ өсөн мөһим темаларҙы бик ҡыйыу күтәрә. Шундай темаларҙың береһе - ер мәсьәләһе. Был киҫкен проблема хаҡында гәзит объектив фекерҙәр әйтте. Ҡайһы саҡ халыҡ өсөн мөһим һаналған темалар рәсми органдар өсөн мөһим булмауы ла бар. "Киске Өфө" иһә, ана шундай темаларҙы эҙләп табып, рәсми органдар өсөн программа йүнәлеше булырҙай фекерҙәр әйтеүгә өлгәшә. "Диалог", "Монолог", "Фекер ҡоро" рубрикаларында билдәле шәхестәр төрлө темаларға сығыш яһай. Ул шәхестәр башҡа баҫмаларҙа ла төрлө фекер ҡорҙарында ҡатнаша, әммә "Киске Өфө" ҡуйылған мәсьәләгә үҙенсәлекле ҡарашы, фекерҙәр төрлөлөгө менән айырылып тора. Ошондай мөһим проблемалы мәҡәләләр менән бер рәттән, ауылдарҙағы лаҡаптар, әсәйҙәрҙең лөғәте лә баҫыла гәзиттә. Йәғни, "Киске Өфө" - төрлө йүнәлешле универсаль баҫма. Уны һәр йәштәге төрлө һөнәр вәкилдәре, ауыл һәм ҡала кешеләре яратып уҡый.**

**Юлай ҒӘЙНЕТДИНОВ. Башҡортостандың халыҡ артисы.**



**"Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһы - 306 һум 84 тин, 50673 индекслыһы (льготалыһы) - 294 һум 78 тин тора.**

✓ ***Әгәр ҙә яҙыусы үҙенең нисәнселер "нн-сы" юбилейына яңы ижад емештәре менән килә алмай икән, уның түңәрәк датаһы булған өсөн генә китап баҫтырыу мотлаҡмы икән?***



*ИШАРА*

**Ошо көндәрҙә Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте үҙенең 90 йәшлек юбилейын үткәрә. Беҙ был дата айҡанлы быйыл "Монолог" рубрикаһында ("Ашаған белмәй, тураған белә, ә китаптың үҙкиммәтен уны сығарыусы белә...", 8-се һан) нәшриәт директоры Зөфәр Мөхтәр улы Тимербулатовтың әңгәмәһен һеҙҙең иғтибарға тәҡдим иткәйнек инде. Унда директор нәшриәт эшен заман талаптарына ярашлы яңыса үҙгәртеп ҡороу, ошо юл менән китаптарҙың күләмен һәм сифатын арттырыу хаҡында әйтеп үткәйне. Хәҙерге заманда "оптимизация" тигән һүҙ модаға инеп китте. Бигерәк тә был һүҙҙе мәғариф өлкәһендә күберәк ҡабатларға яраталар. Дөрөҫөн әйткәндә, "Китап" нәшриәте замандың ошондай үҙгәрештәрен алдан уҡ тойоп, ул мәл килеп еткәнсе үк шул үҙгәрештәргә яраҡлы ғәмәлдәрҙе башҡара кеүек. Директорҙың сығышында әйтелгән күп кенә фекерҙәр "Китап" нәшриәте өсөн генә түгел, шулай уҡ милли мәҙәниәтебеҙ, республикабыҙ һәм Рәсәй Федерацияһы өсөн дә мөһим булып тора. Шуларҙың бер нисәһенә туҡталып үтәйек.**

# КИТАП ХӘЛЕН КЕМ БЕЛӘ?

## Уны яҙған түгел, нәшер иткән белә

### Милли мәҙәниәт - баҙар субъекты түгел...

**"Министрлыҡта эшләгән саҡта ла башҡорт китабын таратыуҙың дәүләт механизмы хаҡында һөйләшеүҙәр булып, был йүнәлештә ниндәйҙер аҙымдар ҙа яһалғайны. Нәшриәткә килгәс, шул эш менән яҡындан шөғөлләнергә тура килә. Был хаҡта һүҙ ҡуҙғатып ҡараһаҡ, ҡайһы берәүҙәр барыбыҙҙың да баҙарҙың тигеҙ хоҡуҡлы субъекты икәнлекте иҫкә төшөрә. Мин ундайҙарға: "Егеттәр, һеҙ мине башҡалар менән тигеҙ ҡуя алмайһығыҙ. Сөнки 70 йылдан ашыу милли телдәрҙе юҡҡа сығарыу буйынса алып барылған сәйәсәттең хаталарын бер йыл эсендә генә төҙәтә алмайым. Башҡорт китабы һәр саҡ дәүләт ярҙамына мохтаж буласаҡ, милли китап баҙар субъекты була алмаясаҡ...", -** тип яуап бирә киләм", ти Зөфәр Мөхтәр улы милли китапты таратыу мәсьәләһе хаҡында һүҙ йөрөткәндә. Ысынлап та, автор бында Рәсәй Федерацияһы шарттарында аҙ һанлы милләттәрҙең киләсәге өсөн йәшәү программаһы булырҙай мәсьәлә күтәрә. Мәҫәлән, совет осороноң хаҡтарҙы һәм халыҡтарҙы тигеҙләү сәйәсәте "парник ысулы" менән булһа ла милли мәҙәниәтте, милли китапты, милли сәнғәтте һаҡлап килде һәм беҙ әлегә шул замандың инерцияһы менән генә йәшәйбеҙ кеүек. Әммә капитализмдың үҙ ҡанундары бар һәм улар аяуһыҙ. Бер көн килеп, кәмәләребеҙ "дыңҡ" итеп ҡомға терәлмәһен өсөн беҙ бөгөн үк нимәләр эшләргә тейешбеҙ. Милли мәҙәниәтебеҙҙең, милли сәнғәтебеҙҙең, милли булмышыбыҙҙың, шулай уҡ милли китабыбыҙҙың тик экзотика өлгөһө булараҡ ҡына һаҡланып ҡалыуын теләмәһәк, беҙ уны, теләйбеҙме-юҡмы, баҙар шарттарына ҡулайлаштырырға тейешбеҙ. Бында башҡорт яҙыусыларының һәм шағирҙарының әҫәрҙәрен башҡа телдәргә тәржемә итеп баҫтырыу хаҡында ла һүҙ алып барырға мөмкин булыр ине, моғайын. Зөфәр Мөхтәр улының ошо мәсьәлә юҫығында күтәргән проблемаһына гәзитебеҙҙең алдағы һандарында махсус рәүештә әйләнеп ҡайтырбыҙ әле.

### Юбилей китаптары, күп томлыҡтар

**"Юбилей фетишҡа әйләнде. Яңы әҫәрҙәре бармы-юҡмы, яҙыусылар төрлө инстанциялар буйынса йөрөп, беҙҙең алға ҙур етәксенең ҡултамғаһы ҡуйылған ҡағыҙҙы алып килеп һала. Президентыбыҙға, Хөкүмәтебеҙгә 15 томлыҡ һорап мөрәжәғәт итеүселәр ҙә бар. Ҡайһы берәүҙәр templандан тыш китабын сығарырға тип, юғарынан ҡултамға һалынған ҡағыҙ тотоп, нәшриәткә килә. Мин уларға templанды сығарып күрһәтәм, ундағы китаптарҙы сығарыу өсөн бүленгән аҡсаның күләмен әйтәм, шунан уның алдына templанды һалып, ҡулына ручка тотторам да: "Миңә һеҙҙең китапты сығарыр өсөн кемдеңдер китабын сығармаҫҡа кәрәк буласаҡ. Әйҙә, шул кешенең фамилияһын һыҙып ташла?" - тием. Теге аптырап ҡала...",** ти "Китап" нәшриәте директоры юбилей һәм күп томлыҡ китаптары сығарыу хаҡында һүҙ алып барған саҡта.

Әгәр ҙә яҙыусы үҙенең нисәнселер "нн-сы" юбилейына яңы ижад емештәре менән килә алмай икән, уның түңәрәк датаһы булған өсөн генә китап баҫтырыу мотлаҡмы икән? Минеңсә, бында иң тәүҙә уҡыусы ихтыяжы иҫәпкә алыныр ға тейештер. "Мотлаҡ рәүештә яңы, фәһемле һәм уҡымлы әҫәрҙәр генә китап итеп баҫтырыуға хаҡлы", тигән принциптан сығып ҡарағанда, бәлки, дөрөҫөрәк булалыр. Булат ағай Рафиҡов "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире булып эшләгән саҡта бик уҫал һүҙ әйткәйне: "Ағиҙел" журналы һеҙгә, сиратлап әҫәрҙәрегеҙҙе баҫып, аҡса таратып ултырыусы хәйриә ойошмаһы түгел". Ә бит, дөрөҫөн әйткәндә, юбилей һәм күп томлыҡ китаптары баҫтырыу арҡаһында ғына зауыҡһыҙға әйләнеп барабыҙ түгелме һуң, йәмәғәт? Ғөмүмән, күп кенә йәштәребеҙ, үҫмерҙәребеҙ туған телебеҙҙе яҡшы белгән көйө лә китаптарыбыҙҙы асып та ҡарамай. Үҙ халҡын, милли әҙәбиәтенең киләсәген ысын мәғәнәһендә ҡайғыртҡан ҡайһы яҙыусы үҙ теләге менән күп томлыҡтан йә юбилей китабынан баш тарта ала бөгөн?

### Ҡала башҡорто китабы

**"Үкенескә ҡаршы, Үҙәктең милли компонентты юҡ итеүгә йүнәлтелгән сәйәсәте һуңғы сиктә башҡорт китабының тамырына балта сабыу ҙа булып тора. Әгәр ҙә совет осоронда ауыл булмаһа, халҡыбыҙ телдән генә яҙыу түгел, үҙе лә юҡҡа сыҡҡан булыр ине. Ярай әле, ауыл ҡотҡарҙы ул саҡта. Хәҙер килеп колхоздарҙы ябып, мәктәптәрҙе ҡыҫҡартып, ауылға ла киң масштаблы һөжүм башланылар. Рәсәй мәғариф министры Фурсенко был юл менән Рәсәйҙе мәғарифһыҙ ҡалдырырға самалай. Әле туған әҙәбиәт буйынса имтиханды ла алып ташларға итәләр. Былар барыһы ла туған әҙәбиәтте уҡыу-уҡымау айырым кешенең ихтыярына ҡайтарып ҡалдырылғанын аңлата. Беҙгә бындай юлдар менән "көнбайыш философияһын" көсләп тағырға тырышалар", -** ти директор башҡорт китабы менән милли мәғарифты бер күҙлектән ҡарап.

Бында Зөфәр Мөхтәр улының бер фекер осо барыбер ҙә юғары интеллектуаль кимәлдәге башҡорт китабына барып тоташалыр ул. Ни өсөн шулаймы? Сөнки беҙҙең башҡорт яҙыусылары, асылда, ауылда тыуып үҫеп, ауыл уҡыусыһының ихтыяжы өсөн ижад итә. Хәҙер иһә, Аллаға шөкөр, һуңғы ике тиҫтәгә яҡын ваҡыт эсендә ҡалаларыбыҙҙа асылған милли мәктәптәрҙә, гимназияларҙа меңәрләгән-меңәрләгән уҡыусыларыбыҙ үҙ туған телендә белем алып, үҙ булмышын милли асылында формалаштырҙы. Беҙгә хәҙер ана шул йәштәрҙең һәм үҫмерҙәрҙең психологияһын аңлаған яҙыусыларҙың туған телебеҙҙәге китаптары кәрәк. "Ҡала башҡорто китабы" проблемаһы күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**2008 йыл һөҙөмтәләре буйынса Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте, Екатеринбург һәм Ҡаҙан нәшриәттәрен уҙып китеп, егерме эре төбәк нәшриәттәре исемлегенә инде һәм Мәскәүҙә үткән XXII Халыҡ-ара китап күргәҙмәһе-йәрминкәһе һөҙөмтәләре буйынса Рәсәй китап сығарыусылар ассоциацияһының Маҡтаулы грамотаһы менән бүләкләнде.**



## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов уҡытыусыларҙы профессиональ байрамдары менән ҡотланы.

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов республиканың һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарын Оло йәштәгеләр көнө менән ҡотланы. Оло йәштәгеләр 1 октябрь көнөндә башҡа күп төрлө ҡотлауҙарға һәм бүләкләүҙәргә лайыҡ булды. Ә пенсия йәшендәгеләр дөйөм халыҡ иҫәбендә ярайһы уҡ урын биләй. Мәҫәлән, баш ҡала халҡының 258,4 меңе -пенсия йәшендәгеләр. Әгәр ҙә 1998 йылда Өфөлә йәшәүсе бар халыҡтың 22 проценты пенсионер булһа, хәҙер 25 проценты - пенсия йәшендәгеләр.

✓ БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев Стәрлетамаҡта эш сәфәре менән булды һәм яңыраҡ ҡына Зәйнәб Биишева исеме бирелгән Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһының педагогика һәм психология институты өсөн уҡыу-лаборатория корпусын, реконструкциянан һуң Никах һарайын асыу тантаналарында ҡатнашты. Раил Сәлих улы шулай уҡ Стәрлетамаҡ троллейбус паркына ун яңы машина тапшырҙы.

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов эш сәфәре менән Асҡын районында булды һәм "Танып" шифаханаһына илткән, тулыһынса реконструкцияланған 30 километрҙан ашыу яңы юлдың файҙаланыуға тапшырылыу тантанаһында ҡатнашты.

✓ БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев Рәсәй ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан буйынса баш идаралығына республика бюджеты аҡсаһына һатып алынған 10 заманса янғын һүндереү автоцистернаһы асҡыстарын тапшырҙы.

✓ БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев "Ассы" шифаханаһында булды һәм уның икенсе сираттағы объекттарын төҙөү буйынса эш кәңәшмәһе үткәрҙе. Объекттар 12 октябргә әҙер булырға тейеш, йәғни дауалау-диагностика комплексы тейешле ҡоролмалар менән йыһазландырылырға, административ корпусты ашхана менән тоташтырған бина төҙөлөп бөтөргә тейеш.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# ТӘКИ ЕҢДЕК!

## Йәки Финанс министры ни һөйләгәнен үҙе белә микән?

**Көрсөктән сыҡтыҡ, йәмәғәт! Һиҙҙегеҙме? Юҡмы ни? Еңдек бит беҙ ул ғәләмәтте. Төшөнмәнегеҙме ни? Ә бит был еңеүҙе белгән, һиҙгән, тойған, хатта күргән кешеләр бар. Байрам менән, Көрсөктө еңеү көнө менән, тип яҙып сыкты үткән аҙнала үҙәк гәзиттәребеҙҙең береһе. Башҡалар ҙа уны элеп алды. Ни булды, тип һорайһығыҙмы? Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте Рәйесенең беренсе урынбаҫары, финанс министры Алексей Кудрин үткән аҙнала көрсөктөң тамамланыуы хаҡында иғлан итте лә баһа. Әллә ҡайҙа түгел, абруйлы ağа-энеләр йыйылған оло йыйында. Тәүҙә Федерация Советы ағзалары алдында. Ә һуңынан "Рәсәй өндәй!" инвестициялар форумында ҡатнашыусылар ҡаршыһында.**

Шулай итеп, йәмәғәт, ныҡ итеп быуған ҡайыштарыбыҙҙы бушатыныҡырағыҙ. Иркенерәк тын алырға мөмкин. Көрсөк барышында өҫтәлегеҙ наҡыҫыраҡ булғандыр, моғайын. Ҡалаҡтарығыҙҙы әҙерләп ҡуйығыҙ. Хәҙер ҡыҙыл ыуылдырыҡ, ананас һәм шампан шарабының хаҡтары менән ҡыҙыҡһына башларға була. Көрсөктөң тамамланғанын һиҙмәйбеҙ, тиһегеҙме? Магазиндарға һаман булһа ла инерлек түгел, хаҡтар шул хәтлем ҙур, хатта өҫтөгөҙгә ауырға тора, тиһегеҙме? Ғәфү, ул һорау менән миңә түгел, ана, Кудрин әфәндегә мөрәжәғәт итегеҙ. Ул белә. Ул вис белә.

Алексей Леонидович тегеләй-былай кеше түгел. 2000 йылдың майынан бирле ул финанс министры. Әйткәндәй, 2008 йылдағы килемдәре һәм мөлкәте хаҡындағы декларацияға иғтибар итһәгеҙ, ағайыбыҙ Рәсәй министрҙары араһынан иң намыҫлыһы һанала. Ышанаһығыҙмы, уның хатта фатиры ла юҡ! Хәләл ефетенеке бар. Ике фатир һәм бер шәхси йорт. Ә ул - почти берәҙәк. Хәйер, был һүҙ араһында ғына. Һүҙ бөгөн көрсөктө еңеү тураһында. Еңеү булғас, еңеүселәрһеҙ ҙә булмай. Дошман (йәғни, көрсөк) хаҡында һүҙ ҡуйыртып тормайыҡ. Ул күҙгә лә күренмәгән, тотоп та ҡарарлыҡ түгел бер яуыз булһа ла, кеҫә ягын таҡырайтыу, янсыҡтарыбыҙҙы еңеләйтеү йәһәтенән бик оҫта булып сыҡты. Ҡайһы берәүҙәрҙең эштәрен, икенселәрҙең фатирҙарын тартып алып, аптыратты. Олигархтар ҙа, ишеттегеҙме икән, зыян күргән, имеш. Кемдер бер миллиард һумһыҙ тороп ҡалған, икенсе берәү миллионлаған долларҙан ҡолаҡ ҡаҡҡан. Хатта, ышанаһығыҙмы-юҡмы, ҡайһы бер олигархтар яхта һатып алыуҙан тыйылып торған, йәнәһе. Булмаҫтыр, тим. Яхтаһыҙ олигарх буламы ни?

Эйе, көрсөктө еңеүселәр хаҡында ине бит әле һүҙебеҙ. Кемгә нисектер, әммә миненсә, беҙ ул афәтте һүҙ менән генә еңдек. Эйе, һүҙ кешене үлтерә лә, терелтә лә, ҡанатландыра ла, хәлдән тайҙыра ла, тип әйтеүҙәре көрсөккә ҡарата ла дөрөҫ булып сыҡты. Аңлашылмаймы? Аңлатып ҡарайым, улай булғас.

"Иҫкәртелгән, тимәк, еңгән" тигән әйтемде ишеткәнегеҙ бармы? Финанс министрыбыҙ Алексей Леонидович Кудрин көрсөк хаҡында иң тәүгеләрҙән булып һөйләй башлай. Әллә беҙҙә көрсөк хаҡында иҫкәртә ул, әллә көрсөктө... Былай була ул.

2007 йылдың 18 майында Алексей Кудрин Юғары иҡтисад мәктәбе дәүләт университеты студенттары алдында сығыш яһай. Бөгөн илебеҙҙә иҡтисади көрсөк ҡубыр өсөн кәмендә дүрт сәбәп бар, ти ул. Һәм бермә-бермә һанап сыға - көндән-көн көсәйгән инфляция, һумдың өҙлөкһөҙ нығыныуы, сит илдәрҙән туҡтауһыҙ үтескә аҡса алған дәүләт компанияларының тауҙай өйөлгән бурыстары һәм дыуамал рәүештә уңлы-һуллы кредиттар тараткан банкылар. Был һүҙҙәрҙе ишеткән көрсөк ни эшләргә тейеш? Әлбиттә, ул һөжүмгә күсергә әҙерләнә. Сөнки, аңлап тораһығыҙҙыр, уға министр үҙе яулар бейеклектәрҙе, йәғни, бәрер йүнәлештәрҙе күрһәтеп, атап ҡуя. Һуғыш терминологияһында карталарҙы асып күрһәтеү менән бер бит был. Рәхәтләнеп файҙалан! Әммә министрыбыҙ юғалып ҡалғандарҙан түгел. Ул шул көндө кис менән үҙ һүҙҙәрен кире ала. Рәсәйҙә көрсөк булмаясаҡ, мине дөрөҫ аңламағандар, тип белдерә ул. Студенттар менән әңгәмәләшкәндә миҫал итеп Көньяҡ-Көнсығыш Азия дәүләттәренең ҡайһы берҙәрендә алып барылған иҡтисади сәйәсәттең хаталары хаҡында ғына һөйләгәйнем, тип аҡлана Кудрин. Кем аңламағандыр инде министрҙы? Студенттармы, әллә журналистармы? Мин беләм, ул - көрсөк. Беҙҙең дошманыбыҙ.

Был ваҡиғаларҙан бер йылға яҡын ваҡыт үтә. 2008 йылдың 19 марты. Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаттары иғтибарына Рәсәй хөкүмәте эргәһендәге Финанс академияһы тарафынан әҙерләнгән "Рәсәйҙә финанс көрсөк ҡурҡынысы: факторҙар, сценарийҙар һәм уға ҡаршы тороу сәйәсәте" тигән доклад тәҡдим ителә. Артабан Кудрин әфәнде сығыш яһай. Рәсәйҙә көрсөк быйыл булмаясаҡ, тип белдерә ул.

Ошо урында мин Кудриндың һүҙҙәренән саҡ ҡына ситләшмәксемен һәм икенсе бер күренекле һәм бөтә донъяға билдәле сәйәсмәнебеҙҙең көрсөк хаҡындағы белдереүҙәре менән таныштырып үтмәксемен. Был айырыуса хәҙер, көрсөктө бағындырып, ҡулдарын өҫкә күтәртеп, мөйөшкә терәп ҡуйғас, әһәмиәтле. Кем берәү әйткән әле, "Ил үҙ батырҙарын белергә тейеш", тип?

2008 йылдың 1 октябрендә, Рәсәй Хөкүмәте ултырышындағы сығыштан: "Рәсәй күптән инде глобаль иҡтисадтың бер өлөшө, халыҡ-ара финанс һәм энергетика структураларына һәм баҙарҙарына укмашҡан. Шуға күрә көрсөк күренештәре беҙҙең фонд майҙансыҡтарында ла беленде".

2008 йылдың 22 октябрендә, Новосибирскиҙа Себер дәүләт юлдар бәйләнеше университеты студенттарының береһенә яуап биргәндә: "Беҙҙә көрсөк юҡ". Бындай тапҡыр һәм дөрөҫ һүҙҙәрҙең авторы кем, тип уйлайһығыҙ инде? Әлбиттә, Премьер-министрыбыҙ Владимир Владимирович Путин. Йәғни, Кудрин көрсөктө яңғыҙы ғына еңгән икән, тигән фекерегеҙ (әгәр ундай уй башығыҙҙа тыуа ҡалһа, әлбиттә) төптө ялған. Һәм буш. Улар бергә көрәште. Бергә еңде.

Эш бының менән генә бөтмәне әле. Алексей Леонидовичтың данлыҡлы "катюша"ларҙың залптары кеүек һүҙ "һөжүм"дәрен күҙәтеүҙе дауам итәйек.

2008 йылдың 12 ноябре. Бөтә донъяла көрсөк шашына. Уны хатта беҙ ҙә таныныҡ. Бар беҙҙә көрсөк, тинек. Алексей Кудринды тыңлап ҡарайыҡ. Ул Федерация Советында сығыш яһай. Парламентарийҙар хөкүмәт ағзаһынан был афәт менән көрәше хаҡында һораша. Кудрин уйламай ҙа яуап бирә - көнө-төнө эшләйбеҙ, кәмендә бер йыл буйына көрсөк менән көрәшәсәкбеҙ әле, ти ул. Минфин казарма хәлендә күсте, Үҙәк банкыбыҙ ҙа төнгө сәғәт икегә тиклем финанс көрсөктөң эҙемтәләре менән алыша, тип белдерә министр. Шулай итеп, бер йыл ғүмер бирә ул кризисҡа. Хәс тә Сталинса: "Дошман тар-мар ителәсәк. Еңеү беҙҙеке буласаҡ!"

2009 йылдың 14 апреле етә. Алексей Леонидович финанс министрлығының коллегияһында сығыш яһай. Уны бөтәһе лә йотлоғоп тыңлай. Министрҙың һүҙҙәренән шуны аңлап була - илебеҙҙең көрсөктән сығыу процесы бер нисә йылды биләйәсәк.

Беҙҙекеләр көрсөк менән шулайтып көрәште. Берсә, ул - бар, берсә, ул - юҡ. Көрәшә торғас, еңделәр. Йәғни, улар шулайтып иғлан итте. Еңелдеме көрсөк, әллә берәй ерҙә боҫоп, яраларын ялап ятамы? Яңы йыл алдынанмы, унан һуңмы, ҡабаттан килеп баҫмаҫмы? Юҡтыр, йәмәғәт. Беҙҙең түрәләребеҙ ышаныслы йөҙ менән улайтып белдергәс, тынысланайыҡ. Улар бит быға тиклем беҙҙе алдағаны булманы. Әйткәндәре дөрөҫкә сығып тик торҙо. Шулай булғас, ышанайыҡ та ҡуяйыҡ. Бала саҡта атыш уйнағаныгыҙ булдымы? Унда ла бит кем тәүҙә "пах-пах" йәки "тах-тах" тип һөрәнләп өлгөрә, шул еңеүсе. Ә кем өлгөрмәгән - ғәфү.

Кешеләргә ни әйтһәң дә, ышана. Беҙҙә бит шулай өйрәткәндәр. Әммә барыбер кеҫәләрҙә ҡағыҙ аҡсалар ҡыштырламайынса, көмөш тиндәр сылтырамайынса, "еңдек" тигән һүҙҙәр ышандырмай.

**Таһир ИШКИНИН.**

# ФАНАТТАРҒА - ЯЗА,

## мосолмандарға - хәләл тауар

- БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың көҙгө сессияһының тәүге ултырышында республикабыҙҙың Административ кодексына төҙәтмәләр индереү тураһындағы закон проекты беренсе уҡыуҙа ҡаралды. Баҡтиһән, быға тиклем концерт залдарында, спорт ареналарында, хоккей-футбол уйындары барышында сәхнәгә йәиһә спорт майҙансыҡтарына телһә ниндәй, хатта артистарға, спортсыларға хәүеф янаған предметтар ташлаусы хулиган фанаттарға йоғонтоло сара ҡулланыу өсөн закон нормалары булмаған икән. Хәҙер ошондай тәртип боҙоусыларға 500-ҙән алып 1000 һумға тиклем штраф һалыу мөмкинлеге буласаҡ. Закон ҡабул ителә ҡалһа, фанаттарға тупаҫ ҡыланыр алдынан үҙҙәренә матди яуаплылыҡтың ни хаҡҡа төшәсәге тураһында уйлап алырға ваҡыт буласаҡ.

- Тағы ла бер яңылыҡ республикабыҙҙа йәшәүсе мосолмандарҙың хоҡуҡтарын иҫәпкә алып, уларҙың аҙыҡ-түлеккә ҡарата ихтыяждарын Ислам талаптарына ярашлы ҡәнәғәтләндереү менән бәйле. Һатыуға сығарылып, хәләл аҙыҡ мөһөрө баҫылған продукцияның ысынлап та хәләл булыу-булмауы күптәрҙә шик уятмай ҡалмайҙыр. Тап шуның өсөн БР мосолмандары Диниә назараты эргәһендә хәләл аҙыҡ-түлек һәм шулай уҡ мосолмандар өсөн тәғәйенләнгән косметик тауарҙарҙы етештереү барышында Ислам талаптарының теүәл үтәлеүен тикшереү хоҡуғына эйә булған комитет ойоштороласаҡ. Шулай итеп, махсус экспертар хәләл ит-колбаса, кондитер продукттары етештереүселәрҙе, йәмәғәт туҡланыуы предприятиеларын, медицина һәм мәғариф учреждениеларын да үҙ контроленә алмаҡсы икән.

**Вәли ИҘРИСОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы хәбәр итеүенсә, Башҡортостан Республикаһында байрам көндәре менән бәйле 2009 йылдың 10,11,12 октябре ял көндәре булып тора.

✔ Рәсәй Президенты Указы менән "1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә 65 йыл" миҙалы булдырылды. Юбилей миҙалы менән Бөйөк Ватан һуғышы фронттарының хәрби хәрәкәттәрендә ҡатнашҡан хәрби хеҙмәткәрҙәр һәм ирекле ялланған состав кешеләре, партизан отрядтары һәм йәшерен ойошмалар ағзалары, шулай уҡ ҡайһы бер категорияға инеүселәр бүләкләнәсәк.

✔ 1 октябрҙән Рәсәй тимер юлдарында билет хаҡтары 10 процентҡа арзанайҙы. Был ташламалар 24 декабргә тиклем дауам итәсәк.

✔ 1 октябрҙән илдә тәбиғи газға ваҡлап һатыу хаҡтары күтәрелде. Быйыл газға тарифтар дүртенсе тапҡырға күтәрелә. Хәҙер иҫәп приборҙары булғанда бер куб метр газ 2 һум 48 тин торасаҡ. Торлаҡ йорттарҙы йылытыу өсөн файҙаланғанда ул 1 һум 81 тин, ә үҙәкләштерелгән йылы һыу булмағанда һыу йылытыу өсөн файҙаланылғаны 3 һум 80 тингә барып баҫасаҡ.

✔ Башҡортостандың үҙенең республика тираж лотереяһы барлыҡҡа килде. Үткән йәкшәмбелә был "Урал Лото" компанияһының "40-тан 6 лото" лотереяһының тәүге уйыны булды.

✔ 5 ноябрҙә Өфөлә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында "Беҙҙең заман геройы" телевизион йәмәғәтселек премияһы тапшырыу тантанаһы үтәсәк. Премия "Вся Уфа" ҡала телеканалы менән Өфө ҡала округы хакимиәте тарафынан булдырылғайны. Ул быйыл алтынсы тапҡыр үткәрелә.

✔ Был юлы республиканың база мәктәптәренә регион бюджеты аҡсаһына һатып алынған 12 автобус тапшырылды. "Мәктәп автобусы" федераль программаһы сиктәрендә өс йыл эсендә республика мәктәптәре барлығы 451 автобус алды.

✔ Бөтә Рәсәй Халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы 2010 йылдан 2013 йылға күсерелә. Сәбәбе - финанс көрсөгө.

ШАҢДАУ

# ТАМЫРҘАРҒА... балта сабыла бит

**"Киске Өфө"бөҙҙөң 33-сө һанындағы "Ҡулайлаштырыу кемгә ҡулай, йәки 467 "перспективаһыҙ" ауыл мәктәбе ябылырмы? (авторы Вәлиәхмәт Бәҙретдинов) исемле мәҡәләһен уҡып сыҡҡас, ошо күптән борсоған мәсьәлә буйынса мин дә үҙ фекерҙәремде еткермәксе булдым.**

Ауылдарҙа халыҡ һаны кәмеүенә килтергән сәбәптәр бик күп. Бигерәк тә һуңғы осорҙа мәктәптәр ябылыуы тағы бер бәләгә әүерелде. Үткән быуат урталарында "перспективаһыҙ"ҙар исемлегенә индерелеп, әллә күпме ауылдар юҡҡа сыҡһа, һуңғы 20-30 йыл эсендә мәктәп тамамлаған ҡыҙҙар-егеттәр, армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡан егеттәр ҡалала ҡалырға тырышты. Сәбәбе - мәктәп уҡыусылары яҙлы-көҙлө ихһеҙ-сикһеҙ коллектив хужалыҡтар баҫыуында өҫтәмә "эшсе ҡулдар" урынына файҙаланыу. Күршебеҙҙә 7 балалы ғаилә йәшәй ине, әсәйҙәренең гел генә: "Береһен дә ауылда ҡалдырмайым, үҙебеҙ күп ыҙаландыҡ", - тип һөйләгәне һаман хәтерҙә. Икенсе күршеләребеҙҙең балалары унан да күберәк - 11 бала. Иң өлкән ҡыҙҙары ғына, ауылға килен булып төшөп, ошонда тормош көтә. Ә һеңлеләренең унауһы ла һәм уның үҙ балалары ла ҡалаларҙа йәшәй.

Бер ҙә үҙебеҙ үҫкән совет системаһын тәнҡитләргә йыйынмайым, план буйынса йәшәгәс, уларҙы үтәргә кәрәк булғас, эшсе ҡулдар етешмәне. Хәҙер ундай пландар юҡ та, әммә ауыл тормошоноң мәғариф, мәҙәниәт усағы булған мәктәптәрҙе ябыу буйынса пландар ҡалған икән. Һәммәбеҙ ҙә мәктәптәрҙә уҡып сыҡҡанбыҙ, дәрестәрҙә "хаталар өҫтөндә эш" үткәргәнбеҙ. Бер ваҡытта бер уҡытыусы ла әлеге өр-яңы пландар тураһында һөйләмәгән, киләсәктә һеҙ бәләкәй ауылдарҙың бөтөүенә булышлыҡ итәсәкһегеҙ, тимәгән. Тарихҡа күҙ һалһаҡ, һәр быуындың үҙ хатаһы, үҙ һабағы, ләкин шул хаталарҙы ҡабатлаусылар, яңыларын уйлап табыусылар (!) барлыҡҡа килеүенә иҫ китә. Юҡҡа ғына Плеханов та, тарихта шарт ҡылым һөйкәлеше булмаһын ине, тимәгәндер.

Икенсе фекерем автобустар тураһында. Уҡыусыларға, уҡытыусыларға район үҙәгенә, күрше райондарға барыу, баш ҡалала төрлө сараларҙа ҡатнаша алыу өсөн бик ҡулайлы "Мәктәп автобусы" Президент программаһы уңышлы эшләп килә. Әммә... "Киске Өфө" лә баҫылған әлеге мәҡәлә авторының борсолоуы урынлы. Үҙ ауылында, үҙ мәктәбендә уҡыу форсаты теймәгән баланың күңелендә ниндәй хис-тойғоларға урын ҡаласаҡ? Иң ҡурҡынысы - ерһенмәү тойғоһо. Ул уҡырға йөрөгән күрше ауылда үҙен тулы хоҡуҡлы итеп тоя алмай, ә тыуған ауылына ҡарата мөнәсәбәт "Мин бында ваҡытлыса ғына йәшәйем" тигән тойғо менән һуғарыла. Был тыуған ергә һөйөү хисе кәмеүенә, тамырҙарға балта сабыу фажиғәһенә килтерәсәк. Ә кеше тамырҙары менән көслө бит! Тимәк, киләсәккә лә балта сабыласаҡ. 467 ауылды түгел, 7 ауылды ла бөтөрөүгә юл ҡуйырға ярамай беҙгә. Тик был процесс башланған. Уны туҡтатыу саралары ниҙә икән? Кем белә яуабын?

**Сәриә ИШЕМҒОЛОВА.**

ҮӘТ ӘЙ!

# ЙӘМӘҒӘТ ОЙОШМАЛАРЫ...

## ни өсөн хоҡуҡ һаҡсыларын хәүефкә һала?

**Һуңғы осорҙа Башҡортостан йәштәре әүҙем ҡатнашҡан бер сара ла хоҡуҡ һаҡсыларының, именлек органдары хеҙмәткәрҙәренең ҡыҫылыуынан тыш үтмәй.**

Башҡортостан буйынса Федераль именлек хеҙмәтенең айырым вәкилдәренең башҡорт йәштәрен туплаусы төрлө сараларҙан, атап әйткәндә, апрель айында баш ҡалала милли-төбәк компонентын яҡлап уҙғарылған митингынан, июлдә Бөрйән районында үткән башҡорт йәштәре йыйынынан, Салауат Юлаев һәйкәле янындағы майҙанда старт алған "Ритайым" үҙешмәкәр студенттар фестиваленән, Сибай ҡалаһындағы хәрби-патриотик йыйындарҙан экстремизм идеялары эҙләүе хәүефкә һала. Йәштәребеҙҙе бер ҡорға йыйыусы мәҙәни сараларҙан һуң Башҡорт йәштәре иттифағы лидерҙарынан һорау алына, йәмәғәт ойошмаларының офистары тикшерелә, уларҙың рәйестәренең, етәкселәренең фатирҙарында тентеү ойошторола.

- Республикала йәмәғәт ойошмалары бик күп, әммә уларҙың береһе лә экстремистик идея орлоғон сәсмәй, киреһенсә, республикабыҙҙың берҙәмлегенә, тотороҡло тормошона тос өлөш индерә, - тине Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Румил Аҙнабаев күптән түгел баш ҡалала йәмәғәт ойошмалары лидерҙарына ҡарата Федераль именлек хеҙмәте яғынан эҙәрлекләү башланыу сәбәпле ойошторолған матбуғат конференцияһында. - Айырым бәндәләргә төбәгебеҙҙәге тыныс тормош, тотороҡло үҫеш оҡшамай. Уларға үҙебеҙҙең һүҙебеҙҙе мотлаҡ еткерергә тейешбеҙ.

Румил Тәлғәт улы әйтеүенсә, йәштәрҙең һәр йыйынынан һуң ҡатнашыусыларға ҡаршы һөжүм асыла. Мәҫәлән, милли-төбәк компонентын яҡлап ойошторолған митингынан һуң унда булған һәр кем прокуратураға саҡыртыла һәм һорау алына. Студенттарға психологик баҫым яһалыуы, ҡурҡытырға маташыуҙар, вуздан ҡыуыу менән янауҙары ла сер түгел. Башҡорт йәштәре иттифағы рәйесе Фәүзил Маликов һәм БДУ уҡытыусыһы Рәмил Рәхмәтов йәштәр һабантуйынан һуң асылған енәйәт эшендә шаһиттар итеп билдәләнә, уларҙан бер нисә тапҡыр һорау алына. Рәхмәтовтың сығышы буйынса енәйәт эше асыла, тикшереү барышында уға сығышының авторы сифатында дәүләт власы органдарын күрһәтергә ҡушыла. Шул рәүешле Федераль именлек хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре төрлө юлдар аша республика етәкселеген экстремистик эшмәкәрлеккә гәйепләргә маташа. Ошо хәл генә лә был органдарҙың кемдәрҙәндер сәйәси уйынында уйнауына ишара түгелме һуң?

- Эске эштәр министрлығы һәм Федераль именлек хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре беҙҙең һәр аҙымыбыҙҙа экстремизм эҙләй. Беҙҙең үҙ еребеҙҙе яҡлап сығыу экстремизм тип аталамы? Әллә суверенитетыбыҙҙы яҡлау экстремизммы? Халҡыбыҙҙың һайлай алыу хоҡуғымы әллә? Тыуған телебеҙҙе яҡлаумы? Башҡорттарҙың үҙ ерендә азатлыҡҡа ынтылыуы экстремизммы? Улай булһа, беҙ барыбыҙ ҙа экстремистар булып сығабыҙ бит. Бөтәбеҙ ҙә яҡшы аңлай, был органдар кемдеңдер сәйәси заказын ғына үтәй, - тип белдерә үҙенең сығышында Рәмил Рәхмәтов та.

Ошо мәсьәләгә арнап, Рәсәй Федераль именлек хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы бинаһы алдында Башҡортостан йәмәғәт һәм йәштәр ойошмалары пикет та ойошторҙо. 1 октябрь көнөндә Башҡорт йәштәре иттифағы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты, "Мираҫ" йәштәр мосолман йәмғиәте, "Күк бүре" башҡорт йәмғиәт хәрәкәте һәм башҡа йәмәғәт ойошмалары лидерҙары Федераль именлек хеҙмәтенең Башҡортостан идаралығы етәксеһе Виктор Палагин менән осрашты. Идаралыҡ етәксеһе милли ойошмалар белдергән дәғүәне нигеҙле тип тапты һәм Федераль именлек хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре тарафынан күрелгән ҡайһы бер сараларҙы урынһыҙ, тип баһаланы. Виктор Палагин фекеренсә, был йәмәғәт ойошмалары алып барған эш, киреһенсә, экстремизмға һәм йәмғиәттәге тотороҡһоҙлоҡҡа ҡаршы йүнәлтелгән. Ике яҡ та киләсәктә килеп тыуған проблемаларҙы ҙур аңлау һәм түҙемлек менән хәл итергә, тигән ҡарарға килеп таралышты.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ошо һәм башҡа мәсьәләләр буйынса Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетында түңәрәк ҡор уҙҙы. Унда комитет рәйесе Румил Аҙнабаев, Башҡорт йәштәре иттифағы рәйесе Фәүзил Маликов, Башҡортостандың халыҡ шағиры, Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай комитеты рәйесе Рауил Бикбаев, тарих фәндәре докторы, профессор, БДУ-ның тарих факультеты деканы Марат Ҡолшәрипов, философия фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр академияһы академигы Фәнил Фәйзуллин, Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай комитеты рәйесе, Хоҡуҡ институтының кафедра мөдире, юридик фәндәр докторы Зөфәр Еникеев ҡатнашты. Йыйылыштың төп маҡсаты әлегә тиклем беҙ шаһит булып уҙған хәлдәргә тейешле анализ яһау, башҡорттарҙың ғына түгел, башҡа Рәсәй халыҡтарының был мәсьәләгә иғтибарын йәлеп итеү һәм үҙебеҙҙең тос фекеребеҙҙе ил етәкселегенә еткереү ине. Йыйылышта фекерҙәр алышынды, йәштәргә кәңәштәр бирелде, дөйөм ҡарарҙар ҡабул ителде. Рәсәй президенты Дмитрий Медведевҡа мөрәжәғәт хаты яҙылды һәм уны бер тауыштан ил башлығына ебәрергә, тигән ҡарар ҡабул ителде.**




## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә "Өлгөлө ихата, өлгөлө йорт, өлгөлө подъезд" конкурсының тәүге этабы йомғаҡтары тураһында мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнелеүенсә, быйыл был конкурсҡа ҡатнашыу өсөн 202 ғариза бирелгән. Комиссия шуларҙың 72-һен ҡатнашыуға һайлап алған.

✓Өфөлә "Етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы урынлаштырыуҙың ғаилә формаларын үҫтереү" темаһына беренсе асыҡ ғилми-ғәмәли конференция эшләне. Уны Балаларҙы рәхимһеҙ мөғәмәләнән яҡлау милли фонды, "Ғаилә" психологик-медик-социаль үҙәге, Мәскәү финанс-гуманитар академияһының Өфө филиалы менән берлектә Өфө ҡала округы хакимиәтенең опека һәм попечителлек буйынса идаралығы ойошторҙо. Форумда ҡатнашыусылар социаль етемлек, етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙың хоҡуҡтарын яҡлау проблемаларын тикшерҙе.

✓Республика көнөндә Сипайлово микрорайонында 5-се балалар поликлиникаһының яңы филиалы тантаналы асыласаҡ. Был поликлиника 26,5 мең балаға медицина ярҙамы күрһәтә. Бында 25 балаға иҫәпләнгән көндөҙгө стационар, функциональ диагностика бүлексәһе буласаҡ, бик күп төрлө яңы медицина ҡоралдары урынлаштырыласаҡ.

✓6 октябрҙә Өфөлә Ҡала мәҙәниәт һарайында Республика көнөнә арналған байрам сараһы үтәсәк. Унда Башҡортостан Президенты медицина, мәғариф һәм етештереү тармағының иң яҡшы вәкилдәренә дәүләт наградалары тапшырасаҡ. Кисә мәлендә бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренә фатир асҡыстары тапшырыу ҙа күҙҙә тотола. Был юлы 15 кеше, ә барлыһы 80 кеше - 30 уҡытыусы, 30 табип һәм 20 башҡа бюджет өлкәһе хеҙмәткәре социаль фатирҙар асҡыстары аласаҡ.

✓13 ноябрҙә үтәсәк "Ҡала мөхите" социаль реклама фестиваленә эштәр 20 октябргә тиклем ҡабул ителә. Фестивалдә Юғары иҡтисад мәктәбе дәүләт университетының теория һәм реклама практикаһы кафедраһы доценты Гюзелла Николайшвили һәм башҡа Мәскәү ҡунаҡтары ҡатнашасаҡ. Аныҡыраҡ мәғлүмәттәрҙе www.ufacity.info сайтынан алырға була.

ҺҮҘ - УҠЫТЫУСЫҒА

# БЕЛЕМ АЛЫУ ӨСӨН...

## баланың үҙ теле булыуы шарт



**Телебеҙҙе нисек һаҡлап ҡалырға? Киләсәк быуынға уны үҙ матурлығында нисек еткерергә? Был һорауҙар, әлбиттә, иң тәүге сиратта башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларын борсой. Ошондай уҡытыусыларҙың береһе, Өфө ҡалаһының 115-се гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Рафаэль Рәшит улы НИҒМӘТУЛЛИН инде 20 йыл үҙ һөнәренә тоғро ҡалып, төрлө милләт балаларына башҡорт телен һәм әҙәбиәтен өйрәтә. Уның һөнәре тураһында һөйләгәндәрен һеҙгә лә тәҡдим итәбеҙ:**

### Уҡытыусылыҡ нәҫелдән килә

Миәкә районы Илсеғол ауылында уҡытыусылар ғаиләһендә тыуып үҫтем. Уҡытыусы булыу теләге күңелемдә бала саҡта уҡ яралған-дыр, олатайым да, ата-әсәйем дә, туғандарым да ошо һөнәр эйәләре ине бит. Тормош иптәшем Илусә Әмир ҡыҙы ла - физика уҡытыусыһы. Әлегә тиклем Октябрьский ҡалаһындағы 2-се гимназияла балаларға башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән белем бирҙем. Ғаиләбеҙҙә, мотлаҡ башҡорт телендә һөйләшергә, тигән талап ҡуйылған. Улым да, ҡыҙым да башҡорт мәктәбендә уҡый, башҡорт телендә иркен һөйләшә.

Күптәр рус мәктәбендә башҡорт теле уҡытыу - атҡарып сығара алмаҫлыҡ эш, тип уйлап янылыша. Сит милләт балаларының башҡорт телен өйрәнергә бөтөнләй теләге юҡ, тип һис кенә лә әйтә алмайым. Балалар араһында, башҡорт телен өйрәнгем килмәй, тип ҡаршылашҡандары ла осрай, әлбиттә. Баланың ҡаршылашыуы ата-әсәнең өйҙә был фәндә өйрәнеүҙең мөһимлеген дөрөҫ аңлатмауынан килә. Ә бала ата-әсәһенең һүҙен тыңлай. Шуға ла был проблеманы ата-әсәләр менән сисергә кәрәк, балалар менән түгел. Уҡытыусы икәнһен, балала үҙең алып барған фәнгә ҡыҙыҡһыныу уята белергә кәрәк. Башҡорт теленең күп өндәре сит тел өндәре менән оҡшаш. Бигерәк тә немец, инглиз телдәре менән өндәребеҙ бер төрлө яңғырай. Шуға күрә, башҡорт телен өйрәнеү сит милләт балаларына бер ҙә генә зыян килтермәй, киреһенсә, был уға башҡа сит телдәрҙе өйрәнергә ярҙам итә, аңын үҫтерә, донъяға ҡарашын киңәйтә. Ошоларҙы аңлатҡандан һуң, күп ата-әсәнең телебеҙгә ҡарата фекере үҙгәрҙе, уларҙан рәхмәт һүҙҙәре лә ишетергә тура килде. Был минең өсөн иң ҙур бүләктән дә ҡәҙерле. Ғөмүмән, мин шул тиклем мәктәпте, балаларҙы яратам. Көҙ яҡынлашып, мәктәптә ҡыңғырауҙар сыңлай башлауы - үҙе бер илаһи мәл. Уҡыусыларға тура юл күрһәтеп, белем тауҙарына артылырға ярҙам итә алыуым менән үҙемде бәхетле һанайым.

### Фәнгә ҡыҙыҡһыныу уятыу мөһим

Әйтеп үтеүемсә, бала менән уртаҡ тел табыу өсөн уҡытыусы унда үҙ фәненә ҡарата тәрән һөйөү уята белергә тейеш. Бының өсөн мин дәрестәрҙә уйындар, артикуляцион, фонетик күнекмәләр ҡулланам, компьютерҙа башҡорт телендә төрлө эштәр эшләтәм. Шулай итеп, баланың телебеҙгә ҡыҙыҡһыныуы арта. Һәр баланы дәртләндереп, эшләгән эшен хуплап тороу мөһим. Ҡайһы саҡта билдәне юғары ла ҡуйырға тура килә. Бала ул бик һиҙгер йән, ул айырым иғтибарға мохтаж. Әгәр улар менән тупаҫ һөйләшәһең икән - икегеҙ араһына кәртә ҡуяһың, тигән һүҙ. Нисек мөғәмәлә итәһең, улар ҙа һиңә шулай яуап ҡайтарасаҡ. Уҡытыусы менән уҡыусы араһында билдәле бер сик булырға тейеш.

Октябрьский ҡалаһында эшләгән осорҙа Ҡала балалар һәм үҫмерҙәр һарайы менән берлектә урындағы телевидениела уҡыусыларым менән башҡорт телендә тапшырыуҙар әҙерләй торғайныҡ. Әле лә бәйләнештәр әҙәлмәне, унда барып, тапшырыуҙар эшләп китәм. Был тапшырыуҙар балаларҙың башҡорт телендә һөйләшеү, аралашыу кимәлен үҫтерергә, мәҙәниәтте күтәрергә, телебеҙҙе пропагандалауға ярҙам итә.

Уҡыусыларҙың мәктәптә уҙғарылған "Урал батыр" конкурсында ҡатнашыуын маҡтаулы күренеш, тип баһалайым. Мәшһүр эпосыбыҙҙың рус, инглиз телдәрендә лә сығыуы шул тиклем яҡшы булды. Рус балалары эпосты русса уҡый, ятлай. Әлбиттә, был еңел эш түгел. Әммә эпосты, беҙҙең халҡыбыҙҙың тарихы тураһындағы был һүҙҙе сит милләт балаларының күңеленә һеңдереү үҙе бер мәртәбә түгелме ни!

Быйыл Мәскәүҙән төшөрөлгән Федераль закон концепцияһы арҡаһында уҡытыу эшендә ауырлыҡтар килеп тыуҙы, әлбиттә. Сәғәттәр һаны ҡыҫҡарыуы үкенесле хәл. Бынамын тигән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары эштән китергә мәжбүр булды. Киләһе йылда милли телдәр өйрәнелмәйәсәк икән, тигән хәбәр таралғас, беҙҙең мәктәп коллективы ла, күп ата-әсәләр ҙә башҡорт телен өйрәнеүҙе дауам итеүҙе яҡлап сыҡты. Дуҫ ауыр саҡта һынала, тигән кеүек, ошондай ауыр һынау ваҡытында коллегаларымдың терәк булыуы мине шатландырҙы.

Ҡыҫҡаһы, башҡорт теле уҡытыусыларының үҙ алдына ҡуйған маҡсаты киңерәк булырға тейештер, тип уйлайым. Беҙ тел һағында тороусылар, киләсәк быуынға телебеҙҙең матурлығын еткереүселәр, тимәк, беҙҙең бурыс бүтән фән уҡытыусыларыныҡына ҡарағанда яуаплыраҡ. Мин үҙем был хәҡиҡәтте йылдан-йыл нығыраҡ аңлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**М. Ҡулаевтың шундай һүҙҙәре бар: "Белемде ныҡ урынлаштыра торған тел - әсә теле, әсәләрҙең өндәшеүе. Башҡорттарға белем алыу өсөн үҙ теле кәрәк - әсәй теле". Был балаһын тыуған телдә уҡытырғамы-юҡмы, тип һаман икеләнеү белдергән ата-әсәләргә лә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына ла оло ишара булыр.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

ШАҢДАУ

# ШАЙМОРАТОВ ҺӘЙКӘЛЕН ДӘ... күрергә яҙһын

**"Киске Өфө" гәзитендә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, генерал Миңлеғәли Минһаж улы Шайморатовҡа Өфө ҡалаһында һәйкәл (бюст) проектына республика конкурсы иғлан ителеү тураһындағы мәғлүмәт баҫылып сыҡҡас, уны 92 йәшлек әсәйемә лә уҡып ишеттерҙем. Ул да бик ҡыуанды. "Был хәбәрең бик яҡшы, батырыбыҙға һәйкәл ҡуйылһа, кешеләр уны йышыраҡ хәтергә алыр", - тине һуғыш килтергән ауырлыҡтарҙы аҙ кисермәгән әсәйем. 1941 йылда уҡ ул атайым Һибәтулла Сәлимовты һәм ҡайнағалары Йәноҙаҡ менән Шәрифулланы ҡанлы яуға оҙатып ҡала. Ул саҡта миңә -өс йәш, Мөхәмәҙиә ҡустым бер йәштә генә ине.**

1914 йылғы герман һуғышынан иҫән-һау ҡайтҡан Йәноҙаҡ олатайыбыҙ 1943 йылда Сталинград өсөн барған ҡаты алыштарҙа һәләк була. Һуғыштан яраланып ҡайтҡан Шәрифулла олатайыбыҙ ҙа оҙаҡ йәшәй алманы, 1957 йылда вафат булды. Атайыбыҙ ҙур һуғыш юлдары уҙған ҡаһарман ирҙәрҙең береһе булды. Киев, Харьков, Житомир ҡалалары өсөн барған ҡаты һуғыштарҙы хәтерләп, Днестр йылғаһын кискәндә көслө ағымды сыға алмай, аттарҙың ағып китеүе хаҡында ла беҙгә һөйләр ине. Һуғышты ул Чехословакияла тамамлай, орден-миҙалдар менән бүләкләнгән. "Батырлыҡ өсөн" миҙалын уға 1985 йылда ғына тапшырҙылар.

Һуғыш бит, унда төрлө хәлдәр була. Атайыма күпмелер ваҡыт әсирлектә булырға ла тура килә. "Яман ир - ил ҡурыр, яман ҡатын - ир ҡурыр", тигәндәй, атайымды ла һуғыштан һуң Баймаҡ НКВД-һы оҙаҡ яфаланы. Һуғышта күргән-кисергәндәре етмәгән, һуғыштан аҙаҡ та ошондай әҙәрләкләүҙәр атайым кеүек ирҙәрҙе ныҡ йонсотто. Шуның өсөн ошо ҡаһарман быуын мәңгелек һәйкәлдәргә лайыҡ.

Генерал Шайморатовҡа ни барыһы бюст ҡына ҡуйылыуы уның батырлығы асылына тап килмәй. Был йәһәттән мин Илдар Шәйәхмәтовтың фекере менән килешәм. Башҡортта "Ир ҡанаты - ат", тиҙәр бит. Салауат Юлаевҡа тиң батыр затҡа атлы һәйкәл ҡуйыу бик ваҡытлы һәм урынлы булыр ине. Был изге эште артыҡ ҡабаланмай, Башҡорт кавалерия дивизияһы ойошторолоуға 70 йыл тулыуы уңайы менән 2011 йылға тиклем башҡарып сығып булыр ине. Һәйкәлдәрҙең ҡабатланмаҫ тарихыбыҙ сағылышы булып, халыҡ хәтерендәге иң изге һындарҙан хасил булған гүзәл бер йәдкәр икәнен онотмау фарыз. Ошо хәҡиҡәтте республикабыҙ етәкселәре лә бик яҡшы аңлай, уларҙың күңелдәренә Хоҙайыбыҙ аҡылыҡ бирһен. Башланғыс бик тә һәйбәт, аҙағы ла хәйерле булһын, амин.

**Мөхәмәтйән СӘЛИМОВ, Баймаҡ районы Ҡарамалы ауылы.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Миләш сәйе

Аҙ ҡанлылыҡтан 1-2 балғалаҡ миләште ике стакан ҡайнаған һыуға һалып, сәй итеп эсергә кәрәк. Эстәге ҡомташты иретә, ҡан әйләнешен дә яҡшырта.

### Таҙ төшһә

Бала-саға эт, бесәй менән уйнай, малдарҙы ла һыйпап ярата. Шул мәлдә таҙ йоғорға мөмкин. Уны бөтөрөү өсөн бер балғалаҡ дегеткә өс балғалаҡ балыҡ майы ҡушып болғарға ла, сепрәккә манып, таҙ бөткәнсе һөртөргә генә кәрәк.

### Үҙәк көйөү

Был сир күптәрҙә күҙәтелә. Ашҡаҙан һутында әселек күплектән килеп сыға ул. Әммә үҙәк көйөүҙе бөтөрәм, тип, сода-фәлән эсеү зарарлы, ашҡаҙандағы һырҙарҙы бөтөрә. Иң яҡшыһы: 1) 10 г шыттырылған арыш йәки арпа онон 5-6 г әфлисун ҡабығы менән бергә бер стакан һыуҙа яртыһы ҡалғансы бешерәһең һәм 40-50 г бал ҡушып болғайһың. Шунан ашарҙан 10-15 минут алда балғалаҡлап эсәһең. Бер айҙан үҙәк көйөү бөтә; 2) кемгәлер кишер, көнбағыш та килешә; 3) тын алыу гимнастикаһы ла файҙалы (һауаны танау менән тәрән итеп алаһың да ауыҙҙан сығараһың).

### Тауыҡ ите

Был аҙыҡты бронхиттан дауа итеп тә ҡулланырға була: 1) итте ашағанда уға борос һибәһең дә, нарымһаҡ ҡушып ашайһың. Ит тамаҡты йомшарта, борос микроб-фәләнде ҡыра, һарымһаҡ организмға сиргә ҡаршы торорға көс бирә; 2) әгәр ныҡ итеп йүткертә башлаһа, артыҡ һалҡын булмаған һыу эсергә кәрәк.

### Һыуыҡ ныҡ тейгәндә

Ярты литр ҡайнаған һөткә ике ҡалаҡ иретелгән һарыҡ майы, бер ҡалаҡ бал, бер ҡалаҡ аҡ май ҡушырға һәм көнөнә бер үк күләмдә өс тапҡыр эсергә. Унан һуң бик яҡшылап тирләргә, ә түш һәм арҡаны, табандарҙы ҡаҙ майы менән һыларға кәрәк. Борон үпкә сирен дә ошолай дауаларғандар.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**




## ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Күршеләр

● Ҡарындаштарығыҙҙан һуң иң яҡын кешеләр күршеләрегеҙ була. Шуның өсөн күршеләр менән матур мөнәсәбәттә булығыҙ. Улар менән дуҫ тороғоҙ, шатлыҡ һәм хәсрәттәрен уртаҡлашығыҙ, ауырыған һәм сирләгән ваҡыттарында хәлдәрен һорағыҙ, үтенестәре булһа, үтәгеҙ, улар өсөн даими доға ҡылыусы булығыҙ.

● Күршеләрегеҙҙең ҡатындарына күҙ һалмағыҙ, ҡойма ярыҡтарынан ҡарамағыҙ, һәр эштә лә уларҙың хәтерен ҡалдырмағыҙ! Хөрмәтле һәм аҡыллы кешеләр шулай була.

### Өй эсендәгеләр

● Өй эсендәгеләр менән матур мөнәсәбәттә булыу шәриғәт алдында иң яуаплы эш. Ошоноң өсөн өй эсендә булыусыларға әҙәпле һәм миһырбанлы булығыҙ. Өй эсендәгеләр рәхәт һәм шат булһалар, һеҙ ҙә рәхәт һәм шат булырһығыҙ.

● Өй эсендә хеҙмәтселәр булһа, уларҙы хурламағыҙ. Күңелдәрен бойоҡтормағыҙ, йомош ҡушҡанда: "Шулай ҙа былай эшләү", - тип түгел, "Ә шулай итә күрегеҙ, мәрхәмәт итеп, былай итһәгеҙ ине. Шулай итһәгеҙ, матур булыр ине", - тип әйтегеҙ. Был күркәм холоҡло булыуҙы күрһәтә. Тәрбиәле кешеләрҙең ғәҙәте шулай була. Йомшаҡ һүҙле булыу - әҙәм улы өсөн бөйөк байлыҡ.

● Хеҙмәтселәргә мәрхәмәтле булығыҙ, улар алдында баһағыҙҙы һаҡлағыҙ. Хата булһа, ғәфү итегеҙ. Улар менән шаярмағыҙ, көлкөлә әйбер һөйләмәгеҙ, зарур булмағанда, уларҙың һүҙенә ҡатнашмағыҙ. Сөнки быңдай нәмәләр, беренсенән, тәрбиәһеҙлек билдәһе һәм, икенсенән, уларҙан яман һүҙ ишетеүгә, холоҡ боҙолоуға сәбәп була.

● Хеҙмәтселәр - өй эсендә булған серҙәрҙең асҡысы, улар күргәндәрен һөйләй, ишеткәндәрен фашлай. Шуның өсөн һаҡ булығыҙ, ситтәрҙән йәшереләсәк һүҙҙәрҙе улар алдында һөйләмәгеҙ, аҡса һәм байлыҡтарығыҙҙы уларға белдермәгеҙ, эшләгәндәрен күҙәтеп торогоҙ - ошо юл менән уларҙың мәкеренән имен булырһығыҙ.

● Өй эсендә булған серҙәрҙе сит кешегә һөйләмәгеҙ.

● Йоҡонан иртә тороғоҙ һәм, торғас, сәләмәтлегегеҙ өсөн Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итегеҙ, һуңынан, тәһәрәтләнеп, намаҙ уҡығыҙ.

### Мәктәп

● Сәй эскәндән һуң, кейемдәрегеҙҙе кейеп, уҡырға барығыҙ. Сығыр алдынан, ата-әсәгеҙҙең ҡулдарын үбеп,ризалыҡтарын алығыҙ, туғандарығыҙ менән күрешеп: "Аллаһы Тәғәлә юлына сыҡтым, Аллаһы Тәғәлә минә тәүфиҡ бирһә ине", - тип нескә күңел һәм ихласлыҡ менән мәктәпкә китегеҙ.

● Мәктәп юлында уйнамағыҙ, ғәжәп нәмәләргә тамаша итеп тормағыҙ. Осраған балалар менән һөйләшмәгеҙ, тәрбиәһеҙ балалар һәм боҙоҡ әҙәмдәр менән бергә йөрөмәгеҙ, урамда уйнамағыҙ. Быңдай нәмәләр арҡаһында ваҡытығыҙ юғалыр, үҙегеҙ һиҙмәйенсә холҡоғоҙ боҙолор. Шуның өсөн оло кешеләр кеүек аҡыллы булығыҙ. Мәктәптән ҡайтҡанда ла, башҡа ергә барғанда ла әҙәпле булығыҙ.

ӘЙ, ЯҘМЫШ...

# ТУҠМАЛА - ТУҠМАЛА...

## ниңә иргә түҙә был ҡыҙ-ҡатын?



**Һеңлеһенең яҙмышын бәйән иткән ханымды ғәжәпләнеп тыңлайым. Ни өсөндөр, шундай ғибрәтле хәлдәрҙең беҙҙең яныбыҙҙа ғына булыуына ышанғы килмәй...**

Унының һеңлеһе мәктәптә уҡытыусы булып эшләгән. Аҡыллы ҡарашлы, уйсан ҡатын эшенә үтә яуаплы ҡарауы, балаларҙы яратыуы менән айырылып торған. Тәрбиәле әсәнең балалары - улы һәм ҡыҙы ла бөләкәс кенә булыуҙарына ҡарамаҫтан, тәрбиәлелеге, тыйнаҡлығы менән бар кешене һоҡландыра торған булған. Мәктәп тормошонда уҡытыусының тик ыңғай сифаттарын ғына күреп өйрәнгән коллегалары өйҙә унын ғазапланып, михнәт күреп йәшәүен башына ла килтермәгән.

Эйе, ире өйҙәге тормошон тамуҡҡа әйләндерә унын. Ә бит "Яратам, бәхетле булырмын", тип кейәүгә сыға ул. Тик иш түгелдәрен, иренең бәхет төшөнсәһен ул аңлағанса аңламауын тиҙ төшөнә ҡатын. Ул ирен, балаларын һәр саҡ беренсе урынға ҡуя. Әммә ире был тоғролоҡтоң ҡәҙерен белмәй. Юҡтан ғына тауыш сығара, яңъял һәр ваҡыт ирҙең ҡатынын туҡмауы менән тамамлана. Бик "аҡыллы" итеп туҡмай ир ҡатынын, йөҙөнә бер ҡасан да һуҡмай. Бите күгәреп йөрөмәй икән, ҡурҡыныс юҡ, унын ҡырағайлығын бер кем белмәй, ә ҡатынының бер кемгә лә һөйләмәйәсәген бик яҡшы белә ул. Суҡмарҙай йоҙроҡтар меҫкен ҡатындың башына әләнән-әле төшөп тора. Кемдер, был ир эскесе булғандыр, ни ҡылғанын белмәгәндер, тип уйлар. Юҡ, ул иҫерткес эсемлек менән артыҡ мауыҡмай. Уның айыҡ көйө вәхшиҙәрсә ҡыланыуын хәҙер инде бер кем дә аңлата алмаҫ. Сөнки, ысынлап та, ҡатын үҙенең тамуҡта йәшәгәнен берәүгә лә, хатта туғандарына ла белдермәй. Ә инде атай кеше балаларына ла ҡул тейҙерә башлағас, әсәй кеше түҙмәй, яҡындарына белгертә.

Ғәзиз һеңлеләрен туғандары үҙҙәренә алып ҡайта. Уртаҡ тырышлыҡ менән йорт һатып алалар. Әммә ҡатындың һаулығы ҡаҡшап өлгөргән булла. Ҡәбәхәт ирҙең йыш ҡына башын иҙгесләүе эҙһеҙ үтмәй - ҡот осҡос сир барлыҡҡа килә.Яңы урында уҡытыусы булып эшләй башлауына күп тә үтмәй, дауаханаға эләгә. Йәндәй күргән ике балаһын ҡалдырып, ҡатын мәрхәмәтлерәк донъяға күсә...

Ирҙең балаларҙы ла рәнйетеүен белгән туғандары әсәләре үлгәс, сабыйҙарҙы уға бирмәҫкә ҡарар итә. Бигерәк тә атай кеше өҙгөләнә. "Ҡыҙымды һаҡлай алманым. Күрәләтә бер ҡәбәхәттән туҡматып үлтерттем. Балаларҙы бирмәйем",-ти ул. Балаһын яҙалап йәшәгән кешене тере сағында үҙенсә хөкөмгә тарттырырға ла уйлай. "Уның был донъяла йәшәргә хаҡы юҡ бит. Ни өсөн шул әҙәм аҡтығы бер ни булмағандай рәхәтләнеп йәшәп ята?"-тип өҙгөләнә ул. Әммә ҡарт атайҙа кешелек тойғолары өҫкә сыға. Кейәүенең язаһын ул Хоҙай Тәғәләгә тапшыра. Әммә һөйөклө ҡыҙының нисәмә йылдар ыҙа сигеп йәшәүен һуңлап белгән атай йөрәге ғазапланыуҙарға түҙә алмай, йәшәүҙән туҡтай...

Суд. Ике баланың яҙмышы хәл итәлә. Әсәләренең ғүмерен өҙөүгә булышлыҡ иткән ир сабыйҙарҙы мәрхүмәнең туғандарына бирергә теләмәүен белдерә. Күрәһең, балаларға түләнгән пенсиянан, йортонан ҡалырға ҡурҡалыр. Эш урынынан бик яҡшы характеристика яҙҙырып алған ирҙе аталыҡ хоҡуғынан мәхрүм итеү еңелдән булмай. Суд бер нисә тапҡыр була. Һеңлеһенең балалары өсөн ысын күңелдән борсолған апайы, уларҙы аталары менән ҡалдырыу - бәхетһеҙ яҙмышҡа дусар итеү икәнлеген яҡшы аңлай. "Ҡайһы саҡта, - тип һөйләнә ул,- барыһын да ҡуяйыммы икән, тип уйланым. Суд тупһаһын тапау, үҙен фәрештәләй итеп күрһәтергә тырышҡан әҙәмгә ҡарау көсөмдә ала, хәлдән тайҙыра ине..."

Әммә апай кеше балаларҙы мәрхәмәтһеҙлек ҡосағына ташларҙай көс тапмай. Сираттағы судта ун йәшлек бала атаһының әсәһен дә, үҙен дә туҡмауын белдерә. Балалар илап, аталарына бирмәүҙәрен, етемдәр йортона ебәрмәүҙәрен үтенә. Кескәй малай һәм ҡыҙыҡай әсәләренең апаһы - инәйҙәренең тәрбиәһенә күсә.

Шулай итеп, бала яҙмышы һәр саҡ өлкәндәрҙең ҡулында. Бәхеткә сорналамы ул, әллә, киреһенсә, ҡайғыхәсрәткәме - беҙҙең намыҫта. Был балаларҙың киләсәге борсолоу тыуҙырмай. Сөнки улар татыу һәм бәхетле ысын ғаилә ҡосағында. Ә атаға килгәндә, ҡылған яуызлыҡтары өсөн яуап тотаһы алда әле уның...

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

ШАҢДАУ

# БИРГӘНЕНӘ РӘХМӘТЛЕ БУЛМАҺАҢ...

## тәбиғәт асыуланырға ла мөмкин

**"Киске Өфө" гәзитенең бер һанында Әбйәлил районы Байым ауылынан Әнүәрә Хәйбуллинаның "Был һүҙҙе йышыраҡ ҡабатла, тормошоң ҡотайыр" тигән мәҡәләһен уҡығас, телебеҙҙең байлығына һоҡландым һәм үҙем шаһит булған бер ваҡиғаны иҫемә төшөрҙөм.**

1978 йыл. Ҡариҙел йылғаһы буйында балыҡ ҡармаҡлайым. Эргәмә улын эйәрткән ир килеп ултырҙы. Ҡармаҡтарына ем элделәр ҙә, һыуға ырғыттылар. Улар килгәнсә балыҡ һәйбәт ҡаба ине, һирәгәйә төштө. Төшкә табан бөтөнләй ҡаппай башланы. Тегеләр ҡармаҡ һуйылдарын ярға сәнсеп, емләнгән ҡармаҡтарын һыуға ырғыттылар ҙа, әйбер тоғонан бер бөтөн аҡ икмәк менән колбаса сығарып, ашарға тотондолар. Улы һут, ә атаһы шешәләге яртыға төшкән араҡыны ҡылҡылдата-ҡылҡылдата йотоп, бушатып ҡуйҙы.

Балыҡ күңелде тынысландырыу өсөн булһа ла төртөп тә ҡарамай. Шуғалырмы, күршеләрем ҡармаҡтарын йыйҙылар ҙа, ҡайтырға әҙерләнә башланылар. Уларҙан ҡалған ярты икмәк, колбаса киҫәктәре яр башында ята бирҙе. Мин: "Ниңә ҡалған ашамлыҡтарығыҙҙы йыйып ашамайһығыҙ?" - тип һүҙ аттым. Тиге ир ауыҙындағы тәмәкеһен борҡолдатаборҡолдата, хайуандарға оҡшата бире дүрт аяҡлап янына килеп ултырҙы. "Әллә, абзый, ашарығыҙға юҡмы? Беҙҙән ҡалған ризыҡтарҙы ашап ҡуйығыҙ. Нәсим, вещмешоктағы ҡалған колбасаны ла шушы абзыйға килтереп бир," - тип бойорҙо улына. "Туғаным, ашарыма бар, миңә өҫтәмә ризыҡ кәрәкмәй. Мин һеҙгә шул ҡалған икмәк-колбасаларҙы алығыҙ, тип әйтеүем. Һуғыш ваҡытында кешеләргә ундай икмәк менән колбаса эләкһә, алтындай күреп, бер бөртөк валсығын да төшөрмәй ашар ине. Һеҙ аслыҡты күрмәгәнһегеҙ шул," - тинем. Ул тәмәкеһен ҡаты ғына бер һурып алды ла: "Ул ваҡыт булған да үткән инде. Хәҙер ни, эшләйбеҙ, ашайбыҙ. Артығы бына шулай ятып ҡала", - тине. "Энекәш, көс түгеп үҫтергән икмәкҡә ҡарата улығыҙҙа рәхимһеҙ ҡараш тыуҙырһығыҙ, үҙегеҙ ҙур гонаһҡа батаһығыҙ. Аллаһы Тәғәлә барыһын да күреп тора. Гонаһтарыңды ярлыҡармы һуң?" - тип өндәштем. "Мин ундай-быңдай күрәҙәселекҡә ышанмайым," - тигән булды уның яуабы. Мин быны ишеткәс, һөйләшеүҙе туҡтатып, ҡайтырға йыйына башланым. Улар минән иртәрәк ҡуҙғалды. Ярты икмәк менән колбаса киҫәктәре тәки яр буйында ятып ҡалды.

Әле генә булған һөйләшеүҙе онота алмай, уйҙарыма бирелеп, ярҙа ултыра инем, өҫ малай килеп сыҡты. Күренеп тора, күгәргәнсә һыу ингәндәр. Эргәмә саҡырҙым. "Ашағығыҙ киләме?" - тип һорауыма ыңғай яуап алғас, теге икмәкте киҫәктәргә телгеләп, колбаса менән бергә гәзит өҫтөнә һалып, алдарына ҡуйҙым. Күҙ асып йомғансы икмәк һәм колбаса киҫәктәре юҡ булды. Шунда малайҙарға был аҙыҡтарҙың улар ризығына яҙыуын һөйләп бирҙем. Быңа шулай һәр ризыҡты әрәм итмәй, ваҡытында

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

**Баланың теле бай, һүтлы булһын өсөн быға өйҙә ярым-йорто башҡортса һөйләшеп кенә өлгәшеп булмай. Әйтәйек, йыр яратҡан һәр кеше уның моңло, ишетер ҡолаҡҡа яғымлы булыуын ярата. Көй һәр төрлө бөгөлөштәргә, наҙға, моңға ни тиклем бай була һәм башҡарыусы уны ни тиклем оҫта итеп башҡара - шул тиклем күңелгә ятышлы була. Тел дә шулай. Телмәр мәҡәл-әйтемдәргә, сағыштырыуҙарға ни тиклем мул, саф, таҙа була, шул тиклем тыңлауы ла, әңгәмә ҡороу ҙа күңелле. Моңло йыр тыңлаған һымаҡ тәьҫир итә ундай телмәр. Шуның өсөн балаға туған телдә шиғырҙар уҡыу, әкиәттәр һөйләү, йыр тыңлатыу мотлаҡ.**



# ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ

## Икенсе һабаҡ: "Башҡортса һөйләшеү генә башҡортлоҡ түгел"

Бала бәләкәй саҡта әкиәтте китаптан уҡыу дөрөҫ булмай, әкиәтте, легенда-риүәйәттәрҙе һөйләргә кәрәк. Баланың йәшен, ҡабул итеү ҡеүәһен, зирәклек кимәлен иҫәпкә алып, әкиәтте фәҡәт һөйләргә генә кәрәк. Бала бәләкәй саҡта ымлыҡтарға, ҡабатлауҙарға күберәк иғтибар итә. Әкиәт оҡшаһа, уны көн һайын, үҙе ятлап бөткәнсе һөйләтергә лә əҙер улар. Ошо үҫенсәлекте файҙаланып, матур һүҙҙәр ҡушып, фәһемле берәй мәҡәл йә әйтем ҡушып һөйләгәндә, баланың зиһененә һеңеп тә ҡала.

Бала күңеленә моң аша юл ярыу - иң отошлоһо. Шуның өсөн дә йырҙар ғына түгел, хатта бөйөк ҡобайырҙар ҙа, әкиәттәр ҙә көйгә һалынған. Сабый мондо тыумыштан аңлай. Йырлағыҙ. Таҡмаҡ әйтһәгеҙ - тыпырсынып, күҙҙәре оҫҡонланып китер, оҙон көй йырлаһағыҙ - тынысланыр, хатта ҡайһы берҙәре үтә тәьҫирләнеп, илап та ебәрер. Ҡурай моңо - тынысландыра. Баланы йоҡлатып ебәреү өсөн ҡурай моңо тыңлатыу - бик отошло.

Халҡыбыҙҙа матур телəкле һамаҡлауҙар бихисап. Көйгә һалынған матур теләк бала күңеленә йоғоп ҡала. Мәҫәлән, баланы ҡулға алғас, былай тип теләгәндәр:

Балам, балам, бал ғына,
Тыуҙы ул һыңай ғына.
Ризыҡтары менән генә,
Ашаһын ул май ғына.

Билдәле булыуынса, һыу һәр төр теләкте, мәғлүмәтте тиҙ йотоп алыусан. Шуның өсөн баланы йыуындырғанда фәҡәт матур уй-теләкле булырға кәрәк. Борон инәйҙәр, әсәйҙәр йыуындырған саҡта былай тигәндәр:

Атаңды атай тиген,
Әсәңде әсәй тиген,
Һутлы телле бул,
Баллы һүҙле бул.

Баланы һикерткән һайын әйтелгән хуплау ҙа баланың яҙмышына тәьҫир итә, тиҙәр.

Һәтес, һәтес, һәтес тә,
Бигерәк матур бәпес тә,
Йылмая ла, көлә лә,
Алдаштыра белә лә,
Яндарынан ебәрмәй,
Һөймәләкле йылмайып,
Үҙәгемде өҙә лә.
Йәки:
Һәтес, һәтес, һәтес тә,
Бигерәк матур бәпес тә,
Кем ҡыуанмай, кем һоҡланмай
Былдай матур бәпескә.
Ир балаларға теләк һүҙҙәре:
Уҡ та атыр был балам,
Ян да тартыр был балам.
Ҡыйыу булыр был балам,
Батыр булыр был балам.
Яу ҡайтарыр, ил һаҡлар,
Илендәге бер һылыуҙы
Ҡаратыр ҙа был балам.
Ҡыҙҙарға:
Ҡыҙым, ҡыҙым, ҡыҙ кеше,
Ҡыҙыма килер йөҙ кеше,
Йөҙ кешегә бирмәйем,
Алып китер бер кеше,
Йөҙө яҡты бер кеше,
Ҡулы ипле бер кеше,
Күңеле изге бер кеше.

Баланы йыуындырғандан һуң, тәнен тәрбиәләгәндә, төрлө күнекмәләр эшләгәндә, уны һөйөп-яратып, матур теләк-хуплау һүҙҙәре әйтеү ныҡ тәьҫир итәлер - сабыйҙың күҙҙәре нурланып, кәйефе күтәрелеп, ығылдап-ҡыуанып ята.

Тотош тәнен яҙыу, һыйпау, ҡулды аҙ ғына майлап алып сабыйҙың аяҡ-ҡулдарын айырым-айырым һыпырыпһылау мәлендә былдай һамаҡлауҙар әйтелә:

Оһолло ла булыр ул, таһыллы ла булыр ул,
Буйы менән, һыны менән һоҡландырып торор ул.

Сабыйҙы маңлай уртаһынан башлап, баш бармаҡтар менән ике яҡҡа - ҡолаҡҡа табан ипле генә һыйпайһың, теләк теләйһең:

Маңлайҙарың яҫы ғына, аҡыл һандығы булһын,
Уй-теләгең яҡты булһын, зирәклегең ҡыуандырһын,
Ай-ҡояшҡа талпындырһын, йыһандарҙы байҡаһын.
Ҡолаҡтарын һыйпағанда:
Матур һүҙгә асыҡ бул,
Яманына ябыҡ бул.

Баланы йүргәккә төргәндә былдай теләктәр әйтеү яҡшы:

Йоҡла, балам, ойоп ҡына,
Күҙеңде йомоп ҡына.
Йомшаҡ ҡына йүргәгеңдә
Ҡуйындай тойоп ҡына,
Ҡуйындай тойоп ҡына.
Йүргәгеңә һеңеп ҡала
Ҡулдарымдың йылыһы,
Күңелемдең яҡты нуры,
Уйҙарымдың наҙлыһы,
Уйҙарымдың наҙлыһы.
Бармаҡтарға күнекмә яһау мотлаҡ:
Баш бармағың көс йыйһын, барына ла баш булһын,
Һуҡ бармаҡты яңғыҙлатмай,
Көс-ҡеүәт биреп торһон.
Берәүҙән икәү яҡшы,
Икәүҙән өсәү яҡшы,
Урта бармаҡ - төп бармаҡ,
Урта бармаҡ - көс бармаҡ,
Урта бармаҡ - уртаҡ бармаҡ,
Уртаҡ бармаҡ - таяныс,
Сығанаҡҡа ҡыуаныс,
Иң кесеһе - сәтәкәй,
Сәтәкәйе - бәләкәй,
Бигерәк иркә генә,
Үҙе тағы сос ҡына,
Әрһеҙ генә, түҙем генә.
Барына өлгөр генә.

Бала тәүге аҙымдарын атлағанда, ышаныс тыуҙырыр өсөн былай тигәндәр:

Туп, туп, туп итеп,
Баҫып китеү генәһе,
Аҙымдарын ныҡлы баҫып,
Атлап китеү генәһе.

Әлбиттә, хуплау, маҡтау, осондороп ебәреү, теләк теләү һүҙҙәре мотлаҡ ошолар ғына булырға тейеш, тигәнде аңлатмай. Беҙ әле һәр төр теләктәрҙән өлгөләр килтерәбеҙ. Уны үҙгәртергә, өҫтәргә, заман талаптарына тап килтерергә мөмкин. Ҡайһылай ғына булмаһын, бала бәләкәй саҡтан уҡ тәрбиә һүҙенең көсөн файҙаланырға кәрәк.

Кәмһенгән күңел йомола, ти халыҡ. Балаға фәҡәт хуплау-дәртләндереү һүҙҙәре генә әйтергә кәрәк. Күңел йылыһы, күңел наҙы ни тиклем мул булһа, шул тиклем отош ҡына булыр. Баланы наҙҙан мәхрүм итергә ярамай. Наҙҙан, күңел йылыһынан мәхрүм итеп, беҙ күҙгә күренмәгән нур донъяһына кире тәьҫир яһап, баланы әллә ниндәй тәбиғи һәләттәренән мәхрүм итеүебеҙ ихтимал.

Тәбиғи һәләт тигән фекергә миҫал килтереү урынлы булыр.

Заман фән ҡаҙаныштары тәбиғәттең байтаҡ серҙәрен асты, аса, асасаҡ. Шундай асыштарҙың береһе - инкубатор. Бер юлы меңәрләгән себеш сығарып була. Инкубатор тауыҡ йылылығына ҡулайлаштырып яһалған. Әммә тауыҡ себеш баҫҡандағы йылылыҡ булдырылһа ла, уның һыны бирә алмай. Шунлыҡтан, инкубатор себештәре үҫкәс, үҙҙәре себеш баҫыуҙан мәхрүм.

Аңлағанға ишара ла етә, ти халыҡ. Яһалмалылыҡ ни тиклем генә камил булмаһын тәбиғилекте алмаштыра алмай. Тимәк, тағы бер тапҡыр ҡабатлап китеү урынлы булыр. Баланың бөтөн булмышын камиллаштырыу нигеҙе тәбиғәттән һалынған туған теле менән бәйле. Туған тел аша бирелергә тейеш ҡиммәттәрҙе сабый сағынан уҡ әсәй кеше күкрәк һөтө менән ҡуша һала барырға тейеш. Шуның өсөн дә инә һөтө менән бирелмәһә, тана һөтө менән бирелмәй, тигәндәр.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәрйәм апай Бураҡаева башлап ебәргән был эшкә - мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләү әсбабын яҙыуға башҡа педагогтарҙың, өләсәй-олатайҙар, атай-әсәйҙәрҙең дә ҡушылыуын теләйбеҙ: үҙ һабаҡтарығыҙ, кәңәш-фекерҙәрегеҙ, тәжрибәгеҙ менән һеҙ ҙә уртаҡлаша алаһығыҙ. Милләт киләсәге - ошо тәнәйҙәр ҡулында һәм тәнәйҙәребеҙҙе дөрөҫ тәрбиәләүгә бөтөн көсөбөҙҙө һалырға тейешлегебеҙ хаҡында тағы бер тапҡыр уйланайыҡ әле, йәмәғәт. Хаттар-хәбәрҙәр көтәбеҙ.**



Бала күтәргән атайҙар ҡалай матур!

ашап файҙаланыу - кешеләргә бәхет килтереүен әйттем. Ҡайтыр саҡта рәхмәттәр әйтеп, бик йылы оҙатып ҡалдылар. Яҡшы һүҙ - йән аҙығы, тигәндәй, малайҙар менән һөйбәт аралашыуым күңелемә май булып ятты.

Шунан аҙаҡ та Ҡариҙел яры буйҙарында, һыу өҫтөндә ашалып бөтмәгән икмәктәр ятыуын һәм ағыуын күп күрҙем. 1979 йылда Ҡариҙел шул ризыҡтарҙы ташлап китеүсе бәндәләрҙән ҡаты үс алды. Һыу иң китмәле ныҡ ташты. Ауылдарҙы, яр буйындағы баҡсаларҙы, болонлоҡтарҙы һыу ҡапланы. Ә йәй бер тамсы ла ямғыр булманы, ҡоролоҡҡа тартты. Бар тәбиғәт ҡотһоҙ күренешкә әйләнде. Быны кешеләрҙең тамаҡтары туйып һикереүҙән, ризыҡтарға мәрхәмәтһеҙ булыуҙарынан үс алыу, тип ҡабул иттем...

**Мөхәммәт НУРМӨХӘМӘТОВ.**

**РЕДАКЦИЯНАН:** **Мөхәммәт Нурмөхәмәтов ағайҙың ошо ҡулъяҙмаһын баҫырға әҙерләгән көндәрҙә уның ҡапыл ғына яҡты донъяны ҡалдырыуы тураһында хәбәр алдыҡ. Битараф булмаған, тәбиғәте менән тәрбиәле һәм әүҙем ағайыбыҙ тураһындағы иҫтәлек күңелдәрҙә оҙаҡ һаҡланыр әле. Туғандарының, ғаиләһенең ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.**

✓ *Мәктәп етәкселәре менән мәғариф хәлдәре тураһында һөйләшә башлаһаң, күңелдә эске бошоноу биләп ала. Бер яҡтан, уларҙы финанс ҡытлығы йонсотһа, икенсе яҡтан, мәктәпкә бюрократик баҫым көсәйә.*



## ҠАЙҘА БАРАБЫҘ БЕҘ, ЙӘМҒӘТ!

**Өфөлә уҙған быуаттың 90-сы йылдарына тиклем ҡала башҡорттары балалары өсөн берҙән-бер булған 20-се ҡала башҡорт мәктәбе генә эшләй ине. Халҡыбыҙҙың милли үҙаңы күтәрелеү менән бәйле , 1994 йылда баш ҡалабыҙҙың Сипайлово биҫтәһендә 136-сы башҡорт лицейы асылды, һәм миңә лә биш йыл самаһы ошо мәктәптә эшләү насип булды. Тороҡһоҙ, иртәгәһе ни булыры билдәһеҙ ошо осорҙа тергеҙелеү, яңырыу кисергән башҡорт милли мәғарифының яңы ғына ҡабыҙылған бер усағында ҡайнап йөшәгән ошо йылдарҙы әле лә ғүмеремдең иң бәхетле бер мәле итеп хәтерләйем.**

Әйтергә кәрәк, республикабыҙ суверенлылығы закон көсөнә эйә булған ошо йылдарҙа милли мәктәптең үҫеше өсөн үтә уңайлы шарттар тыуҙырылғайны. Бәлки, мәктәп мөхитенә демократик идеялар һәм мөнәсәбәттәр үтеп ингән берҙән-бер бик емешле ваҡыт булғандыр ул. Быны мин ошо ваҡытты матурлапбиҙәп күрһәтергә тырышыуҙан әйтмәйем, үҙем кисергән тәжрибәнән сығып раҫлай алам. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, ҡала мөхитендә милли күтәрелеш кисерелгән ошо осорҙа ла йәшәйеш еңелдәрҙән булманы, ул саҡта ла мәктәп ихтыяждарын тулыһынса ҡәнәғәтләндерә алыу тик хыялда ғына ине. Былай ҙа артыҡ ҙур булмаған эш хаҡтары айҙар буйына түләнмәгән мәлдәрҙә лә рухыбыҙ һүнмәне, милләтебеҙ үҫешенә үҙ өлөшөбөҙҙө индерергә теләү беҙгә дәрт-дарман өҫтәп торҙо. Милли мәктәптең киләсәге матур булыуына ныҡ инанғайныҡ, һәм шул маҡсатҡа өлгәшеү өсөн ҡулыбыҙҙан һәм аңыбыҙҙан килгәндең барыһын да эшләргә тырыштыҡ. Эш һөҙөмтәләребеҙ ҙә һоҡланғыс булды.

Иғтибар итегеҙ: мәғариф өлкәһендәге дәүләт сәйәсәте үҙгәргәндә мәктәптәрҙе ябыу, уларҙы финанслауҙы кәметеү түгел, ә яңыртылған мәктәп системаһын төҙөү булды. Тап ошо йылдарҙа шифалы ямғырҙан һуң ҡалҡынған бәшмәктәр кеүек, республикабыҙ ҡалаларында һәм ауылдарында яңы типтағы милли мәктәптәр үҫеп сыҡты.

Ул йылдарҙа ил мәғарифы етәкселәренең бик ваҡытлы һәм киләсәк өсөн үтә мөһим булған бер гәмәли эшенә - лицей һәм гимназияларҙы тергеҙеүенә тейешле баһаны ваҡыт үҙе бирер, тип ышанайыҡ. Октябрь революцияһына тиклем тап ошо типтағы уҡыу йорттарында Рәсәйҙең бөтә донъя кимәлендә билдәлелек алған ғалим-ғөләмәләре, яҙыусы-шағирҙары һәм башҡа күп зыялылары төплө белем ала. Беҙ, бәлки, ул заманда алып барылған уҡытыу-тәрбиә кимәленә яҡынлай ҙа алмағанбыҙҙыр, әммә тап лицей-гимназиялар милли мәғарифыбыҙ алдында яңы мөмкинлектәр асты.

Әйтергә кәрәк, ошо мәктәптәрҙең етәкселегенән, педагогик коллективтарынан яңыса һәм ижади эшләү талап ителде, һәм һәр яңылыҡ хуплау ҙа таба ине. Уҡыу пландары һәм программаларынан башлап, мәктәптең төп йүнәлештәрен (профилен) билдәләүгә тиклем күп нәмәләр урындарҙа хәл ителде. Бер үк мәктәп сиктәрендә уҡыусылар теләктәре һәм мөмкинлектәренә ярашлы гуманитар, тәбиғи йәиһә художество-эстетик йүнәлештәрҙең береһен һайлап, үҙ һәләттәрен бик иртә аса алыуға өлгәшә ине. Мәҫәлән, 136-сы лицейҙа уҡыу йылының март-апрель айҙарында уҡ 3-сө синыф уҡыусылары араһынан һайлап, башҡорт-рус-инглиз телдәре тәрәнәйтеп өйрәтәлә торған лингвистика класы төҙөлдө. Хәҙер күптәр хатта ышанмаҫ та: ошо йүнәлештә уҡытыуҙың төүге йылында тел предметтарына аҙнаһына 22 сәғәт ваҡыт бүленеп, уҡыусылар инглиз телен бер үк ваҡытта Рәсәй һәм Кембридж университеты программалары буйынса үҙләштерә башланы. Эксперимент бик уңышлы булды, ошо йүнәлеш буйынса белем алғандар әлеге өс телдә иркен һөйләшә, һәм улар артабан үҙҙәре һайлаған төрлө-төрлө һөнәрҙәр буйынса вуздарға уҡырға инде. Илебеҙҙең һәм республикабыҙҙың иң абруйлы вуздарында уҡыу хоҡуғына эйә булды лицей һәм гимназияларҙы тамамлаусы мендәрсә уҡыусыларыбыҙ. Быны шул рәүешле уҡытыуҙан берәй уҡыусыбыҙ зыян күрҙеме икән? Юҡ, әлбиттә. Әле ни бары 15 кенә йыл эшләп өлгөргән М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейын тамамлап сыҡҡандар ниндәй генә һөнәр һайламаны, тиҙ генә һанап сығырлыҡ та түгел: хоҡуҡсылар, иҡтисадсылар, хәрбиҙәр, ғалимдар, математиктар, программистар, табиптар, артистар ...

Ә бөгөн тап бына шулай уҡытырға ярамай, һәм бындай "үҙешмәкәрлек" закон нигеҙендә тыйыла. Йәнәһе, беҙ демократик илдә йәшәйбеҙ бит, бөтәһенең дә тип-тигеҙ һәм игеҙәктәрҙәй бер төрлө белем алыуы өҫтөн ҡуйыла хәҙер. Лицей һәм гимназия тигән атамаларҙың есемдәре бөтөрөлөп, ҡағыҙға яҙылған ҡоро исемдәре генә ҡалып бара. Ниндәй үкенесле, ә! 90-сы йылдар мәктәп демократияһының "алтын осоро" сифатында хәтергә төшһә, бөгөн кисергәнебеҙ ошо осорҙа тыуған изге хыялдарыбыҙ түңкәрелеше булып тойола. Ни эшләйһең инде, йәмғиәт һәм дәүләт ниндәй - мәктәбе лә шундай, һәм ошо аяуһыҙ ҡанунды бөгөн инҡар итеүсе лә табылмаҫтыр. Тик шуныһы: ил элитаһын (уның интеллектуаль-мәҙәни асылы хаҡында фекер йөрөткәндә) "яңы урыҫтар"ҙың сит илдәргә уҡырға ебәрелгән балалары ғына хасил итә алырмы һуң? Ай-һай, ышаныуы ҡыйын быға, алтын да бөтә илдән бөртөкләп йыйыла бит.

Бөгөнгө мәктәп етәкселәре менән мәғариф хәлдәре тураһында һөйләшә башлаһаң, күңелдә ниндәйҙер эске бошоноу биләп ала. Бер яҡтан, уларҙы финанс ҡытлығы йонсотһа, икенсе яҡтан, мәктәпкә бюрократик баҫым көсәйә генә бара. Аҡса етмәгәс, штаттарҙы ҡыҫҡартырға, өҫтәмә белем биреү, түңәрәктәр эшен "түңәрәкләргә" мәжбүр мәктәп директоры. Мәктәп ихтыяждарына бүленгән аҡса уҡытылған дәрестәр өсөн эш хаҡы түләүгә лә етер-етмәҫ булғас, ҡурай түңәрәген дә ҡыҫҡартырға мәжбүр мәктәп етәксеһе. Төрлө кимәлдә матур саралар уҙғарыу модаһын үҙ иткән түрәләр ни эшләр икән: ҡунаҡтар алдында башҡорт ҡурайында уйнай белгән мәктәп уҡыусылары ҡалмаясаҡ, эштәр былай барһа. Барыбер уларҙы директорҙан таптыраСаҡтар, сөнки барыһы өсөн ул ғына яуаплы: мәктәптең яңғынға ҡаршы һәм санитар торошо, бинаһарҙы ремонтлау, кәрәкле йыһаздарҙы эҙләп табыу, мәктәп ашханаһы эше, балалар ғүмерен төрлө ҡазаларҙан, яуыз заттарҙан һаҡлау, уҡыусыларҙың юл йөрөү ҡағиҙәләрен үтәүе, төрлө мәҙәни һәм байрам сараларында мотлаҡ ҡатнашыу, милиция менән бәйләнеш тотоу, гәзит-журналдарға яҙылыу, коллектив ағзаларын кисекмәҫтән партия ағзаһы итеү... Ошо рәттә тағы әллә күпме дауам итергә булыр ине, гәзит майҙаны йәл. Ишеү етмәһә, эргәләге һәм өҫтәрәк торған әллә күпме органдарға бер туҡтауһыҙ төрлө мәғлүмәт һәм отчет тапшырыу ҙа директор иңенә йөкмәтелгән.

"Оператив кәңәшмәләрҙә уҡытыу-тәрбиә мәсьәләләрен тикшереү өсөн ваҡыт ҡалмай башланы, сөнки өҫтән төшөрөлгән күрһәтмәләрҙе нисек тиҙерәк үтәү хаҡында баш ватырға тура килә", - ти бер мәктәп директоры. "Район һәм ҡала кимәлендә ниндәй генә кәңәшмә уҙғарылмаһын, унда мәктәп директорҙары саҡырыла. Башлыса, унда тикшерелгәндәрҙең мәктәпкә бер ҡағылышы ла булмай. Күрәһең, залда тыңлаусан һәм абруйлы кешеләр ултырмаһа, ойошторосыларҙың күңеле булмай", - ти икенсеһе. Кем ошо бер файҙаһыҙ сараларға йөрөмәй, шуны киҫәтә башлайҙар, эш хаҡын кәметәләр, эштән сығарыу менән янайҙар.

# ҠУРАЙ НИ ӨСӨН

## Йәки Ҡулайлаштырыу

Иң аянычлыһы, быларҙың барыһы ла хәҙерге закондарға нигеҙләнеп башҡарыла. Ҡырағай, йәғни "алыпһатарҙар" капитализмы идеологтары тарафынан мәктәпте йән башына ҡарап финанслау законын ғәмәлгә ашырыуҙы иң элгәре балалар һаны аҙ булған милли мәктәптәрҙе тауышһыҙ-ниһеҙ генә юҡҡа сығарыуға тинләү дөрөҫ булыр. Финанслау тураһында закон бар, әммә Рәсәйҙең милли мәктәбе хаҡында закон юҡ, хатта "Мәғариф тураһында"ғы РФ законында "милли мәктәп" тигән төшөнсә лә юҡ! Башҡортостандың ошондай законының 7-се статьяһында ла был төшөнсә һуҙ ыңғайында ғына телгә алынып киткән. Әйткәндәй, ошо законды яңыртыу ниәтендә оҙайлы көрәш алып барған бән фәкирегеҙҙе юғары вазифалы бер депутатыбыҙ законға "милли мәғариф" тигән зарарлы төшөнсә (!) индерергә тырышыуҙа ғәйепләгәйне. Эйе, һәммәбеҙҙе лә "рәсәйле" тигән берҙәм һәм бүленмәҫ милләт кешеһе итергә теләүселәр өсөн милли мәктәптең бер кәрәге лә юҡ, быны асыҡтан-асыҡ әйтмәһәләр ҙә, тел төптәрендә шул ята. Тимәк, әгәр беҙ киләсәктә лә милли мәктәбебеҙҙе һаҡлап ҡалырға, милләтебеҙҙе ҡоротоуға юл ҡуйҙыртмаҫҡа теләйбеҙ икән, республикабыҙҙа милли мәғариф мәсьәләләрен көйләүсе закон нормаларын ҡабул итергә тейешбеҙ. Бөгөнгө Рәсәй ҡануниәте федерация субъекттарына әлегә ундай мөмкинлекте бирә, ошонан файҙаланып ҡалмаһаҡ, һуңынан терһәкте тешләп булмаҫ.



**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ҠЫҪҠАРТЫЛДЫ?

## ҡорбан һорай…

**Шәмсулла ХӘБИБРАХМАНОВ, М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейы директоры:**

- 1994 йылда баш ҡалабыҙҙың Сипайлово биҫтәһендә - 136-сы башҡорт лицейы, 1996 йылда Калинин районында 140-сы гимназия, ә һуңынан Өфөнөң башҡа райондарында ла берәр башҡорт мәктәбе асылып, улар уңышлы ғына эшләп киткәс, ата-әсәләр алдында башҡорт мәктәбенең абруйы бермә-бер күтәрелде. Ул саҡта балалар һаны хәҙергенән ике тапҡырға тиклем тиерлек күберәк ине, балаларын башҡорт мәктәбендә уҡытырға теләүселәр ҙә бик күп булды. Шул уҡ Сипайлово биҫтәһендәге мәктәптәр өс сменалы уҡытыу режимында эшләргә мәжбүр булды, ә хәҙер 2 сменалы мәктәптәр һаны 15 проценттан артмай. Ата-әсәләрҙең күпселеге баш ҡалаға ауылдарҙан килеп урынлашыусылар булғас, уларҙа үҙ балаларын башҡорт мәктәбендә уҡытырға теләү көслө ине.

Ул саҡта ҡала башҡорт мәктәптәренең финанс хәле хәҙергегә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ ине, тинәк тә хата булмаҫ. Әлбиттә, өлгөлө эшләгән мәктәптәргә мәғариф буйынса өҫтөнлөклө милли проекты ғәмәлгә ашырыу сиктәрендә дәүләт ярҙамы һиҙелерлек булды. Әммә еңеүсе исеменә лайыҡ булған мәктәптәр үҙҙәренә бирелгән аҡсаны бары уҡытыуҙың матди-техник базаһын нығытыу, яңы уҡыу әсбаптары һәм йыһаздар алыу өсөн генә ҡуллана ала. Әйтергә кәрәк, элегерәк мәктәп өсөн тәғәйенләнгән кабинет йыһаздары, әсбап-ҡорамалдар бик осһоҙ булып, мохтажлыҡ барлыҡҡа килеү менән заказ биреп, үҙ ваҡытында алып ҡалыу мөмкин булды. Хәҙер ошо бер тапҡыр бирелә торған ярҙам менән генә хушһынып йәшәп булмай, сөнки мәктәптең көндәлек эшмәкәрлеген тәьмин итеү өсөн уны йыл әйләнәһенә финанслап тороу фарыз. Бөгөн мәктәп өсөн бюджеттан бүленгән аҡсалар күләм яғынан ҙур булһа ла, беҙҙең ихтыяждарыбыҙҙы тулыһынса ҡәнәғәтләндереү мөмкинлеге юҡ. Бигерәк тә көндәлек ваҡ-төйәк сығымдар өсөн бүленә торған аҡса юҡҡа иҫәп. Шул уҡ ваҡытта һәр йыл һайын мәктәпте яңы уҡыу йылына әҙерләү, уҡытыу-тәрбиә процесы өсөн тейешле шарттар булдырыу талабын мәктәп етәкселеге мотлаҡ үтәргә тейеш. Был осраҡта мәктәп ата-әсәләрҙән ярҙам һорарға мәжбүр була, был бер кемгә лә сер түгел бит инде.

Мәктәпте йән башына ҡарап финанслау системаһын индерер алдынан оҙайлы өгөт-нәсихәт эштәре алып барылды, шуға күрә беҙ яҡшы яҡҡа үҙгәрештәр булыуына өмөт иткәйнек. Уҡытыусыларыбыҙҙың эш хаҡтары ярайһы уҡ артыр, тип уйлай инек. Өмөттәребеҙ аҡланманы, киреһенсә, мәктәп эшмәкәрлеген финанслауҙа яңы ҡаршылыҡтар килеп сыкты. Уҡыусыларының дөйөм һаны күп булып, ике сменала уҡытҡан мәктәптәр өсөн генә файҙалы яңы система. 90-сы йылдарҙа башланған демографик көрсөк уҡыусылар һанының нык кәмеүенә килтергәс (ә был процесс оҙаҡ дауам итәсәк әле), мәктәпте финанслау ҙа кәмегәндән-кәмей барасаҡ. Кластағы уҡыусылар һаны 25-тән дә кәм булырға тейеш түгел, шуға күрә кластар һанын ҡыҫҡартырға тура килде. Элек, мәсәлән, бер параллелдәге 3 класта 60 уҡыусы булһа, ҡулайлаштырыу һөҙөмтәһендә ике генә класс ҡалдырылып, һәр береһендә 30-ар бала уҡый. Эш ҡатмарлаша бара, ә сәғәттәр һаны аҙ булған уҡытыусының эш хаҡы барыбер бик түбән килеп сыға. Уҡытыусының ставкаһы 4200 һум булһа, эш хаҡының минималь күләме күтәрелеүе арҡаһында беҙ техник хеҙмәткәрҙәргә 4300-әр һум түләй башланыҡ, ә шул уҡ ваҡытта финанслау күпкә кәмене. Ауырып киткән уҡыусыларҙы өйҙә уҡытҡан өсөн дә айырым аҡса бүлеү ҡаралмаған. Һөҙөмтәлә мәктәптәрҙең күбеһе штаттарын ҡыҫҡарта, электән эшләп килгән тәрбиәселәр, түңәрәк етәкселәре өсөн сығымдарға нык бөҫкәргән эш хаҡы фондынан аҡса етмәйәсәк. Уҙған уҡыу йылында бойомға ашырылған ҡулайлаштырыу саралары һөҙөмтәһендә лицейҙа класс-комплекттар һаны 32-нән 28-гә ҡыҫҡартылды, педагогик һәм ярҙамсы персонал штаты 10 берәмеккә кәметелде, аҙнаһына 116 сәғәт күләмендә инновацион эшмәкәрлек өсөн тәғәйенләнгән сәғәттәр юҡҡа сығарылды, 17 класта инглиз теле һәм информатика дәрестәрен икешәр төркөмгә бүлеп уҡытыу туҡтатылды. Һөҙөмтә нисек булды һуң? Тик уҡыу йылының төүге яртыһында ғына ла лицей 700 мең һум аҡсаны "артыҡ" тотонған! Вожатый, социаль педагог, логопед, түңәрәк етәксеһе кеүек мәктәпкә кәрәкле белгестәргә түләргә мәктәптең аҡсаһы юҡ хәҙер. Директор урынбаҫарҙарына өҫтәмә түләү мөмкин булмай башланы, уларҙың эш хаҡы уҡытыусыныҡынан да түбәнерәк. Был хәлдә ни эшләргә ҡала? Тик бер генә сара - педагогтар һәм башҡа хеҙмәткәрҙәр һанын артабан ҡыҫҡартыу. Төшөнәһегеҙҙер, был беҙҙең үҫеш мөмкинлектәрен юҡҡа сығарып, уҡытыу-тәрбиә биреү сифатының хөртәйеүенә килтерәсәк. Хәҙер ҡала мәктәптәрен 3 төргә бүлеп була: беренсеһендә уҡыусылар һаны бик күп булып, финанслау кимәле юғары була; икенсеһендә финанслау тик эш хаҡына етерлек кимәлгә етә; өсөнсөһөндә мәктәп етәкселеге уҡытыусыларға нисек эш хаҡын тулыһынса һәм ваҡытында түләй алыу хаҡында баш ватасаҡ. Ә ҡала мөхитендәге милли мәктәптәрҙә уҡыусылар һанын бик теләп арттырыр инек тә, тик демографик ысынбарлыҡты үҙгәртеп булмай. Ә финанслауҙың яңы системаһы уҡытыусыларға эш хаҡын уларҙың эшмәкәрлек һөҙөмтәләренә ҡарап түләүҙе күҙ уңында тота ине бит. Милли мәктәптең эш хаҡы фонды нык кәмегәс, өҫтәмә түләү өсөн аҡсаны ҡайҙан алмаҡ кәрәк? Ә тәүҙәрәк етәкселәребеҙ милли мәктәптәрҙе финанслау мәсьәләһе айырым хәл ителәсәк, тип ышандыра килгәйне бит. Бындай хәлдә тап Черномырдин әйткәнсә баһалап була: "Ниәтебеҙ изге ине, әммә был юлы ла һәр ваҡыттағыса килеп сыкты".

**Илдар МОТАЛОВ, Ф. Мостафина исемендәге 20-се башҡорт гимназияһы директоры:**

- Баш ҡалабыҙҙағы башҡорт лицей-гимназиялары, муниципаль белем биреү учреждениелары булараҡ, үҙ райондарында ғына түгел, ә бөтә ҡала кимәлендә иң юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән мәктәптәр иҫәбенә инә. БДИ һөҙөмтәләре, төрлө кимәлдәге предмет олимпиадалары күрһәткестәре, урта һәм юғары уҡыу йорттарына инеүселәр һаны һәм, әлбиттә, уҡыусыларыбыҙҙың тәрбиәлелеге буйынса милли мәктәптәребеҙ мәғариф системаһының ғорурлығы булып тора. Педагогик коллективтарыбыҙ ҙа үҙ өҫтөнә һалынған бурысҡа бик етди ҡарап, ҙур тырышлыҡ һәм фиҙакәрлек менән эшләй. Шуға күрә халыҡ алдында ла абруйыбыҙ ҙур, тип раҫлай алабыҙ. Был уңыштарыбыҙ милли мәғарифты үҫтереүҙә өҫтөнлөклө йүнәлеш итеп ҡараған республикабыҙ етәкселәренең даими иғтибары һәм ярҙамы менән бермә-бер бәйле, тиеү ҙә дөрөҫ. Ә бөгөн ошо һөҙөмтәле эшебеҙҙең киләсәге өсөн ысынлап та хәүеф бар, һәм уны бер нисек тә инҡар итеп булмай. Башҡорт мәктәбен ҡәҙимге урыҫ телле мәктәп менән бер ҡалыпҡа һалып ҡарау һис дөрөҫ булмаҫ, сөнки унда милли мәктәп алдында торған бурыстар юҡ. Быны быйылдан башлап беҙҙең мәктәптә ҡурай түңәрәге өсөн аҡса юҡ. Ә урыҫ мәктәбе өсөн ҡурай бар ни ҙә, юҡ ни. Ата-әсәләр үҙҙәре йәшәгән йорт янындағы ҡәҙимге ҡала мәктәбенән бер нисек тә айырылмаған башҡорт мәктәбенә балаһын әллә ҡайҙан йөрөтөп уҡытырға теләрме икән артабан? Милли мәктәптең үҙенсәлектәре, уның милләтебеҙ алдындағы өҫтәмә бурыстары финанслауҙа бер нисек тә иҫәпкә алынмағас, әле алып барылған эштәребеҙҙе тик ҡоро энтузиазмға ғына ҡора алырбыҙмы һуң? Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, бөгөн киләсәкте сифатлы эшләй алыуыбыҙ өсөн бик уңайһыҙ булған шарттар барлыҡҡа килде.

Баш ҡалала яңы башҡорт мәктәптәрен асыу зауырлығы хаҡында ла һүҙ ҡуҙғатылып килә. Бөгөн, миненсә, һан артынан ҡыуыуҙан фәтеүә юҡ, сөнки әле эшләп килгән мәктәптәребеҙҙең ниндәй шарттарҙа көн күреүе тураһында барыһы ла хәбәрҙар түгел. Үҙебеҙҙең гимназиябыҙҙа ғына ла ике йыл эсендә штаттан 17 ставканы ҡыҫҡартырға мәжбүр булдыҡ. Һәр кластағы балалар һанын 30-ға ла еткереп була, әммә был осраҡта уҡытыу-тәрбиә эшенең сифаты артҡы планда ҡаласаҡ.

**Ирек ВӘЛИЕВ, М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейы директоры урынбаҫары:**

- Йән башына ҡарап финанслау системаһы милли мәктәп өсөн һис ҡулайлы түгел, уның кире йөгонтоһоноң нисек булыуын беҙ хәҙер бик яҡшы аңлайбыҙ. Был система уҡыусыларҙың һәләттәрен асыу һәм үҫтереү мөмкинлеген юҡҡа сығара. Элегерәк мәктәп етәкселегенән һәләтле уҡыусылар өсөн махсус курстар алып барыу, был эшкә вуз ғалимдарын йәлеп итеү талап ителһә, фәнни-методик эш алып барыу өсөн махсус сәғәттәр бүленеп, шул эштәр өсөн артыҡ ҙур булмаған финанслау ҡаралһа, бөгөн, мәсәлән, уҡытыусы 25-тән ашыу уҡыусы ултырған класта ошо маҡсаттарға барыһы өсөн дә уртаҡ булған дәрестәр аша ғына өлгәшергә тейеш булып сыға. Бындай шарттарҙа айырым уҡыусылар менән шәхси эш алып барыуы мөмкин дә түгел. Ниндәйҙер предмет буйынса уҡыусы ни тиклем һәләтле булмаһын, ул башҡаларҙан айырмалы белем ала алмаясаҡ. Уҡыусыларыбыҙҙы бына ошолай "тигеҙләү", күрәһең, хәҙерге мәктәп демократияһын ғәмәлгә ашырыу булалыр инде. Эштәр артабан да шулай барһа, дүрт-биш йылдан әлегә тиклем өлгәшелгән уңыштарыбыҙҙы ҡабатлай алыуҙан да өмөттө өҙөргә тура киләсәк.

Рәсәй Президенты башланғысы менән иғлан ителгән "Беҙҙең яңы мәктәп" идеяһына ярашлы, киләсәктә мәктәп һәр районда социаль-мәҙәни үҙәккә әүерелеп, төштән һуң унда ололар һәм балалар өсөн төрлө саралар ғәмәлгә ашырылыуы күҙаллана. Мәктәбебеҙҙең иң көнүҙәк ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә тәғәйенләнгән финанс ағымы күҙ алдында ҡорой барғас, быларҙы тормошҡа ашмаҫ бер хыял рәүешендә генә ҡабул итергә ҡала.

■ *Мәктәпте йән башына ҡарап финанслау системаһын индерер алдынан оҙайлы өгөт-нәсихәт эштәре алып барылды, шуға күрә беҙ яҡшы яҡҡа үҙгәрештәр булыуына өмөт иткәйнек. Уҡытыусыларыбыҙҙың эш хаҡтары ярайһы уҡ артыр, тип уйлай инек. Өмөттәребеҙ аҡланманы, киреһенсә, мәктәп эшмәкәрлеген финанслауҙа яңы ҡаршылыҡтар килеп сыкты. Уҡыусыларының дөйөм һаны күп булып, ике сменала уҡытҡан мәктәптәр өсөн генә файҙалы яңы система. 90-сы йылдарҙа башланған демографик көрсөк уҡыусылар һанының нык кәмеүенә килтергәс (ә был процесс оҙаҡ дауам итәсәк әле), мәктәпте финанслау ҙа кәмегәндән-кәмей барасаҡ. Кластағы уҡыусылар һаны 25-тән дә кәм булырға тейеш түгел, шуға күрә кластар һанын ҡыҫҡартырға тура килде.*

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Бөгөн бөтә ил кисергән финанс көрсөгө шарттарында республикабыҙҙың милли мәғарифы ҡаҙаныштарын һаҡлап ҡалып, уның киләсәген дә тәьмин итә алырлыҡ шарттар булдырыу фарыз. Әлбиттә, социаль-иктисади ысынбарлыҡ менән иҫәпләшмәйенсә булмай, шул уҡ ваҡытта мәғарифҡа һалынған финанслауҙы ҡыҫҡартыу менән генә бюджет дефицитын да юҡҡа сығарып булмаясаҡ. Күп милләтле илебеҙҙә милли мәктәп мәсьәләләре лә закон менән көйләнгән булһа, уны финанслау, милли-төбәк предметтарын уҡытыу кеүек ҡатмарлы проблемалар еңелерәк хәл ителер ине. Әгәр әлегә ошондай федераль закон нормалары юҡ икән, уларҙы Рәсәй субъекттары үҙҙәре ҡабул итергә тейеш.**

*✓ Ә быныһы - алҡа. Күҙҙең яуын алырлыҡ. Таштары сейә ҙурлығындай түңәрәк, ҡып-ҡыҙыл - рубин, бик затлы таш. Тик йәл... ҡуш түгел, бары һыңар алҡа. Бәлки, ише табылыр, тип, затлы әйберҙе ташларға йәлләне.*



**СӘҒИТ АГИШ исемендәге хикәйәләр конкурсы**



# ҺЫҢАР АЛҠА

## (Хикәйә)

**Әминә ЯХИНА**

Йүнләп йоҡлай алманы был төндә Мәрғиә. Кисә кистән ире дуҫына запас тәгәрмәс алырға тип киткәйне. Һыуға батты. Ҡапҡа шығырҙаған һайын, ағас ботаҡтары тәҙрәгә һуғылған һайын, ире ҡайтҡандыр, тип, әллә нисә тапҡыр тышҡа сығып әйләнде. Етмәһә, өсөнсө көн бер туҡтауһыҙ бысҡылдап яуған ямғыры ла күңелгә шом өҫтәгәндән өҫтәне. Унық өҫтәүенә, ҡустыһынан кисә алған телеграмма ла тынғылыҡ бирмәне. "Әсәй ауырый. Тиҙ генә килеп етегеҙ", - тиелгәйне унда. Тиҙ генә йыйынып, автобусҡа сыҡмаҡсы булғайны, ире: "Машина менән барырбыҙ. Ҡәйнәмдең хәлен үҙем дә белгем килә", - тигәс, ризалашты.

Ире ҡайтмағас, дуҫтарына, таныштарына шылтыратып ҡараны. Бер кем бер нәмә белмәй. Дауахана номерын йыйҙы. Унда ла юҡ. Әллә милицияға шылтыратырғамы, тип торғанда, телефон шылтыраны. Әхирәте Гөлниса икән. "Кисә Рафиҡтың үрге ос ҡыпсаҡ Мөрит менән һөйләшеп торғанын күргәндәр, бәлки, ундалыр?" - тине.

Тиҙ генә шәлен яурынына һалды ла Мәрғиә, Мөриттәрҙең йортона табан атланы. Хужабикәһе иҫән саҡта әллә ҡайҙан ялтырап ултырған йорттоң тыштан һыланған балсыҡтары ҡойолоп, тәҙрә буяуҙары уңып, етемһерәп ҡалған, ҡапҡалары ла бер яҡҡа ҡыйшайған. Элек гөл-баҡсаға күмелеп ултырған урамды ҡый үләндәре баҫып алған. Өй ишеген асҡас, өнһөҙ ҡалды Мәрғиә. Элекке әхирәте Фазлияның матур донъяһынан бер нәмә ҡалмаған: тәҙрәләрҙә бысрап бөткән тюль киҫәктәре, бото ҡыйшайған өҫтәл һәм ундабында тәгәрәшеп ятҡан буш шешәләр. Тышы керләнеп бөткән диванға Мөрит тәгәрәгән, ә ишек төбөндәге карауатта уның Рафиғы мышнай.

Мәрғиә бер һүҙ өндәшмәйенсә, ишекте шартлатып япты ла, кире өйөнә табан атланы. "Кәкрене ҡәбер төҙәтер", - тип бушҡа әйтмәгәндәрҙер. Әле бит "Абдуллаға" барып ҡайтҡанына ни бары алты ай, ә унан алда эсеп, саҡ үлмәй ҡалғайны, аңламағас, аңламай", - тип үртәнә-үртәнә ҡайтты ул. Тиҙ генә әйберҙәрен йыйҙы ла, күршеһенә берәй аҙнаға әсәһе янына киткәнлеген аңғартып, автобус туҡталышына атланы. "Ярай әле, һыйыр малын бөтөргән, - тип эстән генә ҡыуанды. - Тауыҡтарға бер ни булмаҫ, күршеһе Хәтирә ем һибеп, һыу һалып торор әле".

Бәхетенә күрә, автобус та оҙаҡ көттөрмәне, елдереп, ҡалаға ла барып етте. Поезд ҡуҙғалырға ни бары 10 минут ҡалғайны, өлгөрҙө.

Купела унан башҡа бер кем дә юҡ. Яңғыҙ булыуынан файҙаланып, ҡабалан ғына тултырылған сумкаһын бушатып, әйберҙәрен рәтләп һалырға булды. Әсәһенә, туғандарына алған бүләктәрен теүәлләп ҡуйҙы. Кәрәк булыр әле, тип әллә нисә йыл тотонолмай, серванттың төпкө кәштәһендә ятҡан шкатулканы ла һалып алғайны. Уның эсендәге әйберҙәрҙе лә барланы. Бына уның элек яратып таҡҡан, ҡояш нурҙарында әллә нисә төҫтәргә баҙлап янып торған муйынсағы, ул йылдар үтеүгә төҫһөҙләнеп, тоноҡланып ҡалған. Рафиҡ бүләк иткәйне, һинең зәңгәр күҙҙәреңә килешә, тип. Ул ваҡытта улар әле өйләнешмәгәндәр ҙә ине. Бәй, өйләнешкәндәренә инде 35 йыл да үтеп киткән, тоноғор ҙа шул. Хәҙер инде модаһы ла үткән. Ә был алтын сылбырҙы балалары бүләк иткәйне 50 йәшенә. Алтын - алтын инде, ана, йылтылдып тора, бер ҙә генә төҫөн ташламай, өр-яңы һымаҡ. Көмөш беләҙек әҙерәк ҡарайып киткән, йә, ярай, ауылға барғас, ышҡып, ялтыратып алыр әле. Ә быныһы - алҡа. Күҙҙең яуын алырлыҡ. Таштары сейә ҙурлығындай түңәрәк, ҡыпҡыҙыл - рубин, бик затлы таш. Тик йәл... ҡуш түгел, бары һыңар алҡа. Бәлки, ише табылыр, тип, затлы әйберҙе ташларға йәлләне, ошо шкатулкала нисә йыл инде ята ул.

Поездың һалмаҡ ҡына бәүелтеүеме, әллә төнөн насар йоҡлауы сәбәпсе булдымы, башын яҫтыҡҡа терәү менән, ойоп та китте Мәрғиә. Кемдәрҙеңдер көңгөр-көңгөр һөйләшеүенә уянып китте. Күҙен асып, йәнәшәһендәге һикегә ҡараны. Унда ике кеше: берәһе ҡатын-ҡыҙ, икенсеһе ир кеше, бер-береһенә һыйынып ҡына ултыралар, ир кеше ҡатындың ҡулдарын устарына алған.

- Мин ҡурҡам, йәнем, - тине ҡатын.

- Ҡурҡма, ҡәҙерлем, мин һинең янымда, - тип яуапланы ир кеше. "Һөйәркәләрҙер", тигән уй үтте Мәрғиәнең башынан.

- Барыһы ла яҡшы үтһә, ярай ҙа ул, - тип һаман илауланы ҡатын.

- Балалар өсөн ҡайғырма, врачтар менән һөйләшелгән, һинең үҙеңә айырым бүлмә, ә мин ағайымдарҙа урынлашам, - тип йыуатты ир.

Бәй, былар бит ирле-ҡатынлы, ҡайһылай ире аҡыллы, нисек ҡатынының күңелен иретерлек итеп йыуата белә, тип һоҡланып ҡуйҙы Мәрғиә. Ир кеше, сәй алып киләм, тип, купенан сығып киткәс, Мәрғиә лә урынынан ҡуҙғалды. Юлдаш ҡатын төҫкә-башҡа матур ғына, йоҡа кәүҙәле 50 йәштәр самаһында ине. Ул арала ир кеше: "Бына, йылы сәй ҙә килтерҙем", - тип өҫтәлгә ике стакан ултыртты. Ипле генә итеп Мәрғиә менән сәләмләште лә, тағы сығып китте. Баҡһаң, Мәрғиәгә сәй алырға киткән икән.

Өфө дауаханаһында ҡатынына операция эшләргә тейештәр икән, ире лә, отпуск алып, ҡатынының иңенә төшкән ауырлыҡты еңеләйтергә булған. Өфөлә булмауына әллә күпме ғүмер үткән, Өфө ҙурайған, матурайған. Эх, студент саҡтағы кеүек, театр, концерттарға йөрөргә ине, тип күңеле үрһәләнеп алды Мәрғиә.

Автобустан төшкәс, үҙ ауылын үҙе танымай торҙо Мәрғиә. Тыуған ауылына бынан ун биш йыл элек, ҡустыһының туйына килгәйнеләр. Шунан һуң, нисектер, юл төшмәне. Бейек яңы йорттар янында үҙҙәре тыуып-үҫкән йорт тәпәшәкләнеп, ергә һеңеберәк киткәндәй тойолдо. Өй эсендәге әйберҙәр әллә ни үҙгәреш кисермәгән: шул уҡ диван, шул уҡ сервант, хатта өҫтәлдә шул уҡ алмалар төшөрөлгән ашъяулыҡ. Элек шаулап торған өй эсе тып-тын, әйтерһең, бында бер йән эйәһе ҡалмаған. "Әллә һуңланыммы?" - тигән уй мейеһен телеп үтте. Шул саҡ "Кем унда?" - тигән хәлһеҙ генә тауыш ишетелде. Әсәһенең тауышын ишетеүе күңеленә йылы йүгертте, Мәрғиә төпкө өйгә үтте. Карауатта олоғайып, бәләкәсләнеп шиңгән, биттәре шырышланып киткән әсәһе ята ине.

- Был - мин, әсәй! - тип Мәрғиә әсәһен ҡосаҡлап алды. Әсәһенең тоноҡланып ҡалған күҙҙәрендә бер-ике йәш бөртөгө күренде.

- Һине лә күрәһем бар икән, ҡыҙым, - тине ул.

Һикертә баҫып, шаулатып донъя көткән, алты бала тәрбиәләп үҫтергән әсәһенең һуты ағып бөткән ағастай кипкән ҡулдарын үбә-үбә, Мәрғиә ҡысҡырып илап ебәрҙе.

Ул арала күрше йортта йәшәгән ҡустыһы менән килене килеп инде.

- Әсәй шәп кенә йөрөй ине, ҡапыл йығылды, больницаға барыуҙан баш тартты ,- тине улар.

- Миңә хәҙер врачтар ярҙам итә алмаҫ инде, - тип өҫтәне уны йөпләгәндәй әсәһе лә.

Әсәһен аяҡҡа баҫтырыу өсөн бөтә көсөн һалды Мәрғиә. Дарыуҙарын да алды, уколдарын да һалды, төрлө-төрлө үләндән сәйҙәр эсерҙе. Кис һайын әсәһенең баш осона ултырып, белгән доғаларын уҡыны. Белмәйем, доғалармы, әллә үләндәрме ярҙам итте, аҙна үтеүгә, икәүләшеп сөкөрләшә-сөкөрләшә, сәйҙәр эсә башланылар.

Әсәһенең ауырыуы менән бер аҙға онотолоп торған иренең хәлен белергә булып, бер көндө күршеләрҙән өйөнә шылтыратырға барҙы. Телефон трубкаһы, оҙаҡ ҡына оҙон гудоктар биреп, өндәшмәй торғас, теге остан "Алло!" тип ҡысҡырған тауыш ишетелде.

- Рафиҡ, был мин, - тип әйтеүгә, телефондың теге башынан өс ҡатлы һүгенеү тауышы ишетелде. Кеше-фәлән ишетеп ҡуймаһын, тип, тиҙ генә телефон трубкаһын һалды Мәрғиә, ә үҙенең ғәрлегенән биттәре ҡыҙарҙы, маңлайынан тирҙәр бәреп сыҡты. Был хәлдә әсәһенә күренеп, уны борсорға теләмәйенсә, баҡса артындағы йылға буйына атланы. Йылға янындағы яңғыҙ тирәкте ҡосаҡлап, һулҡылдап-һулҡылдап иланы.

...Институт тамамлаған йәш белгесте рус телен һәм әҙәбиәтен уҡытырға көньяҡ райондарының береһенә тәғәйенләнеләр. 5 йыл эшләрмен дә кире тыуған яғыма ҡайтырмын, тип уйлаһа ла, яҙмыш тигән нәмәнән уҙмыш юҡ икән. Ауылда эш башлағас та ваҡытлыса ғына Гөлсафа апайҙарға фатирға урынлашты. Уның берҙән-бер улы Рафиҡ армия сафында хеҙмәт итә ине. Гөлсафа апай менән Мәрғиә әсәле-ҡыҙлы кеүек, бик татыу йәшәнеләр. Гөлсафа апай йор һүҙле, күңелсәк, аш-һыуға ла бик оҫта ине. Тәбиғәте менән йомшаҡ күңелле, ололарға һәр саҡ матур мөғәмәләлә булған ҡыҙ уның күңеленә лә хуш килгәйне. Бәлки, шуғалыр ҙа, улы армия хеҙмәтен тултырып ҡайтһа ла, ул Мәрғиәне үҙ йортонан ебәргеһе килмәне.

- Йортобоҙ иркен, бер үҙеңә бер бүлмә, иркенләп йәшә, - тине. Ике йыл татыу ғына йәшәгәндән һуң, Мәрғиәнең дә Гөлсафа апаһының күңелен ҡыйғыһы килмәне, етмәһә, уҡыу йылы тамамланыуға ни бары ай ярым ваҡыт ҡалғайны.

Һомғол буйлы, ҡап-ҡара бөҙрә сәсле, һорғолт күҙҙәре гел йылмайып, нур сәсеп торған Рафиҡ, ысынында, ҡыҙҙарҙың һушын китерерлек егет ине. Армиянан ҡайтҡас та ул эшкә сығырға ашыҡманы, ә ауыр хеҙмәттән һуң күңеле булғансы ял итергә булды. Көн һайын тиерлек клубҡа тип сығып китер ҙә, таң атҡас ҡына ҡайтып инер булды. Төпсөк улын өф итеп торған әсә лә уны төшкә хәтлем уятманы, донъя мәшәҡәттәренә өлгөрөр, күңеле булғансы ял итһен, тине. Тумалаҡ кәүҙәле, төҫкә-башҡа әллә ни сибәр булмаған Мәрғиәгә Рафиҡ күҙ ҙә һалманы. Рафиҡ ауыл сибәре медсестра булып эшләгән Нурсилә тип йән атты. Нурсилә лә Рафиҡҡа битараф ҡалманы. Уларҙың аҡҡоштай пар булып, клубта бейеүҙәре күптәрҙе һоҡландырһа, ҡайһы берәүҙәрҙә көнләшеү тойғоһо уятты. Ана шуларҙың береһе шофер булып эшләп йөрөүсе Һиҙиәт булды. Ул үҙе күҙ атып йөрөгән Нурсиләне Рафиҡтың ҡосағына һалғыһы килмәйенсә, егеттәр араһында Нурсилә менән төн уҙғарғанын һөйләп, маҡтанып йөрөгән. Был хәбәр Рафиҡтың да ҡолағына салынған. Ышанғыһы килмәгән, тик бер көн Һиҙиәт менән күҙгә-күҙ ҡарап һөйләшкәс, ышанырға мәжбүр булған.

Рафиҡ күп уйлап тормаған, бөтә ишеткәнен Нурсиләгә еткергән. Нурсиләнең кире яуабын ишеткәс, үҙеңдең ҡыҙлығыңды иҫбат ит, тигән. Нурсилә бик ғорур ҡыҙ булғанмы, күп уйлап тормаған, ауылға ялға ҡайтҡан офицерға кейәүгә сыҡҡан да киткән.

Каникулдан һуң ошо хәбәрҙе иптәштәре ярышып-ярышып Мәрғиәгә еткерҙе. Мәрғиә был юлы фатирға Гәләндәм ҡарсыҡҡа урынлашҡайны. Бер көн Гөлсафа апаһы тап килеп, өҙмәй ҙә ҡуймай, үҙҙәренә саҡырҙы.

Сәй эскән арала улының колхозда агроном булып эшләп йөрөүен, ҡыҙының хыянатынан һуң төшөнкөлөккә бирелеүен һөйләне, хатта клубҡа ла сыҡмауына зарланды, һүҙ артынан һүҙ сығып, ошо көндәрҙә Рафиҡтың тыуған көнөн билдәләйәсәкбеҙ,

һине мотлаҡ саҡырабыҙ, килмәйенсә ҡалма, тине.

Тыуған көн күңелле генә үтте. Йырланмаған йыр, бейемәгән бейеү ҡалманы. Барыһын да Мәрғиәнең моңло тауышы әсир итте. Хатта ул йырлаған ваҡытта Рафиҡ та, унан күҙен алмайынса, һоҡланып ҡарап ултырҙы. Ҙур зәңгәр күҙҙәренән ягымлы йылылыҡ, ихласлыҡ, сафлыҡ бөркөлгән ҡыҙҙы нисек быгаса күрмәгән? Хатта уның тумалаҡ ҡәүҙәһе лә, бер аҙ һипкелле түңәрәк йөҙө лә уға һөйкөмлө күренде. Әҙерәк ҡыҙмаса булып алған егет бейегән саҡта Мәрғиәнең биленән һығып ҡосаҡлап: "Бөгөн һине оҙатырға мөмкинме?" - тип һораны. Шул көндән башланды ла инде уларҙың осрашыуҙары. Анттар биреп, һөйәм тип тә әйтмәне, тик бер көн клубтан сыҡҡас, туп-тура үҙҙәренә алып ҡайтты ла: "Әсәй, мин өйләнәм", - тине.

Ҡушҡуллап риза булды әсәһе, оҙаҡҡа һуҙып торманылар, һалҡын декабрь көндәрендә гөрләтеп туй ҙа яһанылар.

Ниндәй бәхетле ине Мәрғиә. Ул бит уға тәү күреүҙән ғашиҡ булғайны. Ә хәҙер ул уның ҡатыны. Бөтә һөйөүен тик уға арнаясаҡ, мәңгелеккә уға тоғро ҡатын буласаҡ. Матур хыялдар менән башланы ул үҙенең ғаилә тормошон. Үҙ-үҙенән ҡәнәғәтлеге холоҡ-фиғелендә генә түгел, йөҙөндә лә сағылды. Эшенә йүгереп барҙы, йүгереп ҡайтты. Телендә бары Рафиҡ булды. Өлкәнерәк апалары уның бигерәк бер ҡатлы булыуынамы, әллә йәшлегенә ишара итепме: "Үтә ҡыҙыл тиҙ уңа", - тип көлөмһөрәне. Рафиҡтан башҡа бер кем элмәне уның күҙенә, етмәһә, ҡәйнәһе лә улар өсөн өҙөлөп торҙо. Ә инде балаға уҙғас, был донъяла үҙен иң бәхетлеләрҙән һананы.

Үҙенең һөйөү көсөнә ышанды Мәрғиә. Бала табыу йортонан Рафиҡ уны колхоз рәйесенең "Волга"һы менән алырға килде. Акушерка менән шәфҡәт туташтарына ҡиммәтле шарап һәм конфиттәр, ә һөйгән ҡатынына алҡалар бүләк итте. Алҡаның да ниндәйен - күҙҙән яуын алырлыҡ ҡып-ҡыҙылын. Ниндәй бәхетле ине улар, әйтерһең, бөтә ғүмер юлы, сабыйҙы төргән аҡ юрған кеүек, тик бәхеттәргә генә төрөлөп үтер кеүек ине...

Ҡыҙҙары Зилә бик илаҡ булды. Төндәр буйы йоҡлай алмай сыҡҡан ваҡыттары булды Мәрғиәнең. Рафиҡтың балаға бик иҫе китмәне. Эш, тигән булып, өйөнә йыш ҡына һуңлап ҡайтыр булды. Ҡыҙҙары аяҡҡа баҫып, тәтелдәп йөрөй башлағас, өйгә тағы ла ҡот ҡунғандай булды. Күп ваҡыттарын бергәләп үткәрҙеләр, Рафиҡ уларға ҡиммәтле бүләктәр алып ҡайтты. Кемдәрҙер уларҙың бәхетле йәшәүен күрә алманы. Бигерәк тә күрше ҡатын Мәрхәбә был яҡтан маһир ине. Ул көндө район үҙәгенә мәктәп өсөн кәрәк-ярак әйберҙәр алырға барырға тура килде. Тик, бәхетһеҙлеккә ҡаршы, ҡайтып килгәндә тәгәрмәсе шартлап, машина боҙолдо. Шофер күрше ауылға барып, камералар алып килгәнсе, көн дә кисләне. Өйөнә килеп ингәндә, төн уртаһы ине. Уны ире асыулы ҡараш менән ҡаршыланы, бер аҙ төшөрөп тә алғайны. "Ҡайҙа йөрөйһөң?" - тип екерҙе. "Машина боҙолдо", - тип аҡланырға булған Мәрғиәнең һүҙҙәренә ҡолаҡ та элмәне. "Һеҙҙе күрше Мәрхәбә апай үҙ күҙҙәре менән күргән, ҡарағайлыҡта",- тип аҡырҙы. "Мәктәп өсөн алған ҡаралтыларҙы ташлап китеп булмай бит инде. Етмәһә, Һиҙиәт, камералар алам, тип ауылға китте", - тигәнде ишеткәс, ире: "Тимәк, Һиҙиәт?" - тип тештәрен ҡыҫты ла эргәһендәге ултырғысты тибеп осорҙо. Ултырғыс уның аяғына килеп бәрелде, ауыртыуына сыҙамай, Мәрғиә сүгәләп төштө лә илап ебәрҙе. " Ах, һин, минең бүләк алҡаларҙы тағып, уйнаш итәһеңме?" - тип, ире уның ҡолағына йәбеште. Эштең ниҙә икәнен аңлауын аңланы ла Мәрғиә, тик көнләшеүҙең сигенә сығып, күҙе-башы тонған ире бер нәмә аңларлыҡ хәлдә түгел ине. Ярай әле, бәхетенә төпкө бүлмәнән ҡәйнәһе йүгереп сыҡты. Этеп-төртөп, Рафиҡты тышҡа сығарып, саҡ тынысландырҙы. Тик күпме генә эҙләһәләр ҙә, алҡаның һыңарын таба алманылар...

Ошо ваҡиғанан һуң Мәрғиәнең күңеле кителде, алҡаһын ғына түгел, ә бәхетле тормош ҡорорға хыялланған өмөтөн дә юғалтты.

Барлыҡ һөйөүен Мәрғиә ҡыҙына бирҙе, бөтөн ваҡытын яратҡан эшенә бағышланы. Ҡыҙын ҡурсаҡ кеүек кейендерҙе, донъяһында ҡот уйнатты. Өйөнән сүп-сар сығарманы, балаһының атайлы булыуын теләне. Тағы ла эргәһендә өҙөлөп торған ҡәйнәһенең күңелен ҡыйғыһы килмәне. Ул иң тәүҙә завуч, унан директор дәрәжәһенә үрләне. Ауыл советы депутаты вазифаларын башҡарҙы. Ә ире, эсеүе арҡаһында, агрономдан тракторист, ә унан һуң мәктәпкә кочегар булып күсте. Ул арала ҡыҙҙары ла буйға етеп, ҡул араһынан ысҡынды. Университетта иҡтисад бүлеген тамамланы ла, алыҫ Себер яҡтарына юлланды. Унда үҙенең ишен табып, ғаилә ҡороп ебәрҙе. Әлеге ваҡытта ейәне беренсе класта уҡып йөрөй.

Ҡәйнәһе вафат булғас ҡына Мәрғиә иренең ниндәй булдыҡһыҙ икәненә иғтибар итте. Күрәһең, бөтә донъя мәшәҡәттәрен ҡәйнәһе үҙ елкәһенә алып, улы менән килененә ыҙғыш өсөн урын ҡалдырмай йәшәгәндәр.

Етмәһә, ире һуңғы ваҡытта төплө эш урыны булмағас, унда-бында "ҡалым" менән шөғөлләнде. Ә буш ваҡыттарын иптәштәре менән араҡы эсеп үткәрҙе. Эсеп алһа, ҡатынын ирҙәрҙән генә түгел, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙан да көнләшә башланы. Көндән-көн аралары һыуыныуында ҡатынын гәйепләне. Ә бит тормошто тиң башлағайнылар, береһе - уҡытыусы, икенсеһе - агроном. Рафиҡ көндән-көн түбән тәгәрәне. Ә бөтә бәләнең осо - эскелек, һәр кем үҙ тормошон үҙе ҡора, тиҙәр. Ынтылышың, тырышлығың булһа, донъяң да, бәхетең дә түңәрәк. Әгәр инде һыу ыңғайына аҡһаң - үҙең гәйепле.

Күҙ йәштәрен һөртөргә, тип ҡулъяулыҡ эҙләп, ҡулын кеҫәһенә тыҡһа, бармаҡтары ниндәйҙер ҡаты әйбергә тейҙе. Бәй, был бит баяғы һыңар алҡа! Тегеләр көндә килененә күрһәтеп ултырғайны, бәлки, ҡалаға барып, ошо алҡанан әллә кулон, әллә балдаҡ эшләтеп булмаҫмы тип. Килене көләмһөрәп: "Ҡуй әле, апай, юҡ менән булма, лутсы өр-яңы алҡалар алып таҡ, алҡа алырлыҡ ҡына хәлең барҙыр әле", - тигәйне.

Ысынлап та, әйберҙе улай итәм, былай итәм, тип, төрлө рәүешкә индереп ҡараһаң да, ул барыбер үҙ төҫөн юғалтасаҡ бит.

Хәҙер инде Мәрғиә үҙенә асыулана башланы, нимә тип ошо һыңар алҡаны һаҡланы икән? Бер һыңары юғалғас, ул бит барыбер ишһеҙ... Бәй, ул һыңар алҡа мин үҙем түгелме һуң? Һөймәгәнгә һөйкәлеп, ҡатын бәхете күрмәйенсә, ирле көйө яңғыҙлыҡта ғүмере заяға үтте түгелме? Ә кем ғәйепле? Үҙем түгелме? Йән асыуынан ҡулындағы һыңар алҡаны һыуға ырғытты Мәрғиә.

Бер аҙ ултырғас, үҙенең тынысланғанын тойҙо. Көндөң дә матур, ялтлап торған ҡояшлы икәненә иғтибар бирҙе. Шәп-шәп аҙымдар менән өйгә табан атланы. Өйгә ингәс, үҙен көтөп ултырған әсәһен ҡосаҡлап үпте, әсәһенә үҙенең бик-бик кәрәклеген аңланы. Әсәһе бит хәҙер бәләкәй бала хәлендә. Нисек кенә булмаһын, Мәрғиә әсәһен һуңғы көндәренә тиклем яңғыҙ ҡалдырмаясаҡ.

Ә ире... Бер-береһенә кәрәклеген аңлаһа, бәлки... Ә аңламаһа, юлдар айырылыр. Ғүмер тигән нәмә бик ҡыҫҡа, уның да бит бәхеткә хоҡуғы бар.

*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

# ХӘҠИҠӘТ ТАУЫШЫ -

## Ғәзим Шафиҡов тауышы...

**Ғәзим ағайҙың зиһенде ярып инер сағыу тауышы ҡолаҡ төбөндә, күңел сөңгөләндә яңғырап тик тора. Уны башҡа өн-ауаздар менән һис тә бутарлыҡ түгел. Дәһшәтле тарихыбыҙ, ҡаһарман шәхестәребеҙ хаҡында әйтелгән хәҡиҡәт һүҙе улар. Үҙ ваҡытында, мәлендә әйтелгән хәҡиҡәт. "Ни мәғәнә дөрөҫ һүҙ әйтеүҙән, дөрөҫ һүҙең инде һуңлаһа?" тигән халыҡ шағиры Рәми Ғарипов. Хәҡиҡәттең үҙе, халҡыбыҙ йәшәгәндә, Ғәзим ағайҙың тауышы ла онотолмаясаҡ, хәҡиҡәт һүҙе һәм намыҫ шаңдауы булып яңғырап торасаҡ. Үҙе лә йәшәйәсәк.**



Хәҡиҡәт рәсми сиктәргә һыймай, уларҙы тоймай, сөнки рәсмилек һәр ваҡыт ниндәйҙер сәйәсәткә буйһондорола һәм ул сәйәсәттән башҡа йәшәй алмай. Шул уҡ ваҡытта ярым-яртылаш та, икенсе тышлыҡ ябынған эслек рәүешендә лә була алмай хәҡиҡәт. Хәҡиҡәттең ҡанундары ҡаты, аяуһыҙ, унан саҡ ҡына ситкә тайпылдыңмы, тиҙ генә ялғансыға әүереләһең. Миненсә, боронғо батшалар, хандар һәм бейҙәр үҙҙәрен ошондай ялғанлыҡтан һаҡлар өсөн дә һәр саҡ яндарында сәсәндәрҙе, йырауҙарҙы тотҡандарҙыр. Үҙҙәре лә ялғанға бирелеп, онотолоп, илен, халҡын ялған юлдан алып китмәҫ өсөн...

Ғәзим ағай һәр саҡ хәҡиҡәткә тоғро ҡалды. Үҙ иманына тоғро булған кеүек. Ҡайһы берәүҙәр кеүек, дөйөм һүҙҙәр һөйләп, "ел тирмәндәре" менән көрәшмәне, аныҡ эштәр башҡарҙы. Бигерәк тә үткән быуаттың 80-90-сы йылдарында халҡыбыҙҙың күҙе хәҡиҡәткә ҡарай асылған осорҙа титаник хеҙмәт башҡарҙы. Хаҡ һүҙҙе әйтеү - бер нәмә, уға тоғро булырға ла, хәҡиҡәттең үҙен һаҡларға ла кәрәк бит әле. Бигерәк тә халҡыбыҙ тарихына, уның шәхестәренә ҡарай бысраҡ ырғытыуҙар, яла ягыуҙар башланғас, ул тәүгеләрҙән булып алышҡа сыҡты. Әлбиттә, Ғәзим Шафиҡов күп һандағы шиғыр, проза, драма әҫәрҙәре яҙып ҡалдырҙы, "Башҡорт халыҡ ижады" күп томлығының байтаҡ өлөшөн рус теленә тәржемә итте, әммә уның халҡыбыҙ өсөн күрһәткән барлыҡ хеҙмәттәренең иң ҙурыһы, шәхесен билдәләгән төп һыҙаты, миненсә, барыбер ҙә халҡыбыҙ тарихына, уның шәхестәренә бәйле хәҡиҡәт өсөн көрәшендәлер.

Тураһын әйтә торғайны Ғәзим ағай. Әлбиттә, тураһын әйткәндәр дуҫына ғына түгел, туғанына ла ярамайҙыр. Ундайҙарҙы ярата һалып та бармайҙар. Шуғалыр ҙа, уның дуҫтары ла күп булманы. Хәҡиҡәт янына яҡынлар өсөн шул хәҡиҡәткә тоғро булырға ла кәрәк бит әле. Ғүмеренең сағыштырмаса ҡыҫҡа булыуы ла шул хәҡиҡәткә тоғро булыуына бәйлелер, тим. Уның бәләкәй генә ғәҙелһеҙлеккә лә оло яуға күтәрелгәндәй ҡупҡалйыуы ғәҙеллеккә тоғрологонан киләлер ул.

Ғәзим ағай үҙенә генә хас нескәлекте тойған илаһи зат, миһырбанлы интеллигент ине. Вафатына ике йыл ҡалғас, мин уны үҙемдең тыуған яғыма алып ҡайттым. Атай йортомда ҡунаҡ булып йөрөгәндә уның ана шул сифатын астым. Беҙ бит инде Ғәзим ағайҙы ялҡынлы телмәр оҫтаһы, үҙ фекерен әйтеүҙән һис тә ҡурҡып тормаған әүҙем позициялағы шәхес, оптимист, көрәшсе итеп беләбеҙ. Ә бына беҙҙең йортҡа аяҡ баҫҡас, ул баҙнатһыҙ, ҡыйыуһыҙ ғына нескә бер затҡа әүерелде лә ҡуйҙы. Мин уны тәүҙә был асылында танымайыраҡ торҙом. Туғандарым алдында үҙен шул тиклем уңайһыҙ тотто, икәүҙән-икәү ҡалғанда, шундуҡ: "Мин шул урында, шул ерҙә яңылышманыммы, артыҡ һүҙ әйтмәнемме?" - тип үҙенең һәр ҡылығына, һүҙенә минең баһамды белеште. Бер яҡтан ҡарағанда, уның был хәләте сәйерерәк тойолһа ла, бында Ғәзим ағайҙың тик беҙҙең халыҡҡа ғына хас сифаты сағыла ине. Йәғни, үҙеңдең ҡылығың, әйткән һүҙең менән башҡаларҙы уңайһыҙ хәлгә ҡалдырмаҫҡа ынтылыу. Был - классик интеллигентлыҡтың французса эстетизмы ла, рустарҙың фамильярлығы ла түгел, беҙҙең халыҡтың тәрбиәһенән яралған миһырбанлыҡ. Ғәзим ағайҙы яҡындан белеүселәр уның был сифатына иғтибар итмәй ҡалмағандыр. Ул һәр саҡ әйткән һүҙендә, юлына таш яуһа ла, тора белә ине.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

**(Теманың дауамы 16-сы биттә).**

*ИНТЕРНЕТТАН*

# КОМПЬЮТЕРҘАР КҮБӘЙӘ...

## йәрәхәт алыуҙар ҙа

■ Америка ғалимдары фекеренсә, 18-30 йәштә кеше аҙ хәрәкәт итһә, уның 40-50 йәштә икенсе типтағы шәкәр диабеты менән сирләү хәүефе өс тапҡырға арта. Ғалимдар әйтеүенсә, был тикшеренеүҙәр 1984 йылда уҡ башланған, егерме йыл эсендә унда 6 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан, шуға ла уның һөҙөмтәһе менән шикләнеү урынһыҙ. Йәштәргә күберәк хәрәкәтләнергә, йәйәү йөрөргә һәм спорт менән шөғөлләнергә кәңәш итә улар.

■ АҠШ-ның Пенсильвания штаты университеты ғалимдары төнөн телевизор ҡарау йоҡоһоҙлоҡҡа килтереүен асыҡлаған. Тикшеренеүҙә 21 мең кеше ҡатнашҡан. Әгәр ҙә кеше телевизор ҡарап йоҡлап китә икән, уның йоҡо режимы оҙайлы ваҡытҡа боҙола, унда хатта йоҡоһоҙлоҡ барлыҡҡа килеүе ихтимал. Ғалимдар телевизорҙы йоҡлар алдынан ярты сәғәт алда һүндерергә кәңәш итә.

■ Сәстәр ҡартайыуҙан ғына түгел, ә көслө стресс кисереү һөҙөмтәһендә лә ағара, тип белдерә япон ғалимдары. Көслө эмоциональ кисерештәрҙән һуң, сәстәрҙең пигмент күҙәнәктәрен эшләп сығарыу өсөн яуап биреүсе гендарҙың тотош теҙмәһе зарар күрә һәм сәстәр саллана.

■ Донъяла компьютер травматизмы арта, тип саң ҡаға Америка ғалимдары. Профилактик медицина журналында 1994 йылдан 2006 йылға тиклем баҫылған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, оргтехника ярҙамында алынған йәрәхәттәр 7 тапҡырға артҡан. Был ваҡыт эсендә компьютерҙар һаны ла 3 тапҡырға күбәйгән. Йәрәхәттәрҙең күп өлөшө монитор ҡолауы арҡаһында алынған, артабан исемлектә клавиатурала эшләү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән неврологик "туннель синдромы", күреү һәләтенең насарайыуы, токтан һуғылыу һ.б. тора.

■ Вирджиния Университеты ғалимдары тарафынан үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, 22 йәштә уҡылған мәғлүмәт яҡшыраҡ хәтерҙә ҡала. Мейе әүҙемлегенең 27 йәштә бер аҙ түбәнәйеүе күҙәтелә. 40 йәшкә тиклем кешеләр үҙ һөнәренә ҡағылышлы мәғлүмәтте, дөйөм эрудиция өлкәһенә ҡағылышлы белемде тәжрибәлә ҡатнашыусы 60 йәшкә тиклемгә тәркөм яҡшыраҡ үҙләштерә.

■ Музыканың етлекмәй тыуған балаларға үҫешергә ярҙам итеүен асыҡлаған Канада ғалимдары. Әгәр ҙә бындай сабыйҙарға көнөтөнө классик музыка, бигерәк тә Моцартты тыңлатһаң, улар үҙҙәрен тынысыраҡ тота, ауыртыуҙы еңелерәк кисерә, ауырлыҡтары тиҙерәк арта. Профессор Эндрю Шеннан фекеренсә, был тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәһе классик музыканың дауалау һәләтенә эйә булыуын тағы ла бер тапҡыр иҫбатлай.

■ Кешенең тәбиғәте менән оптимист булыуын АҠШ-ның Канзас штаты университеты асыҡлаған. Был тикшеренеүҙә донъяның 140 илендә йәшәүсе халыҡ ҡатнаша. Яуап биреүселәрҙең 95 проценты тик ыңғай ваҡиғалар көтөп йәшәй һәм был, ғалимдар фекеренсә, "универсаль оптимизм теорияһы"н тағы ла бер раҫлай. Был теория буйынса, һәр кеше алдағы көндәргә ышаныс менән ҡарай.

■ Балыҡ һәм сәтләүек күҙҙең күреү һәләтен яҡшырта, тигән һығымтаға килгән Австралияның Сидней университеты ғалимдары. Тикшеренеүҙә ҡатнашыусы 2454 кеше 10 йыл дауамында көнөнә 1-2 өлөш сәтләүек, икенсе тәркөм ошо уҡ ваҡыт эсендә берешәр өлөш балыҡ ашай. Оҙайлы ваҡыт сәтләүек һәм балыҡ ҡулланыу һуҡырайыуға килтереүсе сәбәптәрҙе 30-35 процентҡа түбәнәйтеүе асыҡланған.

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*

**Миллион йылдар ҡырағай тәбиғәт шарттарында йәшәү сәбәпле, кешенең ғүмере күреү, ишетеү, тойоу, һиҙеү кеүек сигнал системаһы менән бәйле булған. Һәр аҙымда һағалап торған хәүефте көтөп йәшәү тойғоһо уның фекерләүен, иғтибарын, хәтерен үҙенсә ҡорған. Шул рәүешле тәбиғи һайлау процесы барышында кешеләрҙә образлы хәтер үҫешкән. Хәҙер бындай хәтер төрө бары мәктәпкәсә йәштәге балаларҙа ғына һаҡланып ҡалған.**




# ҺҮҘ МЕНӘН ӘЙТЕЛГӘНЕ - ЯЛҒАН,

## фекерҙе һындар аша хәтерҙә ҡалдыр

Образлы хәтер хайуандарҙа ла бар, тиерһегеҙ һеҙ. Эйе, кеше икенсе төрлө - абстракт, телмәр хәтере үҫешә башлагас ҡына кешегә әйләнә башлаған. Тик ошо урында, ирекһеҙҙән, боронғоларҙың "Һүҙ менән әйтелгән фекер - ялған" тигәне иҫкә төшә. Ҡайһы бер саҡта бөтә нәмәне лә яҡшы аңлайһың, әммә уны һүҙ менән әйтеп бирә алмағаның бармы? Ҡалаҡты күҙ алдына килтереүе рәхәт тә ул, ә бына һин уны һүҙ менән аңлатып ҡара. Һәр кем әйберҙе тулы итеп һүрәтләп бирә алмай, ә күҙ алдына килтергәндә һин был ҡалаҡты әллә ниндәй матур семәрле биҙәктәр менән биҙәй алаһың.

Телмәр хәтере менән кеше тылсымлы түңәрәккә эләгә: хәтерҙе яҡшыртыу өсөн ул һәр ваҡыт уҡырға, ә уҡыу өсөн хәтере яҡшы булырға тейеш. Был ауырлыҡтың мейенең 3 процентына ғына төшөүен иҫәпкә алғанда, кеше 25 йәшкә еткәндә телмәр хәтере ҡабул ителгән мәғлүмәт менән тулып бөтә һәм яңылыҡтарҙы ҡабул итеү ауырлаша башлай. Кеше белем алыуҙан туҡтаһа, мейелә булған мәғлүмәт тә юҡҡа сыға. Образлы хәтер механизмы бөтөнләй икенсе. Тәүҙә кеше ваҡиғаны, һандарҙы, хәрефтәрҙе, һүҙҙәрҙе вайымһыҙ ҡабул итә. Телмәр хәтере ул - схема. Образдар ошо схемаға китап биттәре кеүек урынлаша һәм кәрәк саҡта уйҙа барлыҡҡа килә. Тимәк, телмәр хәтере был образдар менән үҙе телһәгәнсә (имтихан тапшыра, схемаға төҙәтмәләр индерә, етешмәгән деталдәрҙе тулыландыра) ҡулана ала. Иҫтә ҡалған образдар күҙ алдында торасаҡ, ә уларҙы теләһә ниндәй телгә, формулаға, символға әйләндереү - телмәр хәтеренең эше.

Бер кемгә лә сер түгел, көнкүреш темаһына сәғәттәр буйы һөйләшергә була. Һәр фәнни әңгәмәне 15 минуттан артыҡ тыңлағы килмәй, шуға ла улар өсөн махсус семинарҙар, симпозиумдар, съездар ойошторола. Билдәле бер һүҙҙәр һәм төшөнсәләр билдәле бер һөнәри эшмәкәрлек өлкәһе тирәһенә берләшә. Бала нимәнеләр үҙләштерһен өсөн уның мәктәптә юҡҡа сыҡҡан донъяны бер бөтөн, сағыу, образлы итеп ҡабул итеү һәләтен кире тергеҙергә кәрәк. Бына ошо һәләтте беҙ ситтәрҙең тәжрибәһенә таянып яҙылған белемгә алыштырып, шәхесте баҫабыҙ, уның мейеһен кәрәкмәгән сүп менән тултырабыҙ. Һәләттәр асылмаған көйө баҫылып ҡала. Тик әгәр ҙә баланың ниндәй ҙә булһа шөғөлгә ҡыҙыҡһыныуы уянһа, уның балаларса ҡабул итә алыу һәләте лә кире ҡайта. Был нимә менән бәйле һуң? Кешенең мейеһе ике ярымшарҙан тора. Уңы - образлы ярымшар, һулы - телмәр. Уңы - хис-тойғолар, һулы - аң. Мейе бар нәмәне лә нисек бар, шулай ҡабул итә, шунан һуң ул уң ярымшарҙа образ - модель тыуҙыра, ә һулында уға яраҡлы һүҙҙәр таба. Ошолай ҡабул ителгән мәғлүмәт бер ҡасан да юҡҡа сыҡмай. Ул гениаль шиғырҙар, китаптар, картиналар тыуҙыра, асыштар яһай. Был уның өсөн тәбиғи иҫәпләнә. Әммә бөгөн цивилизация мейегә лә үтеп инә. Ҡабул ителгән мәғлүмәттең 90 проценты өҙөк-өҙөк булып диктор тауышы, китап тексы, телевизорҙа күренеп ҡалған һүрәт һ.б. аша инә. Мейенең бер ярымшарында ул эҙен ҡалдыра, тик икенсе ярымшарҙа ниндәйҙер формаһыҙ тап ҡына ҡала. Шуға ла кешенең хәтере насарая, иғтибары кәмей, онота башлай. Мәғлүмәтте өҙөк-өҙөк итеп ҡабул итеү арҡаһында бала саҡтағы донъяны ҡабул итеү үҙенсәлеге лә юғала.

Нисек образлы хәтерләргә өйрәнергә һуң? Бының өсөн бары бер уҡ ваҡытта ике ярымшарҙы ла эшләтергә һәм донъяны бөтә тойоу ағзалары менән ҡабул итергә өйрәнергә кәрәк.

### Хәтерҙе күнектереү

1-се тест. Берәйһенән 20 һүҙҙе 10-15 минут пауза яһап, ҡысҡырып уҡыуын һорағыҙ. Мәҫәлән, өй, сынаяҡ, ямғыр, өҫтәл, пароход, ручка, телевизор, ер, саңғы, ағас, балкон һ.б. Һүҙҙәрҙе ошо уҡ рәүешле ҡабатлағыҙ, әгәр ҙә һүҙ төшөп ҡалһа - 1 хата, урынында тормаһа - 0,5 хата.

2-се тест. 1-се тестағы кеүек, тик һүҙҙәр урынына һандар алығыҙ.

3-сө тест. Күҙегеҙҙе йомоғоҙ һәм ниндәй ҙә булһа сәскәне, мәҫәлән, раузаны күҙ алдына килтерегеҙ. Баһаны түбәндәге шкала буйынса ҡуйырға: күрмәйем - 0. Сәскәнең һыҙаттары насар күренә - 1. Сәскә аҡ һәм ҡара төҫтә, әммә насар күренә - 2. Сәскә аҡлы-ҡаралы, яҡшы күренә - 3. Сәскә төҫлө, яҡшы күренә - 4. Төҫлө сәскәне асыҡ күҙҙәрегеҙ менән күрәһегеҙ - 5. Уның төҫөн, формаһын һ.б. үҙгәртә алаһығыҙ - 6.

### Хәтерҙе нығытыу өсөн бер нисә ябай кәңәш:

● Деталдәргә иғтибар итегеҙ. Көн һайын беҙ күп мәғлүмәт ишетһәк тә, уларҙың үҙебеҙгә кәрәклеләрен генә хәтерҙә ҡалдырырға ғәҙәтләнгәнбеҙ. Үҙегеҙҙе ҡыҙыҡһындырған өлкәләр даирәһен киңәйтегеҙ, шул саҡта мейелә күберәк мәғлүмәт туплана башлаясаҡ. Минең өсөн бөтәһе лә мөһим, тип уйлау ҙа яҡшы. Йәиһә бер көн булһа ла енәйәт эштәрен тикшереүсе тәфтишсе йәки йәшерен агент булып уйнап алығыҙ: һеҙҙең тирәлә барған һәр ваҡиға һәм әйтелгән һәр һүҙ милли хәүефһеҙлек өсөн мөһим мәғлүмәт булып торһон.

● Әүҙемерәк булығыҙ. Кемделер тыңлайһығыҙы, нимәләр уйлайһығыҙмы йәки уҡыйһығыҙмы, быныһы мөһим түгел. Әгәр кеше үҙен пассив тота икән, уның мейеһе лә "йоҡлай" һәм мәғлүмәтте ҡабул итмәй.

● Оҡшашлыҡтар эҙләгеҙ. Мәктәптә килештәрҙе ятлағанда йәки йәйғорҙоң төҫтәрен хәтерҙә ҡалдырыу өсөн нимә эшләй торғайныҡ әле, хәтерегеҙгә төштөмө?

● Мәғлүмәтте бер нисә тапҡыр ҡабатлау яҡшы һөҙөмтә бирә. Һәр ваҡыт кемделер осратҡан сағыҙҙа эстән генә уның исемен әйтегеҙ. Кемдер телефон номерын бирә икән, уны яҙып алығыҙ һәм шунда уҡ ҡысҡырып ҡабатлағыҙ. Нимәнеләр хәтерҙә ҡалдырыу өсөн мәғлүмәтте бер тапҡыр ғына булһа ла ҡағыҙға яҙып ҡарағыҙ.

● Кешенең исемен бер нисек тә хәтерҙә ҡалдыра алмаһағыҙ, был кешене берәй нәмәгә оҡшатып йәки холҡонон берәй һыҙатына бәйле һүҙ менән иҫләргә тырышығыҙ.

● Күңелгә оҡшаған мәғлүмәт йәки ваҡиға хәтерҙә нығыраҡ ҡала икәнен яҡшы беләбеҙ. Әгәр ҙә математиканы яратмайһығыҙ икән, ҡатмарлы ҡағиҙәләрҙе ятлап та хәтерҙә ҡалдырып булмаясаҡ. Ә яҡын кешегеҙҙен, үҙегеҙгә оҡшаған кафеның йәки театрҙың номерын тиҙ ятлап алырға мөмкин. Был осраҡта нимә эшләргә һуң? Ишеткән һәр мәғлүмәттән ҡәнәғәтләнеү алырға өйрәнегеҙ, уның ҡыҙыҡлы яғын күрә белегеҙ.

● Ҡабаланмағыҙ. Ҡайһы бер нәмәне тиҙ генә хәтергә төшөрә алмаһағыҙ ҙа, оҙаҡ итеп уйланып йөрөгәндән һуң, кәрәкле мәғлүмәт иҫкә төшәсәк.

● Бер кем дә бөтә нәмәне лә хәтерендә ҡалдыра алмай. Кәрәкмәгән мәғлүмәтте һаҡламағыҙ, унда ысынлап та мөһим булған нәмәләргә урын ҡалһын.

● Төрлө башватҡыстар сисегеҙ, көн һайын яңы берәй һүҙ ятлағыҙ, даими китап уҡығыҙ - шул саҡта ғына хәтерегеҙгә зарланмаясаҡһығыҙ.

● Мейе физик торош менән тығыҙ бәйләнгән. Физик күнекмәләр яһағыҙ, ҡан баҫымын яйға һалығыҙ. Дөрөҫ туҡланығыҙ, организм аҙыҡ менән кәрәкле матдәләр һәм витаминдарҙы көн һайын алырға тейеш. Алкоголь, наркотик хәтерҙе насарайта - был турала ла онотмағыҙ. Лецитин, фосфатидилсерин хәтерҙе нығытырға ярҙам итә.

● Ғалимдар фекеренсә, шоколад һәм сәйҙе даими ҡулланғанда хәтер күпкә яҡшыра.

✓ *Тимәк, эскән кеше Аллаһы Тәғәлә һыҙған юлдан түгел, Иблистекенән үтә һәм уның ғүмере хата булып сыға. Кем эсә, ул дөрөҫ йәшәмәй. Күпме икән Ер йөҙөндә үҙ ғүмере, үҙ яҙмышы менән йәшәмәүселәр?*



ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 15-се һабаҡ: "Һаумы, яңы тормош!"

Бер кеше аҡһаҡалдан көләргә уйлаған. Бының өсөн ул шундай уй-мәкер ауы ҡорған. Усына тере күбәләкте ҡамап тотоп, аҡһаҡалдан унда нимә булыуын, уның тереме-юҡмы икәнлеген һорашырға иткән. Әгәр ҙә аҡһаҡал "тере" тип әйтһә, күбәләкте ҡыҫып үлтерергә, әгәр инде "үле" тигән һүҙ ысҡындырһа, усын асып, күбәләкте осороп ебәреп, унан көләргә ниәтләнгән. Ярай, хуш, ниәтен бойомға ашырырға итеп, ул аҡһаҡал янына килгән.

- Минең усымда нимә? - тип һораған ул ил ағаһынан.

- Күбәләк, - тип яуаплаған аҡһаҡал.

- Тере күбәләкме, әллә үлеме? - тип төп дәлилен килтергән теге бәндә.

- Уның яҙмышы һинең ҡулыңда, үлтерһәң дә, осороп ебәрһәң дә - барыһы ла һинең ҡөҙрәтеңдә, - тип яуап биргән аҡһаҡал.

Шулай итеп, тегенең аҡһаҡалдан көләргә тигән уй-ниәте тормошҡа ашмаған. Уның ҡарауы, ошо һөйләнгән һүҙҙә йәшәүҙең төп мәғәнәһе ята: беҙ нисек теләйбеҙ, шулай йәшәйбеҙ, теләһәк, тормошобоҙҙо балҡытып, ғүмер юлыбыҙҙы йәшнәп үткәрә алабыҙ, теләмәһәк, йәғни ағым ыңғайына китһәк, тормош-йылға тулҡыны беҙҙе яҡын арала ярға бырпаҡтырып китәсәк. Нисек кенә булмаһын, барыһы ла, бәхетебеҙ менән бәхетһеҙлегебеҙ ҙә, үҙебеҙҙең ҡулда...

Күптәр ниндәйҙер уңышһыҙлыҡҡа осраһа, "яҙмыш" тигән һылтанманы ҡуллана. Йәнәһе, "яҙмышым шулай булғас, ҡалайтайым, яҙмыштан уҙмыш юҡ...". Кем белә, бәлки, ысынлап та, яҙмыш маңлайға яҙылалыр ҙа, әммә Аллаһы Тәғәлә шуға "Сәбәп ҡыл!" тигәнде лә өҫтәп әйткән бит әле. Ярай, үҙ бәндәһен һынар өсөн ул ауырлыҡтарын да, еңеллектәрен дә берҙәй үк ебәрҙе, ти. Әммә улар тотош яҙмышты билдәләмәй, һәр ауырлыҡ артынан еңеллек, һәр ҡайғы артынан шатлыҡ та килеүсән. Шул уҡ ваҡытта бер яҙмыш тик бәхеткә генә, йәки бәхетһеҙлеккә генә ҡоролмай.

Туҡтауһыҙ эскән һәм унан ҡотола алмаған кеше, мәҫәлән, был әмәлен яҙмышына япһара алмай, сөнки Аллаһы Тәғәлә Иблистең күңел аҙҙырғыс был сараһын бөтөнләй инҡар итә, уға ҡаршы мәңге көрәшә. Тимәк, эскеселек кеше тәбиғәтенә һәм яҙмышына бөтөнләй ят күренеш. Кемдер берәү эсеүенән ҡотола алмай, эскесе булып ғүмер һөрә икән, уның ысын, Аллаһы Тәғәлә һыҙған ғүмере бөтөнләй икенсе яҙмыш буйлап, эргәһенән генә үтә. Уйлаһаң, уйылып китерлек, сәстәр үрә торорлоҡ хәл бит был. Тимәк, эскән кеше Аллаһы Тәғәлә һыҙған юлдан түгел, Иблистекенән үтә һәм уның ғүмере хата булып сыға. Кем эсә, ул дөрөҫ йәшәмәй, тигәнде аңлата был билдәләмә. Күпме икән Ер йөҙөндә үҙ ғүмере, үҙ яҙмышы менән йәшәмәүселәр?

Мин эсеүемдән ҡотолғас ҡына үҙемдең донъялыҡтағы бик күп ҡиммәттәремде, бер ҡасан да ҡайтарып булмаҫ бәхетле мәлдәремде юғалтыуымды аңланым. Иң-иң ныҡ үкендергәне - тик йәшлектә була торған аҫыл тойғоло миҙгелдәремдең бахмур һөрөмө менән ҡапланыуы. Ул таңдар минән, йәшлегем кеүек үк, мәңгелеккә алыҫлашҡан, үкереп, ер тырнап илаһам да, кире ҡайтмаясаҡ. Күңелдә бер тапҡыр балҡыған һөйөү, мөхәббәт хисен кире тергеҙеп булмаған кеүек, ул тойғоларым менән мәңгелеккә бәхилләшкәнмен. Мөхәббәт тойғоһо минең күңелемдә таңғы нурҙарға сорналған йыр һымаҡ ҡына ине. Араҡы шауҡымы, тәмәке төтөнө зиһенемде бутаны, тын юлымды быуҙы, тауышымды ҡарлыҡтырҙы, ул йырымды йырлай ҙа алманым, шатлыҡ тойғоларым кисерелмәйенсә ҡалды.

Эсеүемде ташлағандан һуң бер йыл самаһы ваҡыт үткәс, тәүге мөхәббәтемә кире ҡайтырға ҡарар ҡылдым. Әммә, нисек кенә тырышһам да, был әмәлем бары тик йәшлегемде иҫкә төшөрөү, хыялымды ысынбарлыҡҡа әйләндерергә тырышыу өсөн өтәләнеү, тыпырсыныу ғына булып килеп сыҡты. Ни өсөн мин ул саҡҡа кире ҡайта алманым һуң? Сөнки шул йылдар менән бергә тик ул саҡтағы ғына булған ихласлығым да юҡҡа сыҡҡайны, үлгәйне шул. Ни эшләргә лә белмәйенсә, бары тик тыумыш асылыма ҡайтып, йәки уйҙарым менән сабый саҡтарыма барып, бүлмәгә бикләнеп, түгелеп-түгелеп иларға ғына ҡалды...

Ҡасандыр Аллаһы Тәғәлә минең өсөн генә тип һыҙған бәхет юлынан китеү мөмкинлеген шулай юғалтҡанмын икән. Хәҙер инде шул юлдан барырға тырышыуым ҡыланыу һымаҡ ҡына килеп сығасаҡ. Шулай булды ла. Ни эшләргә? Тик үткәндәргә илтер хәтирәләр менән генә йәшәргәме? Минең йәшәр әмәлем, юлым барҙыр бит? Кемдеңдер әҙер һуҡмағына төшөргәме? Юҡ, тапалған һуҡмаҡтан барыу шул тиклем күңелһеҙ һәм мин унан атлау ғына түгел, кешене, хатта үҙ-үҙемде лә ҡабатлап йәшәй белмәйем. Икенсе төрлө әйткәндә, саф шишмә һыуҙарын ғына эсергә яратам.

Айныҡ йәшәүемдең тәүге өс йылында яҙмыш арбаһынан төшөп ҡалған сабый кеүек хис иттем үҙемде. Әйтергә кәрәк, артабанғы тормошомдо нәҡ ошо йылдарым билдәләне лә инде. Дөрөҫөн әйткәндә, ошо өс йылда мин үҙ-үҙемде "яңғыҙлыҡ төрмәһе"нә бикләп, язаға тарттырҙым. Иң тәүҙә "Иблис һуҡмағынан йөрөгәнем өсөн" тип билдәләнем был язамды. Артабан яҡындарыма, туғандарыма килтергән бәлә-ыҙаларым өсөн дә үҙемә яза уйлап сығарҙым: барыһы өсөн дә уларға изгелек менән түләргә. Шулай итеп, үҙ-үҙемде язаға тарттырыуым артабанғы йәшәүемдең мәғәнәһен билдәләне лә ҡуйҙы.

Әле барлығы 4015 көн, йәки 96360 сәғәт мин спиртлы эсемлек тәьҫиренән азатмын, йәғни ошо ваҡыт арауығында ауыҙыма бер тамсы ла алмағанмын. Тәүҙә һәр бер көнөн, сәғәтен һанап барҙым һәм уларҙы үҙемдең оло еңеүем тип баһалайым. Ауылыма ҡайтҡанда мәсеткә таңғы намаҙға инеп ултырҙым, аҙаҡ, форсаты сығып, сиркәүгә лә инеп сыҡтым. Иртәнге тынлыҡта ауылыбыҙ аҡһаҡалдары менән донъя хаҡында гәпләшеп, аҙаҡ намаҙ тауышына ойоп ултырғанда, сиркәүҙә күмәк тауыш менән йырлауҙарын тыңлағанда, үҙемдең Аллаһы Тәғәләгә яҡынлағанымды аңланым. Барыһын да әшкәртте Аллаһы Тәғәлә: миңә борғоланырға, йәки кире юлдан китергә әмәл юҡ. Аллаһы Тәғәләгә яҡынлағанмын икән, тимәк, ул мине ғәфү иткән. Шул саҡ күңелем һәм йөрәгем телгә килгәндәй булды, гүйә, "Һаумы, яңы тормош!" тип өндәште. Уларға ҡушылып ирендәрем дә шул уҡ һүҙҙәрҙе ҡабатланы. Һаумы, яңы тормош!

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошо яҙмаларым гәзиттә баҫыла башлағас, элекке уҡытыусым шылтыратты. "Быларҙы гәзиттә баҫыуыңды кисекмәҫтән туҡтат. Уларҙа һин үҙеңде "эскесе" тип таныйһың. Уҡыусыларҙың да төрлөһө бар, яҡшыға булмаясаҡ, исемгә ҡаласаҡһың...", тип борсолдо ул. Уның менән осрашып һөйләштек, әңгәмәбеҙ өс сәғәткә яҡын дауам итте. Аңлаштыҡ, ул минең фекерҙәремде тыңлағас, был мәсьәләгә ҡарашын үҙгәртте. Бер аҙҙан Хәйбулла районының Таштуғай ауылынан Фәриғә апай Күсәкованан хат килеп төштө. Уның хатынан өҙөк килтерәм:**

**"Быға тиклем мин һеҙҙе шиғырҙарығыҙ, ғөмүмән, ижадығыҙ өсөн хөрмәт итә инем, ихласлыҡ бөркөлөп торған мәҡәләләрегеҙҙе яратып уҡый инем. Был яҙмаларығыҙ мине тетрәндерҙе. Көслө рухлы, үҙегеҙгә ҡарата аяуһыҙ булыуығыҙ хайран итте. Бер аҡыл эйәһе әйткәнсә, "Иң ҙур еңеү - ул үҙ-үҙеңде еңеү". Дәрәжәгеҙҙе, абруйығыҙҙы бысратыуҙан ҡурҡмай, күңел һандығығыҙҙы шар асып, бөтә серҙәрегеҙҙе ил менән уртаҡлашырлыҡ көс табырға, "мин эскесе булдым" тип әйтергә һәр кем баҙнат итмәҫ. Улай ғына ла түгел, һәр көнөгөҙҙө, ғазаптарығыҙҙы тасуирлап, Шешәбикә менән дуҫлығын өҙөргә теләүселәргә методик ҡулланма кеүек кәңәштәр биреүегеҙҙе ҙур егетлек тип баһалайым. Быны тик көслө ихтыярлы ир-егеттәр генә булдыра алалыр. Рәхмәт һеҙгә, ихлас күңелдән эшләгән изгелегегеҙ менән бөтә Башҡортостандың ихтирамын яулағанһығыҙҙыр, моғайын..."**

**Уҡытыусым Халис Килдеғошовҡа, Фәриғә апай Күсәковаға оло рәхмәтлемен. Был яҙмаларым баҫыла башлағас, бик күп ыңғай фекерҙәр ишетергә тура килде. Баймаҡ районының Муллаҡай ауылында Ғабдулла ишан Сәидиҙең ҡәберенә зыярат ҡылыуға килгән өс йөҙләп ҡыҙ-ҡатын затының һәр ҡайһыһы яныма килеп, шәхсән рәхмәт әйтте. "Эскелектән ҡотола алмаған ирҙәребеҙ менән бергәләп уҡыйбыҙ. Ирҙәребеҙ "ҡалай дөрөҫ яҙған, эскән кешенең психикаһын дөрөҫ һүрәтләгән", тип, гәзиттең яңы һанын көтөп ала", ти уларҙың ҡайһы берҙәре.**

**Шуныһы өсөн шатмын: эскелектән ҡотолоуым хаҡында яҙмаларым йәмәғәтселектең иғтибарынан ситтә ҡалманы. Артымдан эйәреүселәр барлығын тойоуым да күңелгә дәрт өҫтәй. Баҡтиһәң, минең кеүек юлды үтеүселәр хәтһеҙ күп икән. Яҙмаларымдың осона сыҡҡан кеүек булһам да, әйтергә теләгән уй-фекерҙәрем барыбер ҙә былар менән генә бөтмәгән булып сыҡты. Һабаҡтарымдың икенсе өлөшө "Эсеүҙән ҡотолоп була" тип атала. Гәзитебеҙҙең киләһе һанынан башлап уларҙы ла уҡырһығыҙ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Ниҙән ҡурҡһаң, шул алдыңа сығыр

Өрәктәрҙән ҡурҡҡан бәләкәй малай тураһында ошондай боронғо риүәйәт йәшәй. Ул бер заман өрәк килер ҙә, уны өйөнән, ғаиләһенән алыҫҡа алып китер, тип ҡурҡҡан һәм был хәлде иҫкәртеү өсөн тылсымға өрәктәргә бәйле бөтә мәғлүмәттәрҙе өйрәнә башлаған. Һәр төн йоҡлар алдынан карауаты тирәләй үҙе күҙ алдына килтергән барлыҡ өрәктәрҙән һаҡлаусы тылсымдар һәм бетеүҙәр ҡуйып сыҡҡан. Риүәйәттә әйтелгәнсә, тәүҙә бер өрәк тә малай тураһында уйламай, әммә тора-бара малайҙың тылсымдары уларҙа ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Ни өсөн малай уларға ҡаршы шул тиклем тылсым ҡуллана? Бер өрәк малайҙың бындай сихыр-арбауҙарын үҙен саҡырыу тип ҡабул итә. Был өрәк уның сихырын урап үтеү ысулын табыр өсөн күп йылдар сарыф итә. Һуңғы сиктә тылсым ҡоршауы аша үтеп инеп, малайҙы урлап ҡаса.

Икенсе риүәйәттә бер король осраҡлы ғына рәүештә хазина - ҡыҙыл яҡут һәм башҡа ҡиммәтле таштар табып ала. Быға тиклем бындай таштарҙы бер тапҡыр ҙа күргәне булмағас, бахыр король уларҙы бөтә ерҙә маҡтанып күрһәтә башлай. Бер ваҡыт уның һарайына сәйәхәтсе килә. Ул королгә был таштарҙың ҡиммәттен аңлата һәм уның был табышҡа ҡарата ни тиклем һаҡһыҙ булыуын киҫәтә. Король үҙенең зиннәтле байлыҡҡа эйә булыуына төшөнөп, ҡыҙыл яҡут һәм ҡиммәтле таштарын ер аҫты келәттәренә йәшерә һәм уның тирәләй күп һанлы һаҡсылар ҡуя. Тиҙҙән күрше һарайҙағы хаким күплектәге һаҡсыларға иғтибар итә һәм күршеһенең ниндәй оло хазинаны һаҡлауы тураһында уйлана башлай. Күрше король уның оло ғәскәренә бер ниндәй ҙә һаҡсылар ҡаршы тора алмай, тигән ҡарарға килә һәм бахыр королдең һарайына һөжүм итеп, уның байлыҡтарын тартып алып китә.

Былар барыһы ла риүәйәттә генә түгел, ә тормошта ла ысынбарлыҡ булып тора: нимәгә ҡаршылыҡ күрһәтәбеҙ, шул беҙгә тартыла. Мәҫәлән, кемдер һыу саңғыһында йөрөргә өйрәнергә теләй, әммә уның ҡолауҙан ҡурҡыуы һыу өҫтөндә тигеҙлек һаҡларға ҡамасаулай. Әгәр һин ҡолау ихтималлығы тураһында уйламайһың икән, саңғыла йөрөргә тиҙ генә өйрәнеп китеүең бик мөмкин.

Әгәр беҙ ысынбарлыҡтағы ниндәйҙер хәлгә, мәҫәлән, өйгә бурҙар төшөү ихтималлығына, йәки тыныслыҡһыҙлыҡ, ҡурҡыу кеүек уйҙарға ҡаршылыҡ күрһәтәбеҙ икән, был эшкә һалған энергиябыҙ беҙ ҡурҡҡан объектты үҙенә тарта башлай. Йыш ҡына бындай күренештәргә әүҙем рәүештә ҡаршылыҡ күрһәтәбеҙ икән, беҙ шуның менән уны үҙебеҙгә тағы ла нығыраҡ йәлеп итәбеҙ. Әгәр ҙә инде ҡурҡҡан әйберебеҙҙе тыныслыҡта ҡалдырһаҡ, моғайын, ул да беҙҙе борсоуҙан туҡтаясаҡ. "Нимәгә ҡаршылыҡ күрһәтһәң, шуны үҙеңә йәлеп итеүеңде" бер ваҡытта ла иҫеңдән сығарма.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

✓ *"Салауат Юлаев" хоккей командаһы тағы ла бер уңышлы уйыны менән һөйөндөрҙө. 1 октябрҙә Мәскәү өлкәһенең МВД хоккей командаһы менән көс һынашып, уларҙы 2:4 иҫәбе менән отто.*



## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**5 декабрҙә** билдәле яҙыусы, публицист, драматург, халҡыбыҙҙың мәшһүр улы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Ғәзим Шафиҡовтың** тыуыуына 70 йыл тулыу уңайынан әҙиптең хәтер кисәһе була. Бай йөкмәткеле кисәлә театрҙың барлыҡ ижади көстәре ҡатнаша, шулай уҡ Ғәзим Ғәзиз улының Рус академия драма, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрҙарында барған пьесалары буйынса спектаклдәрҙән өҙөктәр, хәтерләүҙәр, шиғырҙар, йырҙар яңғыраясаҡ. Кисәлә яҙыусының ҡәләмдәштәре, дуҫтары, яҡындары ҡатнаша. Инеү бушлай. Кисә 19.00 сәғәттә.

**6 октябрҙә** Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан **"Китап" нәшриәтенә 90 йыл** тулыуға арналған тантаналы кисә була. Байрам кисәһендә "Китап" нәшриәтенең ижади хеҙмәткәрҙәре, авторҙары менән осрашыу, китап күргәҙмәһе, шулай уҡ китап һатыу ойоштороласаҡ. Башҡорт дәүләт академия драма театры, Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле сығыштары көтөлә. Инеү бушлай. Кисә 17.00 сәғәттә башлана.

### Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**Ҙур зал**. 14 октябрҙә Саха (Яҡутия) республикаһының "Яҡутия виртуоздары" скрипкасылар дәүләт ансамбле сығыш яһай. Был ансамбль йылдан-йыл күберәк билдәлелек яулай бара. Быйыл ул үҙенең төҙөлөүенә 15 йыл тулыу айҡанлы, был датаны ҙур турне менән ҡаршылай.

**17 октябрҙә** билдәле йырсылар **Нәсимә һәм Азамат Тимеровтар** яңы шоу-программа менән сығыш яһай. Концертта БР халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестры һәм эстрада-джаз оркестры оҙатыуында халыҡ йырҙары, популяр хиттар, яңы йырҙар яңғыраясаҡ. Яратҡан йырсыларыбыҙҙың йыр-моң кисәһенә рәхим итегеҙ!

**Орган залы. 11 октябрҙә** 15 сәғәттә Урта махсус музыка колледжының камера оркестры (художество етәксеһе һәм дирижеры - Владислав Самойлов) сығыш яһай.

Хөрмәтле гәзит уҡыусылар! Түбәндәге һорауға тәүгеләрҙән булып яуап биргән өс кешене Нәсимә һәм Азамат Тимеровтарҙың концертына саҡырыу ҡағыҙы көтә.

**Һорау:** Тимеровтар нисәнсе йылдан алып сәхнәлә эшләй?

## БАШ ЭШЛӘТМӘК




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Мәсетле районы Һөләймән ауылында тыуып-үҫеп, бөгөн Дыуан районының Мәсәғүт ауылында донъя көткән ҡәҙерле атайыбыҙ, ҡартатайыбыҙ, ҡайныбыҙ

**ХАЖИЕВ Ризуан Закирхан улын**

оло юбилейы - **70 йәше** менән ҡайнар ҡотлайбыҙ. Ризуан Закирхан улы - күренекле яҙыусы, абруйлы журналист, ғалим, тиҫтәләгән китап авторы. Атайыбыҙҙың фиҙакәр хеҙмәте юғары баһаланды. Ул Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһы лауреаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.

Ә беҙ уны иң тәүҙә талапсан һәм ғәҙел атай, беҙгә - улдарына, килендәренә, ейән-ейәнсәрҙәренә һәр саҡ иғтибарлы, алдынғы фекерле ғаилә башлығы булараҡ беләбеҙ. Ҡәҙерлеләрҙән-ҡәҙерле, һөйөклөләрҙән-һөйөклө атайыбыҙ! Йылдың иң матур миҙгелдәренең береһендә - алтын көҙҙәң бер көнөндә был донъяға килгәнһең. Сабырлығыңдың төбө һары алтын булһын. Тормоштоң ауырлыҡтарына түҙеп, матурлыҡтарына ҡыуанып, шатлыҡтары менән уртаҡлашып йәшә лә йәшә! Һаулыҡ, оҙон ғүмер, бәхет-шатлыҡтар теләйбеҙ.

**Улдарың Айсыуаҡ, Азат һәм Илгиз, килендәрең Фәриҙә, Эльвира һәм Линария, ейән-ейәнсәрҙәрең Әлиә, Тимур, Эмилия, Артур һәм Эвелина.**

## ХОККЕЙ

### ҠЫУАНДЫРҘЫЛАР

**"Өфө Арена" спорт комплексында бер рәттән ике тапҡыр отторғандан һуң, "Салауат Юлаев" Ҡаҙағстандың баш ҡалаһы Астанала "Барыс" командаһы менән көс һынашты.**

Астанала матч бик көсөргәнешле башланды. Һәр ике яҡ тулҡын-тулҡын булып ҡаршылағы ҡапҡаға ябырылды. Майҙан хужалары хатта уңышҡа өлгәшә яҙып ҡалды. Бары тик юлаевсыларҙың ҡапҡасыһы Александр Еременконың оҫталығы, сослого ғына бәләнән ҡотҡарҙы.

Уйындың етенсе минутында ҡунаҡтар аҙсылыҡта ҡалды. Майҙан хужалары, был уңайлы хәлдә тиҙерәк файҙаланып ҡалырға теләп, ҡунаҡтар яғына дәррәү ташланды. Шул саҡта Сергей Зиновьев, майҙан хужаларын һемәйтеп, йылғыр ғына алға үтте лә шайбаны һул яҡта уйнаған Александр Радуловҡа сойорғотто. Ул шайбаны "Барыс" ҡапҡаһына ҡарай һуҡты һәм иҫәпте асты.

Икенсе осорҙа Александр Пережогин үҙенең мәргәнлеген иҫбат итте һәм иҫәпте икегә еткерҙе. Өсөнсө осор уртаһына тиклем майҙан хужалары таблоһында 0 һаны янып торҙо. Тик бөтөр алдынан ғына улар тәүге яуап голы индерә алды.

Көсөргәнешле осрашыу юлаевсылар файҙаһына 2:1 иҫәбенә тамамланды. Улар, ниһайәт, көйөрмәндәрҙе еңеү менән ҡыуандырҙы!

Әйткәндәй, "Салауат Юлаев" хоккей командаһы тағы ла бер уңышлы уйыны менән һөйөндөрҙө. 1 октябрҙә Мәскәү өлкәһенең МВД хоккей командаһы менән көс һынашып, уларҙы 2:4 иҫәбе менән отто.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

**39-се һандағы кроссворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** 1. Энәлек. 3. Сафуанова. 6. Ҡамасау. 11. Илдус. 12. Вуаль. 13. Илнур (Лоҡманов, Муллабаев). 14. Липки. 15. Адмирал. 18. Ғилманова. 21. Камалов. 26. Тәсбих. 28. Илгизә (Исламғолова). 29. Ҡом. 31. Бабич. 33. Рәмилә (Сәлимгәрәева). 34. Ишара. 35. Радмир (Абдуллин) 36. Мадрид. 37. Нар. 39. Анклав. 42. Комдив. 45. Күлбаба. 47. Нурғәлин. 50. Хәкимов. 55. Лөғәт. 56. Көтөү. 57. Траур. 58. Трико. 59. Варшава. 60. Ишмуллин. 61. Ғайсина.

**Вертикаль буйынса:** 1. Эльмира (Саматова). 2. Клиника. 4. Ассорти. 5. Вавилов. 7. Альбина (Кашанова). 8. Усманов. 9. Один. 10. Лампа. 16. Морс. 17. Рами. 19. Мыйыҡ. 20. Нәғим. 22. Молл. 23. Лари. 24. Стационар. 25. Сәлмәнов. 27. Хәбиров. 28. Ирәндек. 30. Осака. 33. Рам. 34. Ир. 37. Низағ. 38. Регул. 40. Карл. 41. Аида (Әхмәтова). 43. Омск. 44. Драм. 45. Күлбаев. 46. Булатов. 48. Ултырыш. 49. Никотин. 51. Әйүпова. 52. Витрина. 55. Иғлан. 54. Стоик.

**Пароль:** Мостай Кәрим.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ҠАЙТҠЫМ КИЛӘ, ЕРГӘ ЯТҠЫМ КИЛӘ,

## Ерем нуры ҡала күҙемдә...

### Өс һүҙ

Урамдарҙа хатта ҡымшанмай ҙа
Аҡ ҡайындар өнһөҙ торғанда,
Ҡурғаш күккә бағып, бәхилләтеп,
Һары япраҡтарын ҡойғанда;
Киске шәфәҡ һүнеп, сала-сарпы
Сырамыҡтан саҡта өйҙәрҙә,
Алыҫтарҙа ҡапыл күктәр күкрәп,
Ишеткәндә көҙгө көйҙәрҙе;
Ҡотолғоһоҙ ҡойон менән янап,
Һуңғы йәшен ялтлап атылғас,
Яңғыҙлыҡтан, үкһеҙлектән һыҡрап,
Үҙ-үҙенә гүйә ят булғас.
Өс бөртөк күҙ йәшең тамып төштө
Инде күптән ятҡан хаттарға.
Алып китер йән йылытыр һүҙҙәр
Мәңге кире ҡайтыр саҡтарға.
Күктәрҙең шул баҙрап инрәүендә,
Сәғәт зынлап, моңон таратһа,
Ишетерһең бары өс кенә һүҙ:
"Яратам, һөйөклөм, яратам..."

### Әбеш

Һаҡмар ҡуйынында минең ауыл,
Уйым бик йыш уға тоташа.
Әҫәрләнәм шул саҡ, өнһөҙ ҡалам,
Йәки сәсәнләнеп, һүҙ таша.
Әбеш, тиҙәр уны, тарих белмәй,
Ҡайҙан килгән уға ундай дан?
Күктәрендә әммә торна сыңрар,
Яҡтырыр юл шул моң-ялҡындан.
Килгәндәрҙе унда ҡыйын түгел
Тан ҡалдырыу ер-һыу буйлатып.
Миндә иһә башҡа кисерештәр,
Анһатмы ни уны аңлатыу?
Иртәләрен унда бер ҡарт инәй
Сығып баҫа иҫке болдорға.
Күҙҙәрендә - минең һағыштарым,
Һүрелмәҫ нур улар ҡалдырған.
Ай нурына сумған текә ярға
Йүгереп сыҡһа төнөн бер малай,
Иләҫләнеп, минең бала саҡты
Хәтерләтеп торор бер талай.
Сымыры баҫып таңда һыу юлынан
Ҡайтып килһә бер ҡыҙ, бел шуны:
Күнелдә тик моң ҡалыр тип белмәй,
Яраткайным уны ашҡынып.
Өндәшмәйем...
Нинә аңлатырға?
Аңлап бөтмәйем мин үҙем дә.
Ҡайтҡым килә, ергә ятҡым килә,
Ерем нуры ҡала күҙемдә.

### Шул булдымы?

Була шундай: төндәр буйы
Йәнең илай, йөкөң ҡаса.
Хыялыңда - тик бер һорау:
Бындай төндәр туҡтар ҡасан?

Әллә нисек, әллә күпме
Уйҙар баштарымды иҙә:
Күктәрендә әллә болот,
Әллә һүрән ҡояш йөҙә.

Күҙ менән ҡаш араһында
Ҡояш һүнә, болот ирей.
Ҡапыл улар урынында
Һинең серле өнөң йөрөй.

Һин нимәләр һөйләйһеңдер
Өнөңдәге төштәреңдә?
Болоттарҙа өйөрөләп,
Шул уҡ ергә төшкәнеңдә.

Бышылданы ирендәрең -
Унда гүйә, минең көйөү.
Ҡолағымды ярып керә:
-Шул булдымы инде һөйөү?..

Әллә бәхет, әллә ҡурҡыу,
Шул тауыштан һаңғыраумын.
Тирә-йүндә тик бер шаңдау -
Тик бер һорау яңғырауы.

Ул туҡтамай, һис туҡтамай,
Тән үткәнсе, таң еткәнсе.

Ғәзим ШАФИҠОВ

Өндәшмәйем, тик тешләйем
Ирендәрҙе ҡанатҡансы.

### Ялбарыу

Аҡҡош бул мөхәббәтеңдә!
Ғорурлығыңдан ярһып,
Өркөтмә наҙҙы,
Йөрәкте
Ярһа тик йөрәк ярһын.

Хыянат итмә һөйөүгә!
Уны юғалтҡаныңда
Талпын да таштарға ташлан,
Сәсрәтеп ал ҡаныңды.

Аҡҡош бул мөхәббәтеңдә!
Үлемесле сәғәттә,
Боҙҙарҙа йылыт һөйөүҙе,
Алып сыҡ ғәрәсәттән?

### Тирәк мамығы

Тирәк мамығы
Туҙрап ҡойола.
Рәхәтлек йәнгә
Баҙрап уйыла.

Тирәк мамығы
Күмә ян-яҡты.
Үҙе йәбешкәк,
Үҙе яп-яҡты.

Елбәҙәк ҡарҙай,
Өрһән, зым-зыя.
Йәшел сирәмгә
Көмөш нур ҡоя.

Тул йыйып, тирәк
Тарата орлоҡ.
Үсер агастар
Шаулап торорлоҡ.

Тирәк мамығы
Һарыла ергә -
Әйҙәй киләсәк
Йырларға бергә.

Рәхәтлек йәнгә
Баҙрап уйыла -
Тирәк мамығы
Туҙрап ҡойола.

Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ тәржемәһе.

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

### Ҡышҡылыҡҡа ҡуҙғалаҡ

Баҡсала үҫкән ҡуҙғалаҡты ҡышҡылыҡҡа һаҡлар өсөн тиҙ генә ҡайнар һыу менән бешекләп алғас, тишекле сүмес аша үткәреп, һабағын һәм үҙәген алып ташлағыҙ. Йомшаҡ массаны ҡайнар хәлгә еткергәнсе утта тотҡас, стерилләнгән ярты литрлы банкаларға тултырып, тимер ҡапҡас менән ябырға. Ҡыш еткәс, бәлеш өсөн банканы асып, шәкәр, ҡаймаҡ, әҙерәк он ҡушырға ғына ҡала.

### Прәниктәр

3 стакан ойоған һөткә 3 стакан шәкәр, 3 йомортҡа һарыһы, 2 балғалаҡ аш содаһы, он ҡушып, ҡаты ҡамыр баҫырға. Ике ус араһына һыйырлыҡ ҡына итеп ҡамыр киҫәктәрен өҙөп алырға һәм әүәләп, майлы табаға теҙеп, духовкалата талғын эҫелектә бешерергә.

3 йомортҡа ағына ярты стакан шәкәр ҡушып туҡып, прәниктәр өҫтөнә һөртеп, бер нисә секундҡа тағы ла духовкаға ҡуйып алығыҙ.

### Картуфлы-итле запеканка

Картуфты бешереп, эҫе көйө иҙгәс, аҡ май, ҡайнар һөт, тоҙ ҡушып, бер йомортҡа һытып болғатырға. Икенсе һауытҡа бешкән итте, бер баш лы һуғанды ит үткәргестән үткәреп, 1 йомортҡа, аҡ май ҡушып, тоҙлап, борослап болғатырға. Майлы табаға иҙелгән картуфтың яртыһын 2 см ҡалынлығында итеп һалырға, икенсе ҡатҡа итте, өсөнсө ҡатҡа картуфтың ҡалғанын һалырға һәм духовкала тотоп алырға.

### Ҡайнатылған шәкәр

Табаны майлап, утҡа ҡуйырға, бер стакан һөткә ике стакан шәкәр өҫтәп болғата-болғата ҡайнатырға. Бер балғалаҡ ҡаймаҡ өҫтәп ебәрһәң, тәмлерәк була. Ҡуйырып, көрән төҫкә ингәс, һыуытырға. Аҙаҡ табаны шәп янған утҡа 1-2 минутҡа ғына ҡуйып, табаны йылытҡас, уны әйләндереп, ҡаты шәкәрҙе өҫтәлгә төшөргә лә киҫәктәргә һындырып ҡуйырға.

### Суфле

Һауытҡа йомортҡаларҙы һытып, әҙләп кенә һөт ҡойоп туҡырға ла, самалап ҡына тоҙлап, итте һуған менән ит үткәргестән үткәреп, бешереп етеҡкерәмәгән дөгө, аҡ май ҡушып болғатҡас, майлы табаға һалып, духовкала бешереп алырға. Алты өлөш өсөн 6 йомортҡа, 400 гр бешкән ит, 60 гр дөгө, 30 гр аҡ май, 350 гр һөт, 1 бәләкәй генә башлы һуған, тоҙ кәрәк.

Флора БИКЕМБӘТОВА.

ҺИНЕ ЭҘЛӘЙЕМ




**Матур ғаилә ҡороу өсөн 21-28 йәшлек аҡыллы, тәртипле, динебеҙҙе хөрмәт иткән ҡыҙҙар менән танышырға теләйем. Үҙем ауылда йәшәйем, насар ғәҙәттәрем юҡ. Телефон номерым: 8 927 313 74 85.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙ - ҙәренә әйләреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# УЙЛАҒАН УЙҘАРЫБЫҘ

## маңлайға яҙылһа...

"Тәүҙә уйла, шунан һөйлә" - был тәнҡитселәр девизы, "Тәүҙә һөйлә, шунан уйла" - был иждадсылар девизы.

**(Эдуард Форстер).**

Зинһар өсөн, был "идеал" тигән сит ил һүҙен ҡулланып мәшәҡәтләнмәгеҙ, үҙебеҙсә генә "ялған" тиегеҙ ҙә ҡуйығыҙ.

**(Генрик Ибсен).**

Идеялар еңгәндән һуң мәйеттәр ятып ҡала.

**(Симона Вейль).**

Беҙҙең бөтөн уйлаған уйҙарыбыҙ ҙа маңлайыбыҙға яҙылһа, бөтөн ғаиләләр тарҡалып бөтәр ине.

**(Мария Эбнер-Эшенбах).**

Ихласлыҡ - бәләкәйерәк дозала булғанда ҡурҡыныс, ә ҙур дозала - үлемесле.

**(Оскар Уайльд).**

Әгәр ҙә һин берәй танышыңдың һинең турала ни уйлауын белгең килһә... уны асыуландыр.

**(Оливер Уэнделл).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Диңгеҙҙә хеҙмәт итеүсе бер моряк бер ваҡытта ла күрмәгән Роза исемле бер ҡыҙҙан хат ала башлай. Өс йыл хат алышалар булар. Егет был ҡыҙҙың хаттарынан башҡа йәшәй алмауын, үҙе лә аңламаҫтан, уға ғашиҡ булыуын аңлай. Хеҙмәтен тултырғас, улар осрашырға һүҙ ҡуйыша. Бына улар алдан билдәләнгән урында - вокзалда. Егет уйлана төшә: ул Розаның фотоһын да күргәне юҡ, уның нисә йәштә икәнен дә белмәй. Бөгөн ул уны таныр, әлбиттә, сөнки алдан һөйләшкәнсә, Роза түшенә роза сәскәһе ҡаҙарға тейеш була. Ә артабан нисек булыр? Шулай уйлап, тулҡынланып, егет вокзалды байҡай. Бына уның ҡаршыһына түшенә роза сәскәһе ҡаҙаған алтмыш йәштәр тирәһендәге ҡатын атлап килә. "Йә, Хоҙай, ҡасырға кәрәк. Әйләнергә лә китергә..." тип уйлап ала егет бер секунд эсендә. Әммә ул туҡтап ҡала. "Был ҡатын бит хаттар менән мине йыуатты, байрамдарға бүләктәр ебәрҙе, ул минең был ҡылыҡҡа лайыҡлы түгел". Шулай тип уйлай егет һәм ҡатындың алдына барып баҫа. Күрешергә ҡулын һуҙа. Шунда был өлкән ҡатын: "Мин Роза түгел, ул, ана, минең артымда", - ти. Егет ҡатындың артында йөшеренеберәк баҫып торған гүзәл ҡыҙҙы күрә һәм... Әгәр ҙә ул бая боролоп китеп барһа, был гүзәллекте күрмәҫ ине бит, тигән уйҙан тетрәнә... Ә бит күптәр үҙенең бәхетенә табан барған юлдағы бәләкәй генә ҡаршылыҡты ла аша атлап үтә алмай һәм борола ла китә..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5615
Заказ 4244